ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 март (буранай) 2018

№ 11 (793)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Зәйнәб Биишеваны...** уҡыйбыҙ, яратабыҙ



5

**Зәйнулла ишан -** башҡорт халҡының рухи батшаһы



6

**Өйләнешкәс тә...** ата-әсәһенән айырымланмаһын бала



8-9

**Таштағы эҙҙәр кемдеке?**



13

**ТВ-программа** 14

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 31 мартҡа тиклем 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда элекке хаҡтар менән яҙылыу бара. Йәғни һеҙ ай аҙағына тиклем 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 554 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияғыҙҙы редакцияға ебәреп, Рәми Ғариповтың "Сыңрау торна", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре", Йәүҙәт Бәшировтың "Башҡорт хан", Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры" һәм башҡа китаптарға эйә була алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Был арала Рәсәй Дәүләт Думаһы ҡарамағына индерелгән теркәүһеҙ 5 йыл бергә йәшәгән парҙарҙың никахын рәсмиләштереүҙе күҙаллаған закон проекты тураһында ҡыҙыу бәхәстәр булып алды. Ошоға ҡарашығыҙ нисек?

***Даян МӨХӘМӘДИН, эшҡыуар, Өфө ҡалаһы:*** Әлеге закон проекты тормошҡа ашырыла ҡалһа, ул ил граждандары өсөн нимә бирә? Көсләп асылған күҙҙең нуры юҡ, тигәндәй, теләктәре булмаған йәштәрҙең бергә йәшәүен законлаштырырға тырышыу кире һөҙөмтә бирмәҫме? Мин, һәр кем үҙенең теләге менән башҡарырға тейеш был ғәмәлде, тип иҫәпләйем, шуға күрә был закон проектын хупламайым. Законлы өйләнешеү үҙенә күп аспектты ала: бергә мөлкәт йыйыу, өй төҙөү, машина һатып алыу, балалар тәрбиәләү һәм башҡалар. Мөлкәткә ҡағылышлы һорауҙарҙы законға таянып хәл итергә мөмкин булһа ла, балаға ҡағылышлы мәсьәләләр күберәк әхлаҡи яҡҡа ҡайтып ҡала. Күңелендә атайлыҡ хисе юҡ икән, закон нисек кенә ауыҙлыҡларға тырышмаһын, атайҙар үҙ балаһына алимент түләмәй ҡасып йөрөүҙе дауам итәсәк тә. Тойғоларға бойороп та, закон буйынса талап итеп тә булмай шул инде.

Атай-әсәй булырға бәләкәйҙән өйрәтергә, был ҙур яуаплылыҡты үҙ өҫтөңә алырға кәрәклеген тәрбиә нигеҙенә һалырға кәрәк. Бөгөн, дөрөҫөн әйткәндә, бөтә донъя ҡатын-ҡыҙ иңендә. Ул бала ла таба, уны тәрбиәләй, хөкүмәт эшендә эшләй, өйөндәге бихисап мәшәҡәттәрҙе лә үҙ елкәһендә күтәрә. Ир-егеттең яуаплылығын аҡса табыуға ғына ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Һәм быны күптәр ике енес араһындағы тигеҙлек тип атай. Ләкин был дөрөҫ түгел. Ҡатын-ҡыҙ нескә, хисле, гүзәл, физик яҡтан көсһеҙ, әммә әхлаҡи йәһәттән көслө зат. Улар бер ярҙамһыҙ өй ҙә һалып сығырға, балаһын да үҙе күтәрергә мөмкин. Ауырлыҡҡа бирешмәйенсә, һыҡтамайынса йәшәй белә улар. Ә ҡайһы бер ир-егеттәр ошондай яуаплылыҡтан ҡурҡа, шуға күрә ир-кен мөнәсәбәт яҡлы булып сығыш яһай. Ошо рәүешле тулы булмаған ғаиләләрҙең һаны арта. Әсәй, өләсәй тәрбиәһендә үҫкән егеттәр артабанғы тормошонда атай ниндәй булырға тейешлеген аңламайынса буй еткерә. Артабан үҙҙәре лә йүнләп ғаилә ҡора алмай аҙаплана, сөнки ысын ир-ат моделен, ғаиләләге атай ролен белмәйҙәр. Шулай уҡ ҡаты һүҙ, атай тыйыуын күрмәгән малайҙар мыжыҡ, мәмәй, тотороҡһоҙ, эгоист булып сыға күпселек осраҡта. Шуға күрә, бер-береһен хөрмәт итеп, балалар тәрбиәләп йәшәүсе парҙар, загстарҙа теркәлмәһә лә, булһын ул. Бындай өйҙәрҙә бала, исмаһам, тулы ғаиләлә үҫә, ике яҡлы тәрбиә ала. Ә бындай закондар паспортҡа штапм ҡуйыуҙы инҡар итеүсе, әммә шул уҡ ваҡытта үҙҙәрен бер бөтөн итеп тойоусыларҙы ғаилә ҡиммәттәренән һыуындырып ҡуйыуы бар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИҒТИБАР!

# "ҒАИЛӘМ - ҠӘЛҒӘМ"




**Гәзит уҡыусыларыбыҙ белә: "Киске Өфө" республикабыҙҙың, Өфөбөҙҙөң өлгөлө ғаиләләре менән, ғаилә ҡоролошо сәйәсәте, ғаилә институты ҡағиҙәләре менән даими таныштырып бара.**

Ғаилә мәсьәләләре - иң ҙур сәйәсәт, тигәнгә инанғанбыҙ. Сөнки донъялағы бар сәйәсәт ғаиләләрҙән баш ала, изгелек орлоҡтары ла, яуызлыҡ орлоҡтары ла ғаиләлә сәселә, артабан инде "ни сәсһәң - шуныураһың". Шуға ла бөгөн йәштәребеҙгә, балаларыбыҙға, ғөмүмән, йәмғиәтебеҙгә ғаиләләр өлгөһөн күрһәтеү, һәр кемде яҡшы өлгөгә эйәрергә саҡырыу бик мөһим. Был эш быйылғы Ғаилә йылында бигерәк тә етди төҫ алырға тейеш, тигән уйҙабыҙ. "Киске Өфө" бөгөнгө һандан башлап үҙ уҡыусыларына "Ғаиләм - ҡәлғәм" исемле махсус бит тәҡдим итә. Уҡығыҙ, баһалағыҙ, үҙегеҙ ҙә мәҡәлә-тәҡдимдәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ, матур ғаиләләр тураһында беҙгә хәбәр итегеҙ, тигән теләктә ҡалабыҙ.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Өфөлә "Ҡала ҡаҙанышы" XII Ҡала йәмәғәт премияһына конкурс иғлан ителде.** Унып маҡсаты - үҙ ғәмәлдәре менән республика баш ҡалаһының үҫешенә ярҙам иткән, шулай уҡ артабан тормошҡа ашырыу өсөн файҙалы тәҡдимдәр индергән өфөләрҙе билдәләү. Быйыл конкурс Ғаилә йылына арнала һәм унда түбәндәге номинациялар ҡаралған: "Өфө - халҡы артыусы ҡала", "Өфө - бәхетле ғаиләләр ҡалаһы", "Уңышлы хеҙмәт ғаиләләре династияһы", "Өфө - әүҙем гражданлыҡ позициялы кешеләр ҡалаһы", "Өфө - фәндә, мәҙәниәттә һәм спортта юғары ҡаҙаныштар ҡалаһы", "Ҡала алдындағы ҡаҙаныштары өсөн йәмәғәт таныуы". Һәләтле балалар һәм үҫмерҙәр өсөн махсус номинация булдырылған - "Баш ҡаланың киләсәге". Унда 7-18 йәшлек өфөләр ҡатнаша ала. Ғаризалар ҡабул итеү Өфө ҡалаһы, Рәсәй урамы, 108 адресы буйынса 26 мартта башлана һәм 6 апрелгәсә дауам итә. Телефон: 277-15-40.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр замандa ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тəнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҠУЛЫҢДАН НИ КИЛӘ...

***Артур ӘЛИБӘКОВ, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры:*** Донъялағы үҙгәрештәр һәр халыҡтың көнкүрешенә, йәшәү рәүешенә, менталитетына йоғонто яһай. Ошо глобалләшеү осоронда милләттең йөҙөн һаҡлап ҡалыу өсөн уның рухи мираҫын, телен, тарихын бөтөн генә көйө йәш быуынға тапшырыу кәрәк. Быны аңлаған кешеләр эште ғаиләһенән башлай: үҙҙәре башҡортса һөйләшә, башҡорт йолаларын тота, тарихын, мәҙәниәтен ярата һәм балаларында ла кескәйҙән шул ғәҙәттәрҙе тәрбиәләй. Бөгөн беҙ бындай ғаиләләрҙе күреп һоҡланабыҙ икән, әлегә дөйөм шауҡымға эйәреп, үҙ асылын юғалта төшкән башҡа милләттәштәрҙе лә уларҙан өлгө алырға өйрәтергә тейешбеҙ. Сөнки ниндәй генә ауыр заманда ла ата-бабалар беҙгә, киләсәк быуындарға тип һаҡлаған рухи мираҫты, ҡәҙерен белмәй, онотторор ҡалдырыу, юғалтыу еңәйәт буласаҡ.

Республика халыҡ ижады үҙәге лә нәҡ башҡорт халҡының мәнфәғәтен, уның киләсәген хәстәрләп эш итергә бурыслы ойошма. Быйыл, ниһайәт, Роспатенттың Сәнәғәт милке федераль институтында, башҡорт халыҡ музыка ҡоралы ҡурайҙың сығышы Башҡортостан Республикаһында, тигән рәсми ҡарар баҫылып сыҡты. Күмәк эштең һөҙөмтәһе лә ҙур була, был патентты алыуҙа танылған ҡурайсыларыбыҙ менән бергәләп эшләнек. Ҡурай ябай музыка ҡоралы түгел, ул башҡорт халҡының данын киталарға тараҡҡан ҡеүәтле музыка ҡоралы. Ҡурай моно тыңлағанда үткәндәр хәтергә төшә, киләсәккә өмөттәр уяна. Башҡорт халҡының милли үҙаңын уятыусы бер ҡорал булған ҡурайыбыҙҙың киләсәктә лә үҙ асылын юғалтмауы мөһим. Милләттәштәргә үҙ асылыбыҙҙы, рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлап ҡалайыҡ, тип әйтергә теләйем. Был йәһәттән һәр кем үҙ ҡулынан килгән эште башҡарһын, сөнки дөйөм мәнфәғәт өсөн эшләнгән эштең ҙуры, бәләкәйе булмай. Ғаиләлә баланың телен туған телдә астырыуҙан алып дәүләт кимәлендә ҙур проекттарҙы тормошҡа ашырыуға тиклем - бөтәһе лә берҙәй мөһим. Шулай ҙа, ситтән килеп берәйһе эшләп бирер әле, тип көтөп ятмаҫҡа, тәү сиратта үҙебеҙҙе үҙебеҙ ҡайғыртырға тейешбеҙ. Бирелгән мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырмайыҡ, һәр беребеҙҙең көсөнән килгәнде тырыштырайыҡ. Берәүҙәргә халыҡ өсөн файҙалы булған дәүләт кимәлендәге ғәмәлдәр хәлдән килгәндәй булһа, икенселәрҙең бер ауыл, урам йә йортта булһа ла әһәмиәте ягынан һис тә ҡайтыш булмаған эштәргә теше үтәләр. Бары тик битараф булмаҫҡа, рухиәтебеҙ һағына күмәкләп баҫырға кәрәк. Шул саҡта башҡорт халҡының киләсәге өсөн хафаланыр сәбәп ҡалмаҫ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Был арала Рәсәй Дәүләт Думаһы ҡарамағына индерелгән теркәүһеҙ 5 йыл бергә йәшәгән парҙарҙың никахын рәсмиләштереүҙе күҙаллаған закон проекты тураһында ҡыҙыу бәхәстәр булып алды. Ошоға ҡарашығыҙ нисек?

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлйөҙөм ЯҠУПОВА, банк хеҙмәткәре:*** Көлкө лә, ҡыҙғаныс та был ситуация. Бер яҡтан уйлаһаң, проекттү тәҡдим итеүсе сенатор Антон Беляков мәсьәләне дөрөҫ күтәрә кеүек. Икенсе яҡтан сығып ҡараһаң, бында бик күп нескәлектәр бар һәм уларҙың осона сығыуы, ай-һай, ауырға төшәсәк. Мәҫәлән, сроктарҙы нисек билдәләргә? Ниндәйҙер пар бер йыл йәшәне лә юлдары айырылды, ти. Ә ике йылдан улар тағы ла бергә. Был осраҡта уларҙың бергәләгән нисек һанарға? Ә 4 йыл да 5 ай йәшәп айырылғандарҙы был закон яҡлай алмаясаҡ булып сығамы? Законлы ҡатыны булып та, ситтә тағы ла бер ғаилә ҡорған (рәсмиләштерелмәгән) ир-егеттәрҙең барлығы бер кемгә лә сер түгел. Күҙ алдына килтерәйек. Ул үлеп китте, ти. Уның мөлкәтенә законлы кәләше һәм уларҙың балалары ғына түгел, ә вафат булыусы менән бергә 5 йыл йәшәүен иҫбатлай алған, асылда бөтөнләй ят булған кеше лә дәғүә итә аласаҡ. Йәки был законға таянып түләнмәгән кредиттарҙы ҡаплата башламаҫтармы? Бергә йәшәй башлағанға тиклем алынып, әллә ҡасан тотонолоп бөтөлгән кредит өсөн ниңә башҡа кеше түләргә тейеш? 5 йыл дауамында бергә йәшәгән өсөн генә үҙенең бер ҡысылышы булмаған займды түләргә мәжбүр буласаҡмы ир йә ҡатын? Ә түләнеп бөтҡәс, бурыслы тиҙ генә юҡҡа сыҡмаҫмы? Ғөмүмән, һораүҙар күп, ә яуаптар юҡ. Мәғәнәһеҙ закон проекты, тип уйлайым. Балаларға алимент түләтеү йәһәтенән яҡшы сара, тип ҡаршы сығыр кемдер. Бөгөнгө көндә законлы никахта тыуған балаларына ла аҡса түләмәй ҡасып йөрөүселәр иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Был закон ҡабул ителһә, уларҙың һаны тағы ла артасаҡ. Шулай уҡ мөлкәт бүлеү буйынса судҡа мөрәжәғәттәр күбәйәсәк. Ә был, үҙ сиратында, дәүләт ҡаҙнаһына, адвокаттарға өҫтәмә килем килтерәсәк. Шуға күрә лә төрлө кимәлдәге адвокаттар үҙҙәре йәки депутаттар аша ошондай закон проекттары тураһында һүҙ ҡуйырта ла инде.

***Рәсих НИҒӘМӘТОВ, хаҡлы ялда:*** Бик тә кәрәкле закон. Беренсенән, ниндәйҙер кимәлдә балаларҙы яҡлаясаҡ. Икенсенән, рәсми никахҡа тормайынса оҙаҡ йылдар йәшәп тә, ире үлгәндән һуң уның туғандары тарафынан урамға ҡыуып сығарылған ҡатын-ҡыҙҙар әҙәйәсәк. Өсөнсөнән, рәсмиләштерелгән никахта булғандар барыбер ҙә айырылышыу ягын ҡарамай, бәхәсләшкән осраҡта тиҙерәк яраша. Ә иркен мөнәсәбәттә булғандар тауыш сыҡҡан һайын ишекте шартлата ябып сығып китергә әҙер генә тора, сөнки уларҙы бер нәмә лә бәйләмәй. Шулай уҡ был закон ҡабул ителһә, дәүләт тә ота. Бөгөн күпме ҡатын-ҡыҙ ирле көйөнсә яңғыҙаҡ әсәй булараҡ төрлө ташламалар ала, ә шул уҡ ваҡытта балалар тулы ғаиләлә тәрбиәләнә. Мин бында төрлө донъяуи хәлдәр арҡаһында ысынлап та яңғыҙ ҡалған әсәйҙәр тураһында әйтмәйем. Бындай практика күп илдәрҙә ҡулланыла. Мәҫәлән, Франция, Канада, Испанияла, шулай уҡ Эквадорҙа күпмелер ваҡыт бергә йәшәүселәр рәсми никахта булғандарҙың һымаҡ уҡ хоҡуҡҡа эйә. Ә Ҡытайҙа никахһыҙ бергә тороу бөтөнләй мөмкин түгел. Бының өсөн хатта штраф һалына. Ә беҙҙә һәр өсөнсө ғаилә рәсми никахһыҙ йәшәй. Был, минеңсә, дөрөҫ түгел. Бәлки, дәүләт кимәлендәге закон бындай күренешкә сик ҡуйыр.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА яҙып алды.**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# ЯУЛАНҒАНДЫ ЮҒАЛТМАЙЫҠ, ТИМ



**Февралдән мәктәптәр буласаҡ 1-се класс уҡыусыларынан документтар ҡабул итә башланы. Һәр атай-әсәй балаһының уңышлы, белемле һәм тәрбиәле булыуын теләй һәм иң яҡшы уҡытыусыға, алдынғы белем биреү учреждениеһына бирергә хыяллана.**

Күптән түгел элекке мәҡәләм геройы улың ниндәй мәктәпкә биреү тураһында кәңәшләшеп шылтыратты. Йәшәгән урындары ҡала ситендәге биҫтәләрҙең береһендә. Шуға күрә, мәктәптең алыҫлығы йәки яҡынлығы мөһим түгел. Шуны иҫәпкә алып, Кинйә Арыҫланов исемендәге Башҡорт гимназияһын тәҡдим иттем.

- Атаһы риза түгел шул. Башҡортса һөйләшә белгәс, еткән. Әйҙә, ана урыҫса, инглизсә уҡыһын. Берҙәм дәүләт имтихандары етһә, балаға ауырға тура киләсәк, ти, - тип икеләнде йәш әсәй. - Унда бит бөтә фәндәр башҡорт телендә уҡытыла, тиҙәр...

Күптәр шулай гимназияла уҡытыу тик башҡортса ғына тип уйлап, ныҡ хаталана. Уҡыу программаһы, китаптар, әсбаптар, дәреслектәр — бөтәһе лә башҡа мәктәптәрҙәге кеүек. Өҫтөнлөктәргә килгәндә, улар күберәк. Мәҫәлән, унда урыҫ теле, сит телдәр кеүек, ике төркөмгә бүлеп уҡытыла. Тимәк, уҡыусыларға ваҡыт та, мөмкинлек тә күберәк бирелә тигән һүҙ. Белем сифаты тураһында Берҙәм дәүләт имтихандары ла йыл һайын иҫбатлай. Былтыр мотлаҡ фәндәрҙән, йәғни, урыҫ теле һәм математиканан БДИ буйынса гимназистарҙың "икеле" билдәләре булманы. Ғөмүмән, гимназияның күрһәткестәре республиканың уртаса кимәленән бер ҡасан да төшкәне юҡ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Төбәк Башлығы республика Хөкүмәтенә йәш уңышлы идарасылар араһында "Башҡортостан лидерҙары" конкурсын әҙерләргә һәм уҙғарырға йөкләмә бирҙе. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, Мәғариф министрлығы һәм Хөкүмәт йәштәр сәйәсәте өлкәһендәге алымдарҙы яңынан ҡарап сығырға һәм өмөтлө егет-ҡыҙҙарҙы Башҡортостанда ҡалдырырға булышлыҡ итергә - юғары уҡыу йорттарын нығытырға, заманса эш урындары булдырырға, мотивация системаһын төҙөргә тейеш.

✓"Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы - балалар күҙлегенән" баҫмаһы донъя күрҙе. Республикалағы Төп закондың һүрәттәр менән биҙәлгән балалар версияһы Башҡортостандың Конституция суды уҙғарған балалар һүрәте конкурсы йомғаҡтары буйынса әҙерләнгән. Унда республика Конституцияһының туғыҙ бүлеген һәм 80-дән ашыу статьяһын һүрәтләгән 212 рәсем (180 биттә) тупланған. Статьяларҙың һәр береһе рус һәм башҡорт телдәрендә бирелгән.

✓Синоптиктар фаразынса, шәмбе, 17 мартта, һауа торошо боҙола: төндә күпселек районда ҡар, көндөҙ иһә епшек ҡар яуыуы көтөлә. Айырым урындарҙа боҙлауыҡ, ҡар һырынтылары. Көндөҙгө сәғәттәрҙә температура 0,-5 градус тәшкил итә.

✓Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы кесе һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары өсөн аукционда ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итә башланы. Әбйәлил, Әлшәй, Архангел, Аҫҡын, Бәләбәй, Балаҡатай, Белорет, Бөрө, Бөрйән, Ғафури, Дыуан, Дүртөйлө, Ейәнсура, Йылайыр, Иглин, Иниәр, Ҡариҙел, Маҡар, Нуриман, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Учалы урмансылыҡтары биләмәһендә 87,3 мең кубометрлыҡ ағас әҙерләү өсөн һатыуға 25 лот билдәләнде. Ғаризалар 6 апрелгә тиклем ҡабул ителә.

✓Эстонияла ҡышҡы йөҙөү буйынса донъя чемпионаты тамамланды. Ярышта 48 илдән 1300-гә яҡын йөҙөүсе ҡатнашты. Рәсәй йыйылмаһы составында Башҡортостандан өс морж: Артур Сабуров (20-29 йәш), Людмила Измайлова (50 йәшкә тиклем) һәм Рөстәм Хангилдин (60-64 йәш) сығыш яһаны. Улар араһынан Рөстәм Хангилдин ғына ике миҙал яуланы. 100 метрлыҡ арала ул бронза призер булһа, 50 метрҙа көмөш миҙал алды.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҮҪЕШӘЙЕК, КАМИЛЛАШАЙЫҠ!

**Әллә ологайыу касафаты, һуңғы йылдарҙа милләт яҙмышына байҡау яһап, атай-олатайҙарыбыҙ өлгәшкән уңыштарға ҡыуанып-ғорурланып, уңышһыҙлыҡтарының сәбәптәрен эҙләп, бик көйгәләккә әйләнеп киттем әле.**



Салауат батырыбыҙға ла: "Шул тиклем талантың була тороп, башҡорт башын арттырып, үҙ баланды үҙең тәрбиәләү менән мәшғүл булыу урынына, йәп-йәш көйөнсә ятаһың сит-ят ерҙәрҙә. Урыҫ менән килешеүҙең бөтән сараһын тапманыңмы ни?" - тип һуҡранып та алғылайым. Урыҫ тәрбиәләгән балаң башҡорт рухында үҫмәй бит инде ул, тип тә ебәрәм ҡайсаҡ. Халҡыбыҙ үҙ ерҙәре, үҙ Ватаны өсөн көрәшкәнен аңлаһам да, был ихтилал-яуҙар башҡорт һанын да кәметкән шул, баш эймәйем, тип, күпме баш һалынған. 1812 йылда француздар менән һуғыш ваҡытында ни уйлап 28 полк ебәрелде икән? Әйтерһең дә, шул уҡ илдә йәшәп ятҡан ил һаҡлаусы башҡа халыҡ бөткән. Бына ошо фекерҙәрем менән уртаҡлашҡым килгәйне.

Алтын урталыҡ ҡайҙа һуң? Башҡорт башын нисек именлектә һаҡлап алып ҡалырға? Ни хәл итәһең - яугирлыҡ ҡаныбыҙҙа, тип, һәр яуға күкрәк киреп, бар халыҡтан да алданыраҡ ташланһаҡ, бөтөнләй кәмеп китмәҫбеҙме? Бындай батырлығыбыҙ икенселәр файҙаһына булып ҡуйһа-сы?..

Һуңғы айҙарҙағы тел тураһындағы көсөргәнешле ваҡиғаларҙан һуң, ни сәбәптәндер, көсөм етмәҫтәй ошондай һорауҙарға яуаптар эҙләп аҙапланам. Телдең юғалыу-юғалмауы тураһында һүҙ сығарһалар ҙа уйҙарым менән милләтебеҙҙең кәмеү-кәмемәүенә бәйле фекергә әйләнеп ҡайтам.

Яр аҫтынан яу сыҡҡан, тигәндәй, йә бер сәбәбе, йә икенсеһе сығып ҡына тора. Бөгөн дә егеттәребеҙ үҙ республикабыҙҙан ситтә, бөтөнләй сит тарафтарҙа барған һуғыштарҙа баш һала. Ниндәй фиҙаҡәрлек һуң был, тип аптырайым. Эшкинмәгәндәренә ғаилә лә, бала ла, Ватаны ла, теле лә кәрәкмәй, түбәгә төкөрөп ята бирә, ә бына тигән аҫылдары баш һала. Ваҡыт үтә бара ошо эшкинмәгәндәргә көн ҡала күрмәһен, Аллаһым үҙе һаҡлаһын халҡымды мәкерлеләрҙән, ялҡауҙарҙан. Ундайҙарҙан тыуып, ата һөйөүе күрмәгән баланан ни көтмәк кәрәк тә, Ватаныңа, теләнә һөйөү нисек өмөт итмәк кәрәк...

Һәр ауыр уйҙың аҙағында эшлекле тәҡдим дә булырға тейеш бит әле. Ошо прицибымдан сығып, гәзит уҡыусыларға үҙ фекеремде еткерел ҡуяйым. Һөнәрем буйынса уҡытыусы булараҡ, философия дәрестәрендә (йә класс сәғәттәрендә) уҡыусыларҙы ошо темаға яҡынайтып фекер йөрөтөргә, йүнәлеш бирергә, фәлсәфә ҡорорға өйрәтергә кәрәктер, тип уйлайым. Ир-атһыҙ ғаилә юҡ, тимәк, тел юҡ, тел булмағас, Ватаның юҡ һ.б. тигәндә егеттәребеҙ мәктәп йәшендә үк аңлап, үҙҙәрен Ватан өсөн "ҡорбанлыҡ" тип түгел, ғаиләһе өсөн терәк-таяныс булып үҫһендәр ине. Онотмаһағыҙ, ошоға тиклем беҙ ғаилә ҡиммәттәренә иғтибар ҙа бүлмәй, ир-ат - ил һаҡсыһы тигән һүҙҙәрҙе бала мейеһенә күберәк тылҡып, ил өсөн, ер өсөн барыһынан да алдараҡ баш һалыу башҡортлоҡ тип аңлата килә инек. Халҡыбыҙҙың кәмеүенең бөтән сәбәптәре - ир-егеттәрҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың яңғыҙлығы, эскелек һәм башҡа сәбәптәр тураһында бөгөн генә түгел, һәр гәзит һайын һәм һәр ерҙә тигәндәй һүҙ алып барыла. Хөрмәтле гәзит уҡыусылар, һеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе лә белге килә, бәлки, үҙегеҙҙең дә эшлекле тәҡдимдәрегеҙ барҙыр? Төҫ-ҡиәфәтебеҙ Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелһә лә, аң кимәлебеҙҙе үҫтереү Уның тарафынан үҙебеҙгә йөкмәтелгән бит. Шуның өсөн, үҫешәйек, камиллашайыҡ, тигәнгә ниндәй фекер ҡушырһығыҙ?

**Нәзиә БИКБОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

Өҫтөнлөктәрҙән тағы шуны әйтергә мөмкин: бында бөтә саралар башҡорт һәм урыҫ телдәрендә алып барыла. Башҡа белем биреү учреждениеларынан айырмалы, түңәрәктәр эше булмай. Ә иң мөһиме, йәш быуынға төплө белем биреү, уларҙы үҙаллы тормошҡа әҙерләү менән бер рәттән, ватансылыҡ һәм илһөйәрлек тәрбиәһенә ҙур иғтибар бүленә.

-Ҡаланың бөтән мәктәптәре лә, әлбиттә, бик яҡшы эшләй. Уларҙың бөтәһе лә спорт ҡаҙаныштары, олимпиадалар еңеүселәре, алдынғы уҡытыусылары, уҡыусылары менән дан тота, - тим йәш әсәйгә. -Ә шулай ҙа 9-сы гимназияға башҡорт булғаның өсөн генә бирергә була. Уҡыу йорто тап һеҙҙең балалар өсөн асылған бит. Булғандың ҡәҙерен беләйек, яуланғанды һаҡларға кәрәк.

Уҡыу йылы башында туған телдәрҙе уҡытыуға бәйле килеп тыуған ҡатмарлы хәл дә атай-әсәйҙәрҙә ҡапма-ҡаршылыҡлы фекер тыуҙырып өлгөрҙө. Туған телен уҡыған, өйрәнергә теләгән балалар күберәк булһа, был ябай булмаған мәсьәлә, бәлки, тыумаған да булыр ине.

Үҙен ошо ерҙең илһөйәре тип иҫәпләгән кеше туған телде һаҡлап ҡалыуҙа ҡанундар ғына түгел, ә иң беренсе беҙ үҙебеҙ, ошо милләт вәкилдәре яуаплы икәнен белергә тейеш. Балабыҙҙы башҡорт мәктәбенә, класына биреп, башҡортса тапшырыуҙар ҡарап, гәзит-журнал, китап уҡып, телебеҙҙең ҡулланыу даирәһен киңәйтәбеҙ, уның абруйын күтәрәбеҙ. Берҙәм дәүләт имтиханына һылтанып, баланы туған телен өйрәнеүҙән мәхрүм итеп, быуаттар буйы тупланған рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлай алмаған быуын үҫтермәҫбеҙме икән?..

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***43-се күҙәтеүем.*** Һуңғы йылдарҙа туйҙарҙы кафеларҙа, рестарандарҙа, ҡыҫҡаһы, бер урында һәм бер көндә үткәреү модаға инеп китте. Әлбиттә, былар барыһы ла ваҡытты һәм сығымдарҙы экономиялау маҡсатында башҡарыла. Боронғоса, барлыҡ йолалар үтәлгән туйҙар хәҙер һағынып ҡына һөйләрлек хәтирәләр булып ҡала бара. Ниндәй күркәм ул туй йолалары. Беҙҙең яҡта, мәҫәлән, тәүҙә ҡыҙҙың ата-әсәһенә һөйләшергә, аҙаҡ әйттерергә килерҙәр ине. Һөйләшеп килешеү бер көндә башҡарылһа, әйттерергә килгәндә ике көн үтеп китә. Әйттереүгә кейәү бала, кейәү үңәре, кейәүҙең үҙенән өлкән бер ир туғаны килә. Был ике көндә никах уҡыла, ҡыҙ йәшерелә, егет менән ҡыҙ аҡ келәттә ҡауыша. Ҡауышҡан төндөң таңында ҡыҙҙың кескәй туғандары: ҡәйнештәре һәм балдыҙҙары еҙнәй бүләге алырға килә. Еҙнәй кеше бер туған ҡәйнештәренә мотлаҡ рәүештә бәке, башҡаларына аҡса бирергә тейеш. Кейәү кеше ҡайныһы менән ҡәйнәһенә тейешле бүләген бирә йә әйтә. Шул көндө "Кейәү сәйе" йолаһы үтә. Туйға тиклем кейәү ҡайны йортона килеп кейәүләп йөрөй. Ҡыҙ ягынан кейәүҙең йортона туй өсөн һуйыласаҡ малды алырға киләләр. Туй ҡыҙҙың ағаһы өс көн һуҙылмында үтә. Ҡоҙалар ҡыҙҙың йортона килеп төшөр алдынан "кот алып ҡасыу" йолаһы башҡарыла. Тәүге көндә - "Ҡыҙыл туй", икенсе көн - "Йыуаса", өсөнсө көн - "Сыбыртҡы ите". Был өс көндөң тик үҙенә генә хас йолалары бар. Кейәүҙең ата-әсәһе өс көндә лә ҡыҙҙың ата-әсәһенең йортонда төп ҡоҙа, төп ҡоҙағый. Ә егеттең башҡа туғандарын иһә парлап-парлап ҡыҙҙың туғандары үҙҙәренә ҡоҙа (уҙаҡ) итеп алып, төп йортта үткән байрамдан һуң йортонда үҙҙәренә алып ҡайта, ҡунаҡ итә, бүләк бирә. Өсөнсө көндөң һуңында ҡыҙҙы кейәү йортона оҙаталар. Кейәү йортонда "Килен һөйөү", "Һыу юлы күрһәтеү" йолалары башҡарыла, еңгәй үҙенең ҡәйнештәренә, бикәстәренә сигелгән ҡулъяулыҡ, янсыҡ бүләк итә. Ҡоҙалар ҡайтҡандан һуң иртәгеһе көнөнә ҡыҙҙың ата йортона саҡырыусы ебәрелә. Саҡырыусыға мотлаҡ рәүештә бүләк бирелә. Ҡыҙ яғында туйҙа ҡатнашҡан барыһы ла кейәүҙең ата йортона өс көнгә ҡунаҡҡа килә. Төп йортта үткән мәжлестән һуң кейәүҙең туғандары үҙҙәренең ҡоҙаларын (уҙаҡтарын) өйҙәренә алып ҡайтып ҡунаҡ итә, бүләк бирә. Ҡоҙалар ҡайтып киткәндән һуң "Килен сәйе" йолаһы үтә.

Ҡыҫҡаһы, егет менән ҡыҙҙың өйләнешеүе сәбәпле үткән байрам тантаналары беҙҙең яҡта элек 10-12 көнгә һуҙыла торғайны. Был ваҡыт араһында ике яҡтан да ҡоҙалар бер-беренә шул тиклем әҫенешеп, ысын мәғәнәһендә туғанлашып бөтәр ине. Хәҙер иһә ике яҡтан да, ҡыҙҙың һәм егеттең туғандары бер-береһе менән ныҡлап танышып та өлгөрмәй ҡала. Яңы барлыҡҡа килгән ғаиләнең ныҡлығын ошо ҡоҙалар араһында барлыҡҡа килгән туғанлашыу һаҡлағандыр ҙа инде. Хатта айырылышыуға етди сәбәптәр килеп тыуған хәлдә лә, ҡоҙалашҡан туғандарының мөнәсәбәтен боҙмаҫ, туғанлыҡты өҙмәҫ өсөн генә булһа ла, ғаилә тарҡалмай һаҡланғандыр. Йолалар юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән бит инде. Хәҙер йәштәр араһында йыш күҙәтелгән айырылышыуҙарҙың бер сәбәбе туй йолалары тулыһынса үтәлмәүгә лә бәйләлер, тип уйланыла.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Ошо йылдың ғинуар айы йомғаҡтарына ярашлы, Башҡортостан торлаҡ төҙөлөшө буйынса Волга буйы төбәктәре араһында дүртенсе урында тора. Йән башына торлаҡ төҙөү буйынса республика алтынсы урынды биләй, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетынан.

✔Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Ғәрәп теле үҙәге асылды. Үҙәк Башҡорт дәүләт педагогия университетының Ресурс үҙәге һәм Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының Рәсәй ислам университеты өлөшө булараҡ башҡорт филологияһы факультеты нигеҙендә ойошторолдо.

✔Йыл башынан Башҡортостандың баш ҡалаһында рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һаны бер аҙға артҡан һәм 5,3 мең кешегә еткән. Хәҙер мәшғүллек хеҙмәтендә бөтәһе 5,8 меңгә яҡын Өфө гражданы иҫәптә тора. Шул уҡ ваҡытта йыл башынан эш тураһында тәҡдимдәр яҡынса ике меңгә кәмегән. Мәшғүллек хеҙмәтенең һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, Өфөләге вакансиялар банкында 157 мең самаһы эш урыны иҫәпләнә.

✔Башҡортостанда ауыл хужалығы кооперативтарын ойоштороу буйынса әүҙем эш башланды. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов һүҙҙәренсә, әле бөтөн донъяла үҫешкән кооперация агросәнәғәт комплексын үҫтереүҙә мөһим роль уйнарға тейеш. 2018 йылда республикала һөт, ит, йөн, емешеләк эшкәртеү өсөн ҡорамалдар һатып алынасаҡ. Ауылда кешеләр үҙ-үҙҙәрен эш менән тәьмин итәсәк.

✔Әбйәлил районында агротуризм буйынса семинар үтте. Ул Урал арьяғы һәм Төньяҡ-көнсығыш төбәктәре өсөн ойошторолдо. Башҡортостандың Туризм һәм эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитетында хәбәр итеүҙәренсә, сара күсмә квалификацияны күтәреү курстары формаһында "Яҡтыкүл" шифаханаһында булды. Уны Рәсәй Ауыл хужалығы учреждениелары - Рәсәй агросәнәғәт комплексының кадрҙар тәьминәте академияһы белгестәре үткәрҙе. 12 апрелгә Баймаҡ, Бөрйән, Учалы, Йылайыр районларында агротуризмды үҫтергән урындағы фермерҙар ҡатнашлығында түңәрәк өҫтәл күҙалланған.

**"Башинформ"дан.**

БАШ ҠАЛАМ



# БАЛА ТӘРБИӘҺЕНДӘ...

## һәр ысул отошло

**Башҡорттоң юлдашы - ат, ҡоралы уҡ булған. Атҡа атланып, ҡулына уҡ-һаҙағын тотоп, 1812 йылғы Ватан һуғышында Европаны таң ҡалдырған атай-олатайҙарыбыҙ. Ләкин тормошобоҙға прогресс килеп инеү менән, асылыбыҙҙы юғалттыҡ. Аттарҙы машина алыштырҙы, уҡ-һаҙаҡтар ҙа музейҙарҙа ғына ҡалғайны. Әммә йәшәйеш теҙгене энтузиастар ҡулында әле.**

Шундай кешеләрҙең береһе - Юлай Ғәлиуллиндың фиҙаҡәрлеге һөҙөмтәһендә баш ҡалала традицион яндан уҡ атыу шөғөлө ҡабаттан тергеҙелеп, боронғо ян-һаҙаҡтар, уҡтар ғына түгел, милли кейем өлгөләре реконструкциянып, милләтебеҙҙе асылына ҡайтарырға бер аҙым яһалды. Бөгөн был йүнәлеш аүҙем үҫтерелә, республиканың тиҫтәнән ашыу районында уҡ атыу менән шөғөлләнәләр һәм ярыштарҙа ҡатнашалар.

Әммә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшеү өсөн белемендә һәр саҡ камиллаштырып, оҫталығынды күнекмәләр ярҙамында арттырып та тороу кәрәк. Был йәһәттән Өфөлә капиталь ремонттан һуң Совет районындағы 94-се лицейҙың тиры асылыуы үҙе бер ваҡиға булды. Унда балалар ғына түгел, ололар ҙа һәләттәрен үҫтереү мөмкинлегенә эйә.

Бынан тыш, "Глобус" Балалар ижады үҙәге ҡарамағында традицион яндан уҡ атыу буйынса "Төньяҡ амурҙары" клубы ла эшләй. Теләүселәргә "Мәргән уҡсы" ойошмаһы директоры Юлай Ғәлиуллин, инструктор Фидан Сәғитов, клуб етәксеһе Урал Мортазин оҫталыҡ дәрестәре үткәрә, уҡ атыу серҙәренә төшөндөрә. Миненсә, бындай клубтар йәки түңәрәктәр баш ҡаланың һәр районында, һәр мәктәбендә ойошторолһа ла насар булмаҫ ине, сөнки ул спорттың бер төрө булып, балаларҙы урам йоғонтоһонан, насар ғәҙәттәрҙән аралап тора. Ябай ғына кеүек күренһә лә, кешене физик һәм интеллектуаль йәһәттән үҫтерә. Шул уҡ ваҡытта милли мәҙәниәткә, тарихҡа һөйөү тәрбиәләй, рухты күтәрә.

Бөгөн донъяның ҡайһы ғына иленә генә барма, ундағы халыҡ ин элек үҙенең мәҙәниәте, йолалары, аш-һыуы менән таныштыра. Шуға күрә халҡыбыҙҙың шундай ғөрөф-ғәҙәттәрен, мәҙәниәтен баш ҡалабыҙҙа кинерәк таратыу уңышлы буласаҡ, тип уйлайым, сөнки туристар йәки башҡа ҡунаҡтар килгәндә уларҙы районндарға, ауылдарға алып сығыу мөмкинлеге ҙур түгел, ә баш ҡаланың теләгән бер районына алып барыу еңелерәк. Тимәк, башланғысты хупларға һәм уның артабанғы үҫешенә ярҙам итергә кәрәк.

**Дамир ҒӘЛИЕВ.**
**Өфө ҡалаһы.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘЙҘӘ, АУЫЛҒА!



**Юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарын тамамлап, ауылға эшкә ҡайтҡан белгестәргә бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр, элекке йылдар менән сағыштырғанда, биш тапҡырға арттырылды.**

Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөлә барған Агросәнәғәт форумының пленар ултырышында ошо турала белдерҙе. Атап әйткәндә, ауылға эшкә килгән юғары белемле белгестәргә - 500 мең, урта һөнәри белемгә эйә булғандарға 300 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһында һүҙ бара. Был 2015-2016 йылдар менән сағыштырғанда биш тапҡырға күберәк. Республика башлығы вуздарҙа студенттар өсөн һөнәрҙәр исемлеген замана талаптарға ярашлы яңыртыуҙың мөһимлеген дә билдәләне. "Ауыл хужалығында һөнәрҙәр йыйылмаһы составы үҙгәрәсәген аңлайбыҙ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ул. - Әлбиттә, робот техникаһы, һанлы системаға күсеү ҡулланыла. Беҙ бөтөнләй икенсе кимәлдәге - заманса, белемле белгестәр кәрәк буласағын күрәбеҙ. Ресурстарҙы ошондай белгестәр әҙерләүгә йүнәлтәбеҙ".

# ЗАМАНСА ҠАЛА



**Өфө ҡалаһы икенсе йыл рәттән граждандар инициативаһына нигеҙләнгән заманса ҡала мөхитен формалаштырыу буйынса федераль проектты тормошҡа ашырыуҙа ҡатнаша.**

2018 - 2020 йылдарға ҡабул ителгән биш йыллыҡ программаға ярашлы, быйыл уны тормошҡа ашырыуға республика буйынса 1 миллиард һум, шул иҫәптән ҡала округына 323,6 миллион һум бүлеү планлаштырыла. Был сумманың 154,3 миллион һумы 55 ихатаны төҙөкләндереүгә тотоноласаҡ. Ҡалған өлөшө йәмәғәт территорияларын төҙөкләндереүгә йүнәлтеләсәк. Бирелгән ғаризалар буйынса әлеге ваҡытта 10 территория һайланған, уларҙың финанслауы сираты 18 мартта ойошторласаҡ рейтинг тауыш биреүендә асыҡланасаҡ. Шулай уҡ быйыл күп фатирлы йорттарҙың ихата территорияларын төҙөкләндереү буйынса урындағы инициативаларға нигеҙләнгән проектты тормошҡа ашырыу ҙа дауам ителәсәк. Был йәһәттән республика бюджетынан Өфөгә 140,9 миллион һум бүленгән. Ҡала бюджетынан 21,1 миллион һум бүлеү һәм халыҡтан 7,1 миллион (5 проценттан да кәм түгел) йыйыу ҡулланыла. Шулай итеп, дөйөм финанслау 169,1 миллион һум тәшкил итәсәк. Әлегә 299,6 миллион һумлыҡ 113 ғариза ҡабул ителгән һәм конкурс комиссияһы уларҙы икенсе этапҡа һайлап алыу менән мәшғүл.

# КҮҘГӘ-КҮҘ ҠАРАШЫП



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге делегация Калинин районы халҡы менән осрашты. Халыҡ юлдарҙы ремонтлау, социаль объекттар төҙөлөшө, йәмәғәт транспорты тураһындағы һорауҙарын етәкселәргә шәхсән бирә алды.**

Мәҫәлән, Николай Фазлаев Өфө-Шаҡша автоюлын ремонтлау планлаштырыламы, юҡмы икәне менән ҡыҙыҡһынды. Алынған яуап уны тулыһынса ҡәнәғәтләндергәндер, моғайын, сөнки быйыл 51 урамды ремонтлау ҡулланыла, шуларҙың 16-һы Калинин районына ҡарай, шул иҫәптән Өфө-Шаҡша автоюлының Сквозной урамынан Советтар урамына тиклемге 2,4 километр өлөшө лә ремонтланасаҡ. Шулай уҡ киләсәктә Ушаков урамынан Ҡариҙел йылғаһы аша һалынған күпергә тиклемге ара ла йүнәтеләсәк. Галина Болоненкованы Инорс биҫтәһендә спорт объекттары төҙөлөшө ҡыҙыҡһындыра. Был йәһәттән былтыр декабрҙә Тәхвәт Йәнәби бульварында дөйөм майҙаны 3 мең квадрат метр булған өс ҡатлы бассейн төҙөлә башлаған. Объект республиканың 100 йыллығын байрам иткәндә сафҡа индереләсәк. Наталья Усманова Максимовка ҡасабаһында яңы балалар поликлиникаһы төҙөлөү йәки иҫкеһен реконструкциялау мөмкинлеге менән ҡыҙыҡһынды. Ни тиһәң дә, хәҙер бында балалар һаны ике меңгә етеп бара икән. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, бөгөн иҫке бинаны һүтеп, уның урынына модулле ауыл табип амбулаторияһын төҙөү мәсьәләһе ҡарала. Граждандарҙың һорауҙарына яуап биреп, муниципалитет башлығы осрашыуҙа ҡатнашҡан етәкселәргә бурыстар йөкмәтте. Барлыҡ мөрәжәғәттәр ҙә теркәлеп, айырым контролгә алынды.

# ХЕҘМӘТТӘШЛЕК КИҢӘЙӘ



**Өфөлә Рәсәй сәнәғәт форумы сиктәрендә рәсми визит менән Ҡытай Халыҡ Республикаһының Цзянци провинцияһы баш ҡалаһы Наньчандан делегация булып китте. Улар Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм ҡыҙыҡһыныусы ведомство етәкселәре менән осрашты.**

Ирек Ишмөхәмәт улы ҡунаҡтарҙы баш ҡаланың иҡтисади, сәнәғәт һәм мәҙәни ҡеүәте менән таныштырҙы, "Аҡыллы ҡала" технологияларын ҡулланып, граждандар өсөн экологик таҙа, уңайлы йәшәү мөхите булдырыу буйынса ҙур эш алып барылыуы тураһында һөйләне, шулай уҡ үткән һәм киләсәктә уҙғарыласаҡ халыҡ-ара саралар хаҡында бәйән итте. Осрашыу барышында мәҙәниәт, спорт, мәғариф өлкәһендә лә хеҙмәттәшлекте яйға һалыу зарурлығы билдәләнде. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, ҡала йәштәре араһында ҡытай теле популярлыҡ яулай бара. "Һуңғы йылдарҙа Өфөнөң ҡайһы бер мәктәптәрендә уҡыусылар ҡытай телен өйрәнә һәм улар Ҡытай ҡалаларына практикаға бара. Уҡытыусылары - Ҡытай Халыҡ Республикаһы йәштәре", - тип тә билдәләне ҡала башлығы.

# ӨЛӨШСӨЛӘР МЕНӘН...



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Калинин районында Ферин урамы, 15/1, Глинка урамы, 5 адрестары буйынса торлаҡ йорттар төҙөлөшөндә өлөшләтә ҡатнашыусылар менән осрашты.**

Ферин урамы, 15/1 адресы буйынса төҙөлөштә өлөшләтә ҡатнашыусылар "Төҙөүсе" акционер йәмғиәте төҙөгән йорттан фатир ала алмай интегә, сөнки төҙөүсе үҙ бурыстарын үтәй алмаған һәм 2016 йыл һуңында уға ҡарата банкротлыҡ процедураһы башланған. Әлеге ваҡытта төҙөлөш-монтаж эштәре алып барылмай. Объект шартлы рәүештә 60 процентҡа ғына әҙер тип баһалана. Глинка урамы, 5 адресы буйынса төҙөлгән йорттоң шартлы әҙерлеге 80 процент ҡына. "Төҙөүсе" акционерҙар йәмғиәте тәҡдим иткән "Юл картаһы" банкротлыҡ процедураһы сиктәрендә дебитор бурысын ҡайтарыу, килешеүҙе юҡҡа сығарыу, милекте һатыу буйынса 4-5 ай эсендә торгтар үткәреү сараларын үҙ эсенә ала. Төҙөлөш-монтаж эштәрен башҡарыу мөҙҙәте тышҡы идара планындағы эштәрҙән үтәлеүенә һәм финансҡарҙың инеүенә бәйле күрһәтелеү сәбәпле, был документ йорт төҙөлөшөндә ҡатнашыусылар менән килешелмәгән. Муниципалитет башлығы хакимиәттең структура бүлексәләре етәкселәренә яуаплы ведомстволар менән берлектә проблемаларҙы хәл итеү юлдарын табырға, төҙөлөштө тамамлау өсөн икенсе төҙөлөш ойошмаларын йәлеп итеү мөмкинлеген ҡарарға ҡушты. Шулай уҡ өлөшсөләрҙең килеп тыуған мәсьәләләр буйынса властарҙың ниндәй сара күреүе тураһында даими хәбәрҙар булырға тейешлеген билдәләне.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Өфөлә Затон йылылыҡ электр үҙәген файҙаланыуға тапшырҙылар. Ул 2008 йылда уҡ төҙөлә башлай, әммә һуңынан инвестицияларҙы ҡайтарыу механизмы булмау сәбәпле туҡталып ҡала. Эштәр "Башкирэнерго" бүленгәндән һуң яңыра. Республика ҡеүәтле электр станцияһына эйә булды, ундайҙар төбәктә 40 йылдан ашыу төҙөлмәгән.

✔Өфөлә өсөнсөгә "Башҡортостандың иң гүзәл студенты-2018" республика матурлыҡ конкурсы үтә. Ғаризалар "Башҡортостандың иң гүзәл студенты" билдәһе менән missbashkortostan@mail.ru тигән рәсми почтаға ҡабул ителә. "Башҡортостандың иң гүзәл студенты-2018" конкурсының йәйәт ҙур финалы Өфөлә 25 апрелдә Башҡорт дәүләт академия драма театрында була. Еңеүселәрҙе ҡиммәтле бүләктәр һәм студенттарҙың ҙур-ҙур сараларында ҡатнашыу мөмкинлеге көтә.

✔Өфөлә Көньяҡ автовокзалды Сик урамына, "Мега" сауҙа үҙәге тирәһенә күсереүҙәре ихтимал. Яңы проектҡа ярашлы, ҡабатланған һәм законһыҙ маршруттарҙы бөтөрөү, Октябрь проспектын бушатыу, транспорттың бер өлөшөн Блюхер, Зорге урамдарына күсереү ҡулланыла.

✔"Zoom Market" бойондороҡһоҙ агентлыҡ белгестәре үткәргән һорау алыу мәғлүмәттәренә ярашлы, Өфө Рәсәйҙәге 15 хәүефһеҙ ҡала исемлегенә инде. Баш ҡалабыҙ рейтингта 12-се баҫҡысты биләй. "Хәүефһеҙ ҡалалар исемлеге Рәсәй ҡалаларын 10 баллы шкала буйынса баһалау нигеҙендә төҙөлгән. Ҡала халҡына: "Калала үҙегеҙҙе ни тиклем хәүефһеҙ тояһығыҙ?" тигән һорау биргәндәр", - тип асыҡлыҡ индерҙе агентлыҡ эксперттары. Һорау алыуҙа һәр ҡаланан 19-54 йәшлек 2900 респондент ҡатнашҡан.

✔21 мартта Өфөлә Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты, Мәғариф министрлығы республиканың Профсоюздар федерацияһы менән берлектә II Балалар өсөн турҙар һәм юлламалар йәрминкәһен ойоштора. Унда Башҡортостандағы балалар һауыҡтырыу лагерҙарынан һәм туроператорҙарҙан яҙғы-йәйге миҙгелгә тәҡдимдәр менән танышырға мөмкин. Йәрминкә Профсоюздар йортонда иртәнге сәғәт 10-да башлана. Адресы: Киров урамы, 1.

АФАРИН!

**Ошо көндәрҙә Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында "Зәйнәб Биишеваның тормошо һәм ижады" республика ижади проекттар конкурсы үтте. Бишенсе йыл рәттән уҙғарылған сарала быйыл айырым сығыш яһаусы 37 уҡыусы һәм 11 коллектив ҡатнашты. Уларҙы Зәйнәб Биишеваның улы - химия фәндәре кандидаты, профессор Тельман Әминов, Өфө ҡалаһының Калинин районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Әлфиә Ҡаһарманова, Калинин районы мәғариф һәм гуманитар мәсьәләләр буйынса идаралыҡ етәксеһе Лариса Бочкарова сәләмләп сығыш яһаны.**

# ЗӘЙНӘБ БИИШЕВАНЫ...

## уҡыйбыҙ, яратабыҙ



Республика ижади проекттар конкурсында биш төрлө секция эшләне. "Зәйнәб Биишеваның әҙәби мираҫы" тип аталған беренсе секцияла уҡыусылар яҙыусының әҫәрҙәре буйынса эшләгән ғилми-тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәһен сағылдырған докладтар менән сығыш яһаны. Был бүлектә беренсе урын яулаған М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Әлиә Шәйғәрҙәнова "З. Биишева әҫәрҙәрендә антонимдарҙың һәм синонимдарҙың ҡулланылышы" тигән тема буйынса тикшеренеү эше яҙған. "Был тема үҙемә лә ҡыҙыҡлы тойолдо, Зәйнәб Биишеваның шиғырҙарында антоним һәм синоним булған һүҙҙәрҙе табып, уларҙың төрөн билдәләп, анализ яһаным. Артабан да ошо эште дауам итеү маҡсаты бар. Сөнки мин был конкурста тәүге тапҡыр ҡатнашһам да, башҡа ғилми конференцияларға йөрөп торам. Тиҫтерҙәремдең сығышын тыңлап ултырҙым, Диана Ғәлинаның ат менән бәйле һүҙҙәр тураһындағы доклады бик оҡшаны, һәр кем яҡшы әҙерләнеп килгәйне", - ти Әлиә Шәйғәрҙәнова.

"Әҙиптең тормошо һәм ижадының сағылышы" тип аталған икенсе секцияла уҡыусыларҙың эштәре З. Биишева, Р. Ғарипов, М. Кәрим ижадына арналды. Был бүлектә иң юғары баһаға З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гиназияһы уҡыусыһы Эльмира Мусина лайыҡ булды. "З. Биишева - әсә, ҡатын-ҡыҙ, йәмәғәт эшмәкәре" тигән темаға арнап эшләнгән ижади проектар секцияһында Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Гөлиә Солтанова "З. Биишева - публицист" тигән сығышы өсөн беренсе урын алды. "Урыҫ телендә ижади эштәр" тигән дүртенсе секцияла Ейәнсура районы Исәнғол башҡорт гимназия-интернатының 9-сы синыф уҡыусыһы Земфира Хантимерова "Башҡортостан ынйыһы" тигән шиғри сығышы менән бөтә жюри ағзаларын таң ҡалдырҙы. ЮНЕСКО эштәре буйынса БР Комитетының баш белгесе Людмила Богуславская унының менән һоҡланыуын белдереп: "З. Биишеваның тормош юлы, ижады тураһында Земфира Хантимерованың беҙгә һөйләп ишеттергән поэмаһын уҡыусыларға уҡытып, дәрес үткәрергә була. Бөгөн был конкурсҡа килгән уҡыусылар беҙҙе шул тиклем хайран итте, һәр берегеҙ талантлы, аҡыллы. Юғары уңыштарға өлгәшеүегеҙҙе теләйем", - тине ул. Ысынлап та, конкурста ҡатнашҡан уҡыусылар тикшеренеү, эҙләнеү, белем кимәлен сағылдырыуҙы талап иткән секция эштәрендә лә үҙҙәрен күрһәттеләр, актерлыҡ һәләттәре күрһәтеүҙе маҡсат иткән бишенсе секция эшендә лә һынатманы. "З. Биишева әҫәрҙәрен сәхнәләштереү" тип аталған был бүлектә баш ҡала мәктәптәренән, Өфө һәм Учалы райондарынан килгән 11 коллектив ҡатнашты. Жюри ағзаһы, М. Кәрим исемендәге Йәштәр театры актеры Венер Камалов һәр командакостюмдың лайыҡлы сығыш яһауы, еңеүсене билдәләүҙе бик ауырға тура килеүен телгә алды. "Шулай ҙа уйлаша, кәңәшләшә һәм саҡ ҡына бәхәсләшеп тә алғандан һуң, беренсе урынды "48-се башҡорт лицейы" башҡорт йәкшәмбе мәктәбе артистарына "Аулаҡ өй" тигән сәхнәләштереүҙәре өсөн бирергә булдыҡ", - тине Венер Мөнир улы.

Конкурстың уҡыусыларҙы үҙ-ара таныштырыусы, ижади һәләттәрен асырға ярҙам иткән бер майҙансыҡ булыуы күптән билдәле. Быйыл да бында килгән балалар аралашып, З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһы менән яҡындан танышып ҡайта алды. Гимназия менән бәйле һуңғы яңылыҡтарҙы уҡыусылар сығарған "Киләсәк" гәзите биттәренән уҡып белделәр. Белем усағы етәкселеге әйтеүенсә, былар уҡыусыларға ижади һәләттәрен асырға булышлыҡ итеү йәһәтенән, гимназияға исем биргән Башҡорт халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның ижадын популярлаштырыу өсөн эшләнә. "Беҙгә уҡырға килгән балалар башҡа белем усаҡтарын барып күргән саҡта ла, З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында яҡшыраҡ, тип фекер йөрөтһөн өсөн бөтә көс һалына", - ти гимназия директоры Булат Зинуров.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**З. Биишева исемендәге 140-сы башҡорт гимназияһында уға исем биргән әҙибәнең тормош юлын, ижадын өйрәнеүгә арналған, балаларҙың ижади һәләттәрен үҫтереүгә йүнәлтелгән саралар даими рәүештә үткәрелеп тора. Уҡыусы йөрәгенә тере ҡуҙ һалыр, рухын уятыр һүҙҙәрен әйтергә яҙыусылар, шағирҙар, уныш ҡаҙанған төрлө һөнәр кешеләре, ветерандар ҙа был белем усағында йыш ҡунаҡ. Шундай осрашыуҙарҙың береһе ғинуар айында Зәйнәб Биишеваның тыуыуына 110 йыл тулыу айҡанлы әҙибәнең һеңлеһе Ләлә Биишева, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, БР Яҙыусылар союзы рәйесе Зәки Әлибаев, шағир Рәшит Зәйнуллин ҡатнашлығында уҙғарылғайны. Белем биреү генә түгел, күңелгә туған халҡы тураһында ғәм һалған педагогтарҙың эше баһалап бөткөһөҙ.**

Сәриә ҒАРИПОВА.

ҺОРАУ - ЯУАП

### ДӨЙӨМ КОРИДОР ТУРАҺЫНДА

**"Бер бүлмәле фатир һатып алдыҡ. Дөйөм коридор буйынса күршеләрҙең милкендәге фатир 4 бүлмәле. Ошонан сығып, улар коридорҙың бер өлөшөн бүлеп алып, хатта хосусилаштырып ҡуйғандар. Улар ошолай эшләргә хаҡлымы? Әгәр ҙә судҡа бирһәк, еңеп сығыу мөмкинлеге бармы?"**

- Күп фатирлы йорттарҙағы баҫҡыс биләмәләре дөйөм милек һанала. Күршеләрегеҙҙең был аҙымы РФ Торлаҡ кодексының 36-сы статьяһына ҡаршы килә. Шулай уҡ закон тарафынан баҫҡыстар араһындағы майҙансыҡтарҙа һәм ҡаттар араларындағы коридорҙа келәт, тамбур һәм башҡа өҫтәмә бүлмәләр эшләү ҡәтғи тыйыла. Судҡа ҡәҙәр идара итеү компанияһына яҙма ғариза тапшырығыҙ. Нәҡ улар дөйөм милек менән идара итеү тәртибен көйләргә бурыслы һәм күршегеҙҙән законһыҙ рәүештә ҡуйылған бүлмәне емертеү сараһын күрергә тейеш. Әгәр ҙә идара итеү компанияһы ғаризағыҙҙы инҡар итһә, торлаҡ инспекцияһына мөрәжәғәт итегеҙ. Ялыу ҡағыҙында күршегеҙҙең хоҡуғығыҙҙы боҙоуын ғына түгел, ә идара итеү компанияһының ғаризағыҙ буйынса бер нәмә лә эшләмәүен күрһәтегеҙ. Күп осраҡта торлаҡ инспекцияһы бындай мәсьәләләрҙе хәл итә. Ләкин был исул да ярҙам итмәһә, судҡа мөрәжәғәт итеү генә ыңғай һөҙөмтәләргә килтерәсәк. Хосусилаштырыуға килгәндә, һеҙгә яңылыш мәғлүмәт биргәндәрҙер, моғайын. Законға ярашлы, дөйөм коридорҙы бер нисек тә хосусилаштырып булмай.

### СИРЛӘП КИТТЕМ...

**"Төп эш урынымдан тыш, икенсе ойошмала ла эшләйем. Сирләп киттем. Ауырығанлыҡ тураһындағы ҡағыҙ өсөн ике ойошмала ла түләргә тейештәрме, әллә тейешле ҡағыҙҙы тик төп эш урынына ғына алып барырға кәрәкме?"**

- РФ "Ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ һәм әсәлек менән бәйле осраҡта мотлаҡ социаль страховка тураһында"ғы закондың 13-сө статьяһына (2-се бүлек) ярашлы, әгәр ҙә ике эш урынында ла 2 йылдан ашыу эшләһәгеҙ, ауырығанлыҡ тураһындағы ҡағыҙға түләү ике ойошмала ла башҡарыла. Бының өсөн дауалаусы табиптан ике ҡағыҙ яҙҙырып алырға кәрәк. Икенсе хеҙмәт урынығыҙға бирелгән ауырығанлыҡ тураһындағы ҡағыҙҙа мотлаҡ рәүештә "Өҫтәмә эш урынына" тигән билдә ҡуйылырға тейеш. Ләкин ике эш урыныңыҙҙың береһендә (йәки икеһендә лә) эш стажығыҙ 2 йылдан кәм икән, бындай түләү бер генә ерҙә атҡарыласаҡ. Уны ҡайһы хеҙмәт урынығыҙҙан түләтеүҙе һеҙ хәл итәһегеҙ. Тәбиғи, ауырығанлыҡ тураһындағы ҡағыҙҙы эш хаҡы күберәк булған хеҙмәт еренә алып барыу отошлораҡ буласаҡ.

### ЯҢҒЫҘ ӘСӘГӘ ТАШЛАМАМЫ?

**"Миңә 53 йәш тулды. Яңғыҙым бала тәрбиәләйем. Дөйөм хеҙмәт стажым 26 йыл. Әлеге ваҡытта Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә иҫәптә торам. Хаҡлы ялға 53 йәштә сығырға мөмкинлегем бармы?**

- Хаҡлы ялға иртәрәк, йәғни ҡатындарға 53 йәштә (ирҙәргә 58) сығыу өсөн бер нисә ҡағиҙәнең үтәлеүе мөһим. Тәү сиратта, дөйөм эш стажы ҡатындар өсөн 20 йылдан да әҙерәк (ирҙәрҙеке - 25) булмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ эш урынын ойошманың бөтөрөлөүе, хеҙмәткәрҙәр штатының ҡыҫҡартылыуы һөҙөмтәһендә юғалтыу һәм Халыҡты эш менән тәьмин үҙәге аша икенсе эшкә урынлаштыу мөмкинлегенең булмауы ла шарт. Был хаҡта "Рәсәй Федерацияһында халыҡтың эш менән мәшғүллеге тураһында"ғы Федераль законда әйтелә (1991 йылдың 19-сы апрелендәге 1032-1 һанлы). Ошо талаптарға тура килһәгеҙ, Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге һеҙҙе хаҡлы ялға алданыраҡ сығарыу тураһындағы хат менән Пенсия фондына мөрәжәғәт итә ала. Ә яңғыҙ әсәләргә хаҡлы ялға алдан сығыу мөмкинлеге биргән ташламалар юҡ.

Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бит, күҙ мускулдары тартышыуы

❖ Был сир киҙеүҙән, һалҡын тейеүҙән, үтә өргән елгә эләгеүҙән, туңыуҙан булырға мөмкин. Был осраҡта 1 ҡалаҡ ҡурай елегенең киптереп төйөлгән япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын утта 3-4 минут тоторға, 1 сәғәт төнәтергә. Шул төнәтмәне ашарҙан 1 сәғәт алда көнөнә 3 тапҡыр 1/4 стакан эсегеҙ.

### Тән ауыртҡанда

❖ Тән йәки мускулдар ауыртҡанда 1 ҡалаҡ тал бөрөһөн һәм япраҡтарын 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 1 сәғәт төнәтергә һәм көнөнә 5-6 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ киптерелгән меңъяпраҡты 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, шәл менән урап, 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм төрлө сәбәп менән барлыҡҡа килгән мускул ауыртыуҙары ваҡытында көнөнә 3-4 мәртәбә ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Эс ҡатыуы

❖ Һоло төнәтмәһе эсергә.

❖ Әсе торма (редька) һыуы, йылытылған әсе кәбеҫтә һыуы, ойоған һөт, киптерелгән сейә йәки алманан яһалған сәй ҙә ярҙам итә. Уны көнөнә 5 мәртәбә эсергә. Тоҙло ҡыяр һыуы ла эсте йомшарта.

### Яман шештән һаҡланайыҡ

❖ Тәмәке тартмағыҙ.

❖ Тоҙло, ыҫланған ризыҡ ашамағыҙ, мал майын сикләгеҙ.

❖ Алкоголь, ҡайнар эсемлек, юл буйҙарында көтөлгән һыйырҙың һөтөн эсмәгеҙ.

❖ Машинала күп йөрөйһөгөҙ икән, спортты ла ятатығыҙ.

❖ Химик матдәләр ҡушылған ризыҡтан һаҡланығыҙ.

❖ Кәбеҫтә, әсетелгән һөт ризыҡтары, йәшел сәй, икмәктең ҡара ондан бешерелгәнен йышыраҡ ашағыҙ.

❖ Яман шеш йышыраҡ төшөнкөлөккә бирелгән, хис-тойғоға бирелеп барғандарҙа була, шуға ла күңел күтәренкелегендә булығыҙ, ул шештән һаҡлаусы бер ҙур исул.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *"Троицкиҙағы Зәйнулла хәҙрәт эске Русияла иң мәшһүр вә иң атаҡлыларҙандыр. Заманында уның һәр һүҙе закон-шәриғәт ине... Ахыры ғүмеренә ҡәҙәр һәр кем уны олуғ бер шәйех, мөхтәбәр бер ғалим һанап хөрмәт итте..."*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## "Сигенеү - ҡасыу тигәнде аңлатмай..."

629 йылдың март айында Мөхәммәт бәйғәмбәр ике мең өммәттәше менән Мәккәгә хажға юллана. Ҡорбан салыу өсөн үҙҙәре менән бик күп итеп дөйә, үгеҙ, кәзә һәм һарыҡ алалар. Мәккәлә уларға береһе лә ҡамасауламай.

Мосолмандар Ҡәғбә янында ғибәҙәт ҡыла, ҡорбан сала. Килешеү буйынса, өс көндән һуң Мәккәне ҡалдырып ҡайтып китәләр. Ҡөрәйш ырыуының оҙаҡламай Ислам динен ҡабул итәсәген Мөхәммәт бәйғәмбәр яҡшы аңлай. Ҡөрәйштәрҙең төрлө яҡтарға ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүе, тик Фарсы иленең үҙ-ара һуғыш алып барыуы сәбәпле, хәрби ярҙам күрһәтә алмауы, Эфиопия негусының да ярҙам итеүҙән ҡырҡа баш тартыуы тураһында уға хәбәр итеп торалар. Ғатафан тигән көслө ғәрәп ырыуы бер нисә тапҡыр ҡөрәйштәргә ярҙамға килергә ашҡынып ҡарай, тик мосолмандар уларҙың үҙҙәренә һөжүм итә. Бынан һуң ғатафан яугирҙары үҙ ғаиләләрен ҡалдырып китергә баҙнат итмәй.

Күп тә үтмәй, Мөхәммәт бәйғәмбәр янына ҡөрәйш ырыуының батырҙары, ғәскәр башлыҡтары - Хәлит ибн Вәлит менән Әмре ибн Әс килеп, Ислам динен ҡабул итергә теләк белдерә. Мөхәммәт бәйғәмбәр уларҙы шатланып ҡабул итә һәм икеһенә лә ғәскәр бирә. Әйтергә кәрәк, яңылышмай ул. Йылдар үтҡәс, Әмре ибн Әс Египет илен яулай, ә Хәлит ибн Вәлит Ислам байрағын Ҡытай сигенә тиклем алып барып еткерә.

629 йылда Мөхәммәт бәйғәмбәр төньяҡҡа - христианлаша башлаған һәм Византия менән союзға инеп, мосолман илселәрен үлтергән ғәрәп ырыуҙарына ҡаршы өс меңлек ғәскәр ебәрә. Ләкин Иордан йылғаһы буйында улар Византияның регуляр ғәскәре менән осраша. Йөҙ меңгә яҡын яугир була улар. Тәүге бәрелештә үк Зәйед һәм тағы бер нисә яу башлыһы һәләк була. Етәкселек Хәлит ибн Вәлиткә күсә. Уның хәрби оҫталығы ғәскәрҙе тулыһынса ҡырылыуынан ҡотҡарып алып ҡала. Ҡамауға алырға форсат бирмәйенсә, дошманға һөжүм итә-итә, йылап ҡына сигенә ул. Сүллеккә тиклем барып еткәндән һуң дошман ғәскәре туҡтап ҡала, унда ғәрәптәрҙе өстәлмә көс көтә, тип фараз итәләр.

Ғәрәп яугирҙары Мәҙинәгә ҡайтҡас, ҡайһы берәүҙәр уларҙы ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләп, "ҡасҡындар", тип мыҫҡыллап маташа. Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙенең яҡындары - ул итеп үҫтергән Зәйедтең дә, ике туған ҡустыһы Джәфәрҙең дә үлемен бик ауыр кисерә, ләкин Хәлит ибн Вәлитте һәм башҡа яугирҙарҙы ғәйепләүселәрҙе туҡтатып ҡуя. "Сигенеү - ҡасыу тигәнде аңлатмай", ти ул.

Ошо уҡ йылдың ноябрь айында ҡөрәйштәр килешеүҙең иң мөһим өлөшөн боҙа. Ә эш ошолай була. Ҡөрәйш ырыуының союздашы - Бәкр ырыуы йырсыһы мосолмандарҙың союздашы - хузаа ырыуы кешеһе алдында Ислам динен мыҫҡыллаған йыр йырлай. Хузаа ырыуы кешеһе йырсыға һуғып ебәрә. Бәкр кешеһенең ырыуҙаштары өндәшмәй ҡала, ләкин төндә ҡөрәйштәр менән бергәләп, хузаа кешеләренә ҡораллы һөжүм яһап, бер нисәүһен үлтерә.

Хузаа ырыуының аҡһаҡалдары шунда уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәргә илселәр ебәрә. Мосолмандарҙың асыуы ҡабара. Килеп сыҡҡан мәсьәләне хәл итеү өсөн ашығыс рәүештә Мәккәнән Әбү Суфиян килеп етә. Тик Мөхәммәт бәйғәмбәр уны ҡабул итмәй. Әбү Суфиян ярҙам һорап, абруйлы мөһәжирҙәргә мөрәжәғәт итә. Тик уға береһе лә ярҙам итергә теләмәй, ә Ғәли уға тиҙерәк ҡайтып китергә кәңәш бирә.

**(Дауамы бар).**

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# ЗӘЙНУЛЛА ИШАН -

## башҡорт халҡының рухи батшаһы

***"Вау диуана әйткән: килен, ҡорһағыңды һаҡла. Унда ишан булырҙай бала ята".***
***(Шәрип ауылында ишеткәндәрҙән).***



"Зәйнулла ишан Рәсүли... Аҡмулла... Ғайса ахун... Зәки Вәлиди... Моғайын, һәр әҙәм затының да, бала саҡтан уҡ ҡолағынан мейеһенә инеп, аҙаҡ йөрәгенә урынлашҡан исемдәр булалыр. Улар бөтөн ғүмер һуҙымында эс-бауырҙы йылытып йөрөй, ә мөҙҙәт етһә, тышҡа бәреп сыға һәм күккә күтәрелеп, илаһи донъя йөҙөндә ҡояш кеүек балҡый башлай. Зәйнулла хәҙрәт исеме менән дә шулайыраҡ булды, ахырыһы.

"Зәйнулла ишан" тигән исемде йыш ҡабатлағандарын мин бәләкәй саҡта уҡ ишетә инем. Сөнки уның "кыуаҡандар" тип йөрөтөлгән Шәрип ауылы беҙҙең барын башҡорттарының Ҡужайына ялғанып уҡ тиерлек ултыра. Ғүмер баҡый (30-сы йылдан, әлбиттә) бер колхоз булып йәшәнеләр, бер үк Уй һыуын эстеләр, яҙмыштарына төшкән бөтөн ауырлыҡтарҙы бергәләп күтәрҙеләр. Аурылыҡ тигәндәй, ундай саҡтарҙа ололар йыш ҡына бер-береһен сабыр булырға өндәп, Зәйнулла хәҙрәт әйтеп ҡалдырған нотоҡтарҙы иҫкә төшөрөрҙәр ине.

Һүҙ юҡ, ул нотоҡ-вәғәздәр аҡрынлап онотола барҙы, күптәр эскелеккә, дорфалыҡҡа ыңғайланы. Мәктәптә лә, йыйындарҙа ла хәҙрәт исемен телгә алмай башланылар. Әммә барыбер уның аҡыллы кәңәштәре ололар йөрәгендә йөрөгән булып сыҡты. "Карттар һүҙен ҡар баҫмаҫ", тиеүҙәре дөрөҫ икән. Бигерәк тә ғилеме ҙур ҡарттарҙың һүҙе онотолмай. Дәүере килгәс, Зәйнулла ишанды Әл-Фараби, ибне Фаҙлан, Лев Толстой, Жан-жак Руссо, Шиһабетдин Мәржәни кеүек бөйөк ғалим һәм әҙиптәр рәтендә йөрөтә башланылар.

1917 йылда Ырымбурҙа нәшер ителгән бер йыйынтыҡта бөйөк ғалим һәм тарихсы Ризаитдин Фәхретдинов уның хаҡында бына нимә ти: "Зәйнулла хәҙрәт эске Русияланы мәшһүр заттарҙың иң олоһо һәм абруйлыһы... Ғасырыбыҙ уның ҡәҙәр мәшһүр һәм абруйлы зат күрмәгәндер, тиелһә, яңылыш булмаҫтыр... Троицкиҙағы Зәйнулла хәҙрәт эске Русияла иң мәшһүр вә иң атаҡлыларҙандыр. Заманында уның һәр һүҙе закон-шәриғәт ине... Ахыры ғүмеренә ҡәҙәр һәр кем уны олуғ бер шәйех, мөхтәбәр бер ғалим һанап хөрмәт итте..." Петроградта нәшер ителгән "Мосолман донъяһы" ла (Рәсәй Фәндәр академияһы баҫмаһы, 1-се сығарылыш, 1917 йыл), Зәйнулла хәҙрәттең эшмәкәрлегенә баһа бирел: "Ул үҙ халҡының рухи короле булып һанала ала", - тип яҙып сыҡты. Быға Әхмәтзәки Вәлидизең һүҙҙәрен дә өҫтәп ҡуйыйыҡ. Үҙенең "Хәтирәләр"endә ул: "Ғаиләбеҙҙең иң күп аралашып йәшәгән даирәһе муллалар булды", - ти ҙә, төрлө тарафтарҙа йәшәгән руханиҙарҙан айырып: "Троицкиҙан Зәйнулла ишан исемле мәшһүр шәйех иң башта иҫкә төшә, - ти. - Мин атайымдың рухи етәксеһе Зәйнулла ишан кеүек эскерһеҙ инсандарҙы, әхлаҡ һәм кешелеклелек өлгөһө булғандарын хөрмәт иттем".

Танышырға тура килгән байтаҡ тәржемәләрҙән күренеүенсә, XIX быуат ахырында һәм был йөҙ йыллыҡтың башында ҙур илдең төрлө тарафтарынан йәйәүләп тә, атҡа йә иһә дөйәгә атланып та Троицкиға - Зәйнулла Рәсүлиҙең кәңәштәрен тыңлау, унан фатиха алыу өсөн килгән халыҡ ағымы өҙөлмәй. Уның хисапһыҙ мөриттәре бөтөн мосолман төбәктәре, улыстары, "үлем"дәренә таралышып, Зәйнулланың шөһрәтен тағы ла арттыра.

"Нисек барлыҡҡа килгән былдай ғәжәп феномен? Кәҙимге ауыл мөхите шундай ҙур шәхесте нисек тәрбиәләй алды икән?" Шул мөғжизәнең серенә төшөнөргә тырышып, бала саҡтан таныш Шәрип урамынан үтәм, Уй тулҡындарына ҡарап торам, Нәрәле, Уйташ тауҙарына һоҡланып ҡарайым күндерәм. Шәрипте ҡалдырып, Зәйнулла уҡыған Малай Муйнаҡ, Ахун ауылдарына барам, ул эшләп киткән, балалар үҫтергән Аҡҡужаға барып әйләнәм - һаман яуап эҙләйем. Ләкин тауҙар ҙа, йылғалар ҙа яуап ҡайтармай. Ахырҙа, Зәйнулла ишандың ағай-энеһен эҙләргә тотонам: улар ни һөйләр?

Рәсүлевтар заты, борон-борондан өҙөлмәй килеп, тамырҙары тау-таш араһында мәңгегә нығынып ҡалған мөһабәт ағасты хәтерләтә. Уларҙың шәжәрәһе бай һәм фәһемле. Тәүләп был шәжәрәне Ризаитдин Фәхретдиновҡа "Аҫар" журналында баҫтырыу өсөн Ахун ауылы имамы Муса хажи эшләп бирә. "Мин Муса әфәнде тарафынан тәртипкә килтерелгән яҙмаларҙы баҫтырыуҙы моафиҡ күрҙем",- ти ул һәм Рәсүлевтарҙың ата-бабаларын ошо рәүештә теркәй: "Зәйнулла бән Хәбибулла бән Рәсүл бән Муса бән Байрамғол бән Ғашиҡ бән Солтанай бән Мораттупай бән Уразгәли бән Яныш бән Ятаби".

Беҙ һүҙҙе Хәбибулланан, уның атаһы Рәсүлдән генә алып китәйек. 40-сы йылдарҙа Өфөлә мөфтөй булып торған Ғабдрахман Рәсүлевтың үҙенең ҡыҙы Сафуатҡа әйтеп ҡалдырған һүҙҙәре бар. Уның иҫләүенсә, фамилияны башлап ебәргән Шәрип ауылы кешеһе Рәсүл Башҡортостандың Благовар районы Булышлы ауылында Мөхәмәтшәриф Килдебәков хәҙрәттә уҡыған. Уның ҡыҙына өйләнгәс, тыуған Шәрип ауылына әйләнеп ҡайта, шунда Хәбибулла тыуа. Хәбибулла фәҡирлектә йәшәй. Бер тәҙрәле генә өй, тәҙрәһе - ҡарындыҡ. Өйө ҡыйыҡһыҙ. Хәбибулланың йөмәғәте - Вау (Вау - Вахит) диуананың һеңлеһе. Ул бик унған, үткер ҡатын була. Һуңынан Зәйнулла хәҙрәт: "Мин сарыҡ ҡына кейгән бер фәҡир башҡорт балаһы, - тип әйтер булған. - Ғилем арҡаһында ғына мин ошо бәхетте күрҙем".

Киләсәктә күренекле шәйех булып китәсәк Зәйнулланың һәм уның тамырын белер өсөн был юлдарҙың авторына 60-80-се йылдарҙа Рәсүлевтарҙың һәм таныштарының адрестарын табып, күптәре менән хаттар алышыу насип булды. Бына ул авторҙарҙың исемдәре: ишанға ейән тура килгән Ғәбдерәүеф Абдрахман улы Рәсүлев (Мәскәү) төҙөүсе-техник булып эшләне, ейәнсәрҙәре Рәшиҙә Абдрахман ҡыҙы - Мәскәүҙә, Сафуат Абдрахман ҡыҙы - Силәбелә, ейәне күренекле яҙыусы Атила Расих Ҡадир улы - Ҡазанда, Ғайса ахундың йәки Зәйнулланың ике туған ҡустыһының ейәне Әнүәр Балташев Ҡаҙағстанда йәшәй, Муса хажи Рәсүлевтың ейәнсәре Ләлә Ғабдулла ҡыҙы Учалы ҡалаһында, уның уҡ ейәне Айҙар Әхмәтханов Волгоградта йәшәне һәм инженер булып эшләне. Шулай уҡ ишанға ҡәрҙәштәр тура килгән Булат Батталов (Силәбе), Сәлмә Рәсүлева һәм уның ҡыҙы Ҡәүкәп Заһретдинова (Ҡужай ауылы), ауылдашы Сиражетдин Өмөрғолов (Учалы районының Шәрип ауыл кешеһе), Искәндәр Харисов (Учалы районының Ахун ауылы), Зәйнулланың өсөнсө быуын ейәнсәре Ғәйнизин Имашева (Учалы ҡалаһы) һәм башҡалар үҙҙәрендә һаҡланған мәғлүмәттәр менән уртаҡлашты. Уларҙың яҙма иҫтәлектәре, ишеткәндәрен бергә туплап анализлағандан һуң, ишандың тормош юлын ярайһы уҡ күҙалларға, айырыуса Булат Батталов менән Сафуат Абдрахман ҡыҙы Рахманҡолованың яҙғандарына таянып, Зәйнулла хәҙрәттең тулы шәжәрәһен төҙөргә мөмкинлек тыуҙы.

**Рәүеф НАСИРОВ.**
**("Шәйех Зәйнулла Рәсүлев" әҫәренән ҡыҫҡартып алынды. Дауамы бар).**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

1

# Ғаиләм-ҡәлғәм

17 - 23 март (буранай) 2018 йыл

№11 (793)

ДӘҮЛӘТ - БЕҘ УЛ!

# БЕРҘӘМ БУЛҒАНҒА...

**Балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүсеһе менән һөйләшәм:**
**- Нимә ул ғаилә?**
**- Әсәй, атай, ағай, мин, ҡустым һәм, әлбиттә, өләсәй-олатайҙар.**
**- Ә татыу ғаилә тип ниндәйҙәргә әйтәләр?**
**- Бергә ял иткән, эште кәңәшләшеп эшләгән ғаилә татыу тип атала…**



Тәү ҡарамаҡҡа иркә генә күренгән баланың яуабы миңә бик оҡшаны. Дөрөҫөрәге, уның тырышып-тырмашып башҡортса һөйләшеүе иғтибарҙы йәлеп итте һәм, һис шикһеҙ, уның атай-әсәһе менән осрашып, һөйләшкем килде.

Тимур Эльмира һәм Динис Шәриповтарҙың уртансы улы булып сыҡты. Өлкән улдары Маликка - 10 йәш, ул 3-сө гимназияла 3-сө класта уҡый. Үҫмер тәртибе һәм яҡшы уҡыуы менән айырыла. Кинйәләре Артур ҙа, Тимур ағаһы кеүек, "Сулпан" балалар баҡсаһына йөрөй.

Шәриповтарҙың ғаиләһен балалар баҡсаһында, мәктәптә, район кимәлендә үткән спорт сараларында йыш осратырға мөмкин. Улар айырыуса "Әсәй, атай һәм мин - спортсы ғаилә" спорт байрамында ҡатнашырға ярата һәм һуңғы биш йылда беренселекте бер кемгә лә бирмәй. Яҡшы физик әҙерлек һәм даими күнекмәләр генә ярыштарҙа еңеүгә булышлыҡ итмәй уларға, ә берҙәм һәм бер төптән булғанға уңыш йылмая. Был хаҡта әңгәмә барышында Эльмира Рифат ҡыҙы бер нисә тапҡыр телгә алды.

Эйе, Шәриповтар - күптәргә өлгө булырлыҡ һоҡланғыс ғаилә. Әсәй менән атай үҙҙәре лә матур тәрбиә алған. Лайыҡлы тормош һабағы биргән яҡындарын ихтирам менән телгә алалар. Форсат сыҡҡан һайын тыуған нигеҙҙәренә ҡайтып, ике яҡты ла берҙәй күреп, ярҙам итеүҙәре - балалары өсөн дә оло мәктәп. Тәрбиәгә нигеҙ ғаиләлә һалынғанлығын бик яҡшы аңлай улар. Шуға ла уландарын үҙ өлгөһөндә тәрбиәләүгә ҙур әһәмиәт бирәләр. Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, ти бит халыҡ мәҡәле лә.

Эльмира һәм Динис Шәриповтар балаларын үҙ аллы, ярҙамсыл, эшһөйәр һәм илһөйәр итеп тәрбиәләргә тырыша. Буш ваҡытты дөрөҫ бүлергә, китап уҡырға, ялды файҙалы һәм күңелле үткәрергә өйрәтә. Малик һәм Тимур улдары өс йәштән ҡала мәҙәниәт һарайында "Йәйғор" өлгөлө бейеү ансамблендә шөғөлләнә. Байрамдарҙа сығыш яһайҙар, төрлө конкурстарҙа ҡатнашалар, уңышлы сығыштары өсөн дипломдар, Маҡтау грамоталары менән бүләкләнгәндәр.

Йәйен саҡ ҡына эштән бушаған арала татыу ғаилә Мораҙым тарлауығына, Нөгөш һыу һаҡлағысына, Иҙел буйына сәйәхәткә сығырға ярата. Киләсәктә Башҡортостандың тарихи урындарын, тәбиғәт ҡомартҡыларын бөтәһен дә күрһәтергә уйлайҙар. Халҡыбыҙ мәҙәниәтенә, данлы үткәненә, телебеҙгә һөйөү тәрбиәләүгә ҙур әһәмиәт бирәләр.

- Балаларға бергә эшләү, ял итеү, төрлө сараларҙа ҡатнашыу бик оҡшай. Уларҙа команда рухы көслө, тимәк, берҙәмлек, дуҫлыҡ, татыулыҡ төшөнсәләрен тәрбиәләргә тырышабыҙ. Кеше яҙмыштары төрлөсә бит. Ҙурайғас, олоғайғас та шулай бер-береһенә терәк булып, кәрәк ваҡытта ярҙам итеп йәшәрҙәр, тип уйлайбыҙ һәм шуның өсөн тырышабыҙ, - ти атай менән әсәй.

Шулай итеп, бына шундай тыныс ҡына мөхитле, маҡсатлы, ихлас, татыу, өлгөлө "дәүләт" булдырған үҙ ғаиләләрендә Шәриповтар. Тағы ҡайҙа бар шундай ғаиләләр, хәбәр итегеҙ әле беҙгә.

**Ләлә ӘМИРОВА.**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# КӨТӘМ ӘЛЕ...

?

**Буйҙаҡ егеттәр генә түгел, кейәүгә сыҡмаған "карт ҡыҙҙар" ҙа күбәйҙе хәҙер. Шундайҙарҙың береһенә, 38 йәшлек Зөлфиәгә бирҙек был юлы "Ниңә һаман кейәүгә сыҡмайһың?" тигән сетерекле һорауыбыҙҙы.**

- Яңғыҙлыҡтан, "ҡасан кейәүгә сығаһың", тигән һорауҙарҙан үҙем дә арып-ялҡып бөткәнмен. Тәртипле, эшһөйәр, ҡатын-ҡыҙға ихтирамлы булған берәй башҡорт егете осрамай бит тормош юлымда. Эргәмдә минең кеүек үк кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар ҙа, кәләш алмаған егеттәр ҙә күп. Тик ниңәлер улар бер-береһе менән ғаилә ҡорорға ашыҡмай. Күптән аралашҡан егеттәрҙең ыңғай яҡтары менән бергә кәмселектәре хаҡында ла белеп бөтәһең һәм бәләкәй генә етешһеҙлеген дә олоғара итеп ҡабул итәһең бит. Шуға күрә, үҙемдең таныштар араһында ирем булырҙай кешене күрмәйем.

Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, танышып, тиҙ генә ҡауышҡан парҙар һирәк айырылыша, ә оҙаҡ йылдар буйы дуҫлашып туй үткәргәндәр, киреһенсә, ниңәлер бергә йәшәй алмай. Тәүгеләре, минең уйлауымса, бер-береһен бөтә яҡлап та бергә "аса", холоҡтарына яйлаша, яҡшы сифаттары менән бергә кәмселектәрен дә ҡабул итергә өйрәнә. Улар ғаилә эсендә бер бөтөнгә әйләнә. Ә икенселәре өйләнешкәнгә тиклем үк бер-береһенә ныҡ эҫенешеп бөтә. Дуҫлашып йөрөгән саҡта бәләкәй генә сәбәп өсөн дә үсеккән булып, һөйләшеүҙән ҡасып, осрашыуҙарҙан баш тартып "уйнайҙар". Өйләнешкәс тә ошо уҡ традицияны дауам итергә уйлайҙар ҙа, бер-береһен еңә алмайынса, икеһененң береһе баш бирмәйенсә, айырылышыуға тиклем барып етәләр. Хатта оло һөйөү ҙә ярҙам итмәй.

Йәшерен- батырыны юҡ, йөрәк һөйөү көтә, минең дә иремә арҡаланып ҡына, балаларымды һөйөп йәшәгем килә. Ипотека түләйем, машинаны нисек ремонтлайым, тип сыбаулап йөрөп ялҡтым. Хужабикә булып, ғаиләмә тәм-том бешереп, өй тултырып гөлдәр үҫтереп, баҡса менән булып ҡына ултырырға хыялланам. Һәр бер хыял тормошҡа аша, шуға көтәм әле үҙемдең яҙмышымды, моғайын, ул да минең кеүек ҡайҙалыр аҙашып йөрөй торғандыр. Табырбыҙ бер-беребеҙҙе һәм матур, милләтемдең өлгөлө ғаиләһе булырбыҙ.

ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!



# БАЛАНЫҢ... ҮҘ ӨЛӨШӨ

**Башҡортостанда тыуым Рәсәй буйынса уртаса кимәлдән юғарыраҡ. Шуға ла республика күп балалы ғаиләләр һаны буйынса илдә алдынғы урындарҙа һәм төбәктең социаль сәйәсәте лә башлыса ошондай ғаиләләргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән. Төбәктәге ҡанундарға ярашлы, 18 йәше тулмаған 3 һәм күберәк балаһы булған, шул иҫәптән, опекаға һәм уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алынған ғаилә күп балалы тип иҫәпләнә. Бындай ғаиләләр түбәндәге ярҙамға дәғүә итә:**

**Медицина хеҙмәте:**

- балаға 18 йәш тулғансы поликлиникала һәм стационарҙа бушлай дауаланыу;
- кәрәк булғанда бушлай протездар менән тәмин итеү (аҙ тәьмин ителгәндәр генә);
- 3 йәшкә тиклемге балалар өсөн раҫланған исемлек сиктәрендә дарыуҙар менән тәьмин итеү;
- төбәк эсендә балаларҙың ялын ойоштороуҙа өҫтөнлөк.

**Мәғариф өлкәһендә:**

- балалар баҡсаларына сиратһыҙ урынлаштырыу;
- ҡабул ителгән программалар буйынса уҡыу әсбаптары менән тәү сиратта тәьмин ителә;
- 23 йәш тулғансы мәктәптә һәм ПТУларҙа бушлай туҡланыу (аҙ тәьмин ителгәндәргә).

**Йәшәү шарттарын яҡшыртыуға мохтаждарҙы торлаҡ менән тәьмин итеү:**

- сират тәртибендә торлаҡ менән тәьмин ителә;
- йорт төҙөү йәки фатир һатып алыу өсөн ипотека алғанда күп балалы ғаиләләргә өҫтөнлөк бирелә;
- 5 һәм күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләргә торлаҡ һатып алыу өсөн социаль түләүҙәр;
- әгәр ҙә һәр ғаилә ағзаһына тура килгән уртаса килем халыҡтың минималь йәшәү минимумынан артмаһа, ай һайын коммуналь түләүҙәр өсөн ташламалар: 3 балалы ғаилә - 30 процент, 4 һәм күберәк балалы ғаилә өсөн 100 процент.
- баҡса өсөн ер участкаһы тәү сиратта бирелә;
- 9 һәм күберәк бала тәрбиәләгән ата-әсәләргә 600 мең һум күләмендәге бер тапҡыр түләнә торған түләү ҡарала. Әгәр ҙә ғаиләлә опекаға алынған балалар бар икән, документтар тапшырғанда улар ғаиләлә 3 йыл йәшәгән булырға тейеш.

✓ *Бер шулай йәш саҡта ағайығыҙ сираттағы эш хаҡын алып ҡайтҡас, ҡалай күп аҡса эшләгәнһең, тип барып ҡосаҡлап алдым. Йылы һүҙҙән ireп китеп, запасын да әйтеп ташланы. Бала кеүек бит ул ирҙәр!*



ҺАБАҠТАР

# "ҠАЙҒЫҺЫНДА ЛА КӨЛӨРГӘ ӨЙРӘТЕГЕҘ..."

Шулай тигән Авраам Линкольн улының уҡытыусыһына яҙған хатында. Авраам Линкольн - донъялағы иң билдәле шәхестәрҙең береһе. АҠШ-та ҡоллоҡто бөтөрөүгә өлгәшеүе уны ысын мәғәнәһендә милли герой яһаны. Һорау алыуҙарға ярашлы, ул ошоға тиклем Америка халҡының иң яратҡан президенты булып тора. Шуға ҡарамаҫтан, ил менән идара иткән осоронда ул даими рәүештә ҡаты тәнҡит утында тотола һәм АҠШ-тың үлтерелгән тәүге президенты ла. Авраам Линкольндың дүрт улы була, ләкин шуларҙың өсөһө балиғ йәшенә етмәйенсә, тиф һәм туберкулездан үлеп ҡала. Өлкән улы Роберт ҡына оҙон ғүмерле булып сыға: юриспруденция һәм сәйәсәттә һоҡланғыс карьера эшләп, 82 йәшкә тиклем йәшәй.

1855 йылда Авраам Линкольн үҙенең киң билдәле "Улымдың уҡытыусыһына хат"ын яҙа. Был хат уның 5 йәшлек кенә яратҡан улы Уильямдың уҡытыусыһына төбәп яҙылған булһа ла, ҡыҙғанысҡа, атаһы нәсихәттәрен тормошта ҡулланырға насип булмай: улы 11 йәшендә генә вафат була һәм уны атаһы менән бергә ерләйҙәр. Аҡ йортҡа экскурсияға килгәндәргә атаһы менән улының һаман да ошо бинала шәүләләре йөрөп ятыуы хаҡында һөйләйҙәр. Атай һөйөүе, балаһы хаҡында хәстәрлек тойғоһо менән һуғарылған ошо хатты уҡып сығығыҙ әле. Ул асылда беҙ йыш ҡына онотоп китә торған бик мөһим нәмәләр хаҡында:

- "...Мин аңлайым, ул бөтөн кешеләрҙең дә ғәҙел һәм эскерһеҙ түгел икәнлектәрен белергә тейеш буласаҡ. Ләкин һеҙ ҙә уны һәр яуызға ҡаршы торор бер батыр һәм һәр эгоист сәйәсмәнгә ҡаршы торор тоғро лидер барлығына өйрәтегеҙ.

- Әгәр дошман бар икән, дуҫ та табыласағына өйрәтегеҙ уны. Бының өсөн ваҡыт талап ителәсәк, мин беләм, ләкин, әгәр мөмкин булһа, һеҙ уны эшләп алынған бер долларҙың табып алған бишәүһенән күпкә ҡиммәтерәк икәненә өйрәтегеҙ. Еңә белергә, еңеүҙәрең менән ләззәтләнергә өйрәтегеҙ.

- Мөмкин булһа, уны көнсөллөктән ситкәрәк алып китегеҙ. Бәйләнсектәр һәм маҡтансыҡтар еңтөнән еңеү яулауҙың барыһынан да еңелерәк икәнлеген уға иртәрәк тойорға өйрәтегеҙ. Булдыра алһағыҙ, уны китаптар менән ҡыҙыҡһынырға өйрәтегеҙ.

- Уға шулай уҡ буш ваҡыт та биргеләгеҙ. Ул мәңгелек серле күренештәр: һауалағы ҡоштар, ҡояш нурына ҡунған бал ҡорттары, йәшел ҡалҡыулыҡтарҙы биҙәгән сәскәләр хаҡында ла уйланып алһын.

- Мәктәпкә йөрөй башлаһа, алдыҡ һәм хәйләкәрлек ҡылыуға ҡарағанда уңышһыҙлыҡҡа юлығыуҙың күпкә яҡшырак икәнен төшөндөрөгөҙ. Кемдер уға яңылышыуы тураһында тәкрарлап торғанда ла, үҙ идеяларына ышанырға өйрәтегеҙ. Йомшаҡ күңелләләр менән йомшаҡ булырға, ҡатылар менән ҡаты булырға өйрәтегеҙ.

- Улыма еңеүсе артынан эйәргән өйөргә ҡушылып китмәҫкә үҙендә көс табырға өйрәтегеҙ. Уны бөтөн кешеләрҙе лә тыңларға, ләкин ана шул ишеткәндәрен хәҡиҡәт күҙлегенән сығып ҡарарға һәм яҡшыларын ғына айырып алырға өйрәтегеҙ.

- Булдыра алһағыҙ, уны ҡайғыһында ла көлөргә өйрәтегеҙ. Күҙ йәштәрендә оят юҡлығына төшөндөрөгөҙ. Оятһыҙҙарҙан көлөргә һәм артыҡ нык сөсөләнеүҙән һаҡ булырға өйрәтегеҙ.

- Үҙенең мейеһен һәм тән көсөн иң юғары хаҡҡа һатырға, ләкин бер ҡасан да йөрәге һәм рухы менән сауҙа итмәҫкә өйрәтегеҙ.

- Өйөр олоуын тыңламаҫҡа, әгәр үҙен хаҡ тип иҫәпләһә, алышырға өйрәтегеҙ.

- Уның менән йомшаҡ, ләкин артыҡ иркәләүһеҙ аралашығыҙ, сөнки утта һынап ҡарау ғына ҡоросто юғары сифатлы итә. Түҙеп торғоһоҙ булһын өсөн (насарлыҡҡа ҡарата) уның батыр булыуын, ә батыр булыр өсөн сабырлығын хуплағыҙ.

- Үҙенә ҡарата һәр ваҡыт юғары ышаныста булырға өйрәтегеҙ, сөнки ул шул саҡта кешелеккә ҡарата ла юғары ышаныс һаҡлар.

- Былар еңел эш түгел, ләкин ҡарағыҙ әле, һеҙ ниҙәр эшләй алаһығыҙ. Шундай яҡшы бала ул - минең улым!

**Авраам Линкольн, 1855.**

БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

**Гәзитебеҙҙең үткән һанында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы тарафынан ойошторолған "Ғаилә - туған тел һаҡсыһы" тигән бәйгенең финал өлөшөндә ҡатнашҡан ғаиләләр тураһында һүҙ башлағайныҡ инде. Стәрлебаш районы Йәлембәт ауылында йәшәүсе Фирүзә менән Флорид ИҪӘНСУРИНдар ҙа был бәйгелә еңеүселәрҙең береһе булды. Морат исемле ул, Айгүзәл менән Әлиә исемле ике ҡыҙ тәрбиәләй улар. Ғаилә башлығы Салауат ҡалаһында янғын һүндереүсе булып эшләһә, Фирүзә Йәлембәт мәктәбендә балаларға белем бирә. Халҡыбыҙҙың аҫыл рухи хазиналары - фольклор һәм йолалар, йыр-бейеү аша тәрбиәләй улар балаларын. Был эштә олатай менән өләсәйҙәр ҙә әүҙем ҡатнаша. Ҡәйнә-килен араһындағы йылы мөнәсәбәт менән дә уларҙың ғаиләһе үҙенә иғтибарҙы йәлеп итеп тора. Ҡәйнә - Нәзиә ханым һәм килен Фирүзә Иҫәнсуриналар менән ошо хаҡта һөйләшеп алдыҡ.**

# ӨЙЛӘНЕШКӘС ТӘ...

## ата-әсәһенән айырымланмаһын бала



▸ **Беҙ балаларҙы йола һәм фольклор нигеҙендә тәрбиәләйбеҙ, тигәйнегеҙ. Бындай тәрбиәнең ыңғай яҡтары нимәлә?**

**Нәзиә:** Атай менән әсәйҙең ғорурлығы нимә? Балаһының тәрбиәле булыуы. Тәрбиәле бала ниндәй һуң? Ололарға ихтирамлы, кеселәргә өлгө булырлыҡ, тотонған һәр эшен аҙағына тиклем еткерә белә, маҡсатлы, туған телендә һөйләшә, халҡын ярата һ.б. Бала ошондай булһын, тиһәң, уны халҡыбыҙҙың боронан килгән традицияларына нигеҙләнеп үҫтерергә кәрәк. Үҙем балалар баҡсаһы мөдире булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡтым. Унда ла беҙ халыҡ педагогикаһына таянып төҙөй инек программаны. Ғаиләлә лә шулай. Бәләкәй сағында бишек йыры йырлайһың, әкиәт һөйләйһең, үҫә килә бейетә, йырлата башлайһың, мәҡәлдәр әйтәһең. Былар үҙе үк баланы рухи һәм физик йәһәттән нығыта.

**Фирүзә:** Кемдер баланы йырлатып-бейетеүгә лә ҡаршы. Мин быға бик ыңғай ҡарайым. Мәҫәлән, мәктәптә бейеү түңәрәге алып барам. Үҙенә ышанып бармаған, баҫалҡыраҡ балалар ҙа, бейей башлағас, асылып китә. Улым да, ҡыҙҙарым да йырлай, бейей. Халыҡ ижадын ятһындар, тием, сөнки ундағы аҡылды бөгөнгө заманда иң модалы булған китап авторҙарында ла тапмаҫһың. Район кимәлендә үткән бөтөн конкурстарҙа ла ҡатнашабыҙ. Ике йыл элек улым Морат менән "Ирәндек моңдары"нда ҡатнаштыҡ, әсә менән ул әйтеше формаһында мөнәжәт башҡарҙыҡ. Ҡайным гармунда уйнай, йырлай, ҡәйнәм бейей, үҙем дә бейейем һәм йырлайым, шуға балаларыбыҙ ҙа беҙҙең юлды ҡабатлайҙыр инде.

▸ **Башҡалар менән сағыштырғанда, беҙҙең халыҡ балаһын алдына алып һөйөп тә, татлы телләнеп, сөсөлдәп тә ултырмай. Һөйһә лә, бала йоҡлағанда, йәғни, үҙенә күрһәтмәй генә һөйә. Был уның ҡаты бәғерлегенән тү-**

ӨС БЫУЫН ФЕКЕРЕ



# ИРЕҢДЕ МАҠТАП ТОРҺАҢ...

**Һорау: "Ире - йондоҙ, ҡатыны аҡса һанаһа, ғаиләлә татыулыҡ буламы?"**

***Сулпан ЗАКИРОВА, 60 йәштә, хаҡлы ялда:*** Беҙҙең быуындың өлөшөнә күп нәмә төштө, ил иҡтисады, тарихы һәр ғаиләлә лә сағыла. Шулай ҙа минең йәштәге ғаилә парҙарын тағы бер нәмә берләштерә - беҙ ғүмер буйы эшләп, тинләп йыйып, үткән быуаттың 90-сы йылдарында һаҡлыҡ банкыһында күпләп аҡса яндырған кешеләр. Фатирға, машинаға, балаларҙы уҡытыуға тигән аҡсаларҙы. Шуға уйлайым да, аҡса тип артыҡ бошонорға кәрәкмәйҙер. Әлбиттә, ир кеше ғаиләһен матди яҡтан ҡарарға тейеш, балаларға ла шуны һеңдереп үҫтерҙек. Йондоҙ һанаған ирҙе лә тауҙар аҡтарырға дәрләндереп ебәрә алалыр ҡатын. Бер ҡатындың хәйләһе ҡырҡ дөйәгә йөк булған, ти бит халыҡ мәҡәле. Ғаилә татыулығын боҙоп, тауышланып ултырғансы, маҡтап-йөпләп ебәр, күңелен үҫтер. Бер шулай йәш саҡта ағайығыҙ сираттағы эш хаҡын алып ҡайтып, һыуытҡыс башына һалған. Ҡараным да, ҡалай күп аҡса эшләгәнһең, тип барып ҡосаҡлап алдым. "Әҙерәк тәмәкелек алып ҡалдым әле", ти был. Йылы һүҙҙән ireп китеп, запасын да әйтеп ташланы. Бала кеүек бит ул ирҙәр, ҡыҙҙар! Аҡса алып ҡайтҡанда мотлаҡ маҡтағыҙ. Хәләл тирен түгеп, һеҙгә хәләл икмәк ашата бит ул. Бик ҡысҡырып әйтергә өйрәнмәгәнһегеҙ икән, эстән генә булһа ла уның менән һоҡланығыҙ. Эске был рәхмәтле тойғоғоҙ йөҙөгөҙгә яғылыр ҙа, хәләлегеҙҙе шатландырыр.

***Илсур МАНСУРОВ, 38 йәштә, эшҡыуар:*** Һорауҙы дөрөҫ ҡуйыуығыҙ оҡшаны миңә, ғәҙәттә, ҡатындар аҡсаға туймай бит. "Аҡсаны әҙ эшләй" тип, кеше араһында ирен һөйләп ултырғандарҙы күп ишеткәнем бар. Мин үҙ сиратымда, артыҡ күп туҙҙыра, тип, ҡатыныма көйә инем. Эшҡыуарлыҡҡа тотоноп киткәнсе дәүләт эшендә эшләнем. Белемде лә ситтән тороп, йәш байтаҡ булғас ҡына алғас, йүнле генә эш урыным да булманы. Тыуған районым менән Өфө араһында пассажирҙар ташып аҡса таптым. Бына шул мәлдә ҡатыным бөтөн нәмә менән дә риза ине: кеше фатирында йәшәүебеҙ, иҫке генә 12-се маркалы Ваз автомобилендә йөрөүебеҙ менән дә. 8 Мартҡа бүләк ителгән осһоҙло ләлә сәскәләре лә ҡыуандыра ине уны, уның миңә, улыбыҙға

**гел, ә халыҡ тәрбиәһенең шундай булыуы менән бәйле. Быға ҡарашығыҙ нисек?**

**Нәзиә:** Ысынлап та, халҡыбыҙ артыҡ сөсөләнеүҙе үҙ итмәй. Баланың "муйынын артыҡ һуҙыу" килешкән эш түгел, юғиһә, нисек тыңлатаһың уны аҙаҡтан? Фольклор ошо ҡатылыҡты йомшарта. Бишек йырын ғына алайыҡ. "Балаҡайым", "ҡолонсағым", "күҙ нурым" тигән матур-матур һүҙҙәрҙе моңло көйгә ҡушып йырлау баланы тынысландыра, "үҫкәс, батыр булыр ул" тигәнерәк теләктәр иһә күңелен үҫтерә. Дөрөҫ итеп теләк теләү ҙә оло һөнәр, быларҙың барыһының да өлгөһө - фольклорҙа. Үҫә килә башҡараҡ йырҙарға күсәһең, халыҡ йырҙарына тиклем барып етәһең. Йырҙарҙағы үҙенсәлекле сағыштырыуҙар баланың ижади ҡарашын киңәйтә, тәбиғәттең матурлығын күрергә өйрәтә, шәхестәр тураһындағы йырҙар аша тарихыбыҙҙы белә. Егеттәр - батыр, ҡыҙҙар матур булырға тейеш, тигән ҡараш тәрбиәләнә. Һәм быларҙың барыһы ла моң аша һалына. Бейеүҙәр ҙә шулай. Рух тәрбиәләйем тиһәң, бала тәрбиәләгәндә йыр-бейеүҙәр мотлаҡ кәрәк. Ундай баланың күңеле таҙа була. Беҙ сәхнәлә генә бейеп-йырлап йөрөмәйбеҙ. Өйҙә лә бер-береңә ҡарашып бейешеп алыу, әҙерәк кенә шаян һүҙҙәр менән көлөшөп алыу тормошобоҙҙо йәмләй генә. Эшкә лә өйрәтәбеҙ балаларҙы.

**Этнопедагогикала тыйыу ҙа ҙур урынды ала бит әле?**

**Нәзиә:** Беҙ балаларҙы улай уҡ тыймайбыҙҙыр, тип уйлайым, иркенерәк үҫтерәбеҙҙер ул.

**Фирүзә:** Мин ныҡ тыям балаларҙы, әммә артыҡ тыйыу дөрөҫ түгелдер, тип уйлайым. Балалар минән, ярамай, улайтма, тигән һүҙҙәрҙе күп ишетәләр. Ҡәйнәм иһә Флоридты ла, бикәсем Розаны ла нисектер иркенерәк тәрбиәләгән. Ирем дә балаларҙы артыҡ тыйып бармай.

**Нәзиә:** Баланың үҙенең фекере булырға, үҙ һүҙен әйтә белергә, үҙен яҡлай алырға тейеш - шул ғына. Ауыҙын асырға ла ҡурҡып торған балаға киләсәктә ҡыйын буласаҡ. Иң мөһиме, тәрбиәнең нигеҙендә ятыу ятһын. Улды ла, ҡыҙҙы ла ятырға кәрәк һәм улар быны белергә, күрергә, тойорға тейеш. Бер туҡтауһыҙ әрләп, насар уҡыйһың, дөрөҫ эшләмәйһең, тип торһаң, баланың үҙенә булған ышанысын һүндерәһең. Ипле һүҙле булығыҙ, тип кәңәш итә йөрөйөм барыһына ла. Йылы һүҙҙе йәлләмәгеҙ, эш өйрәткәндә маҡтап ебәрегеҙ. Йылы һүҙ - йән аҙығы, тиҙәр бит. Үҙебеҙҙең балаларҙы тәрбиәләгәндә яңылышмағанбыҙҙыр, тием, икеһе лә матур ғаилә ҡороп, татыу йәшәйҙәр, балалар үҫтерәләр.

**Һеҙ бер нисә йыл бер өйҙә ҡәйнә, килен булып йәшәгән кешеләр. Килен-ҡәйнә мөнәсәбәттәрен дөрөҫ ҡороу өсөн нимәгә иғтибар итеү мөһим?**

**Фирүзә:** Ҡайны-ҡәйнәмдәр менән Һарайҫа ауылында бергә 5 йыл йәшәнек. Хәҙер Йәлембәт ауылында өй һалып сыҡтыҡ. Уларҙан күреп, күп итеп мал тотабыҙ. Бөгөн күптәр ҡәйнә менән йәшәүгә ҡаршы, мин, киреһенсә, ҡәйнә менән йәшәүҙең ыңғай яҡтарын оҙаҡ итеп һанай алам. Ҡайным менән ҡәйнәмдең үҙ-ара мөнәсәбәтен күреп, иремде яҡшыраҡ аңлай алдым. Мал ҡарау, йортто тәрбиәләү, аш-һыу йүнәтеүгә ҡәйнәмдән өйрәндем. Ниндәй эшкә тотонһаҡ та, тәүҙә кәңәшләшеп алабыҙ.

**Нәзиә:** Мин ҡәйнә булараҡ, киленемде үҙемә һыйындырҙым, килен иһә миңә яғылып, йәшәнек тә киттек. Шөкөр, бөгөн дә шулай йәшәйбеҙ. Килен - ҡәйнә буҫағаһынан тиҙәр, киленем дә үҙемә оҡшаны ла ҡуйҙы. Ауыр һүҙле булманым, йомшаҡ булдым, ҡыҙым һымаҡ ҡабул иттем. Икебеҙ бер өлкәлә эшләгәс, бергә эшкә йөрөнөк. Иртәрәк ҡайтһа, ҡәйнәм, өйҙәге эште бөттөм, тип ҡаршы алды. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар һәйбәт, улар менән бер һүҙлебеҙ, был да ҙур бәхет.

**Фирүзә:** Ауылдарыбыҙ араһы 3-4 саҡрым. Ирем йөрөп эшләгәс, бик иртә китә эшкә. Ул мәлдә олаталары күрше ауылдан килеп, балаларҙы мәктәпкә машина менән илтеп ҡуя. Мәктәп үҙебеҙҙең ауылда, шулай булһа ла, бер ҙә мәшәҡәт, тип тормай ҡайным. Ҡайным дини кеше, намаҙ уҡый.

**Нәзиә:** Ауыл ерендә йәшәгәс, мәшәҡәттәр ҙә булып китә. Кемебеҙҙең мәшәҡәте ҙур, шунда йүгерәбеҙ. Ҡулдан килгәнде ярҙам итәбеҙ. Балалар беҙгә ауырыраҡ эштәрҙе эшләшә. Тел менән дә, ҡул менән дә ярҙам итешәбеҙ. Ҡайҙалыр китһәләр, балалар эргәһендә тороп торабыҙ. Быларҙың бер ауырлығы ла юҡ, киреһенсә, кәрәклегебеҙҙе тойоп йәшәйбеҙ.

**Заман менән бергә башҡорт ғаиләһе лә үҙгәрә. Беҙгә бөгөн нимәләргә күберәк иғтибар итергә, ниндәй йолаларҙы кире ҡайтарырға кәрәк, тип уйлайһығыҙ?**

**Нәзиә:** Бөгөн йәштәр өйләнешһә, тиҙ генә айырымландыра һалалар. Айырымландыралар ҙа, тормоштары менән ҡыҙыҡһынмайҙар ҙа. Минең уйымса, йәштәр ҡайны-ҡәйнә менән исмаһам 5 йыл тирәһе бергә йәшәргә тейештер. Бер-береһенә өйрәнеп, нығынып алыр өсөн кәрәк был. Тормоштоң сетерекле ерҙәрен өйрәтеп ебәрер өсөн дә кәрәк. Тәүге балаһын ҡулына алғас та, йәш килен күп нәмәне белеп етмәй. Ауырытмай ғына үҫтереп алырға ҡәйнә ярҙам итһә ине. Икеһенә генә был ауырлыҡтарҙы еңеүе ҡыйыныраҡ була, бик ауыр кисерәләр ҙә. Ике яҡлап йәш ғаиләне ҡурсып тороуға етмәй инде. Ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ та көслө булған борон башҡорттарҙа. Ошо мәктәпте лә нығытыу кәрәк.

**Фирүзә:** Борондан тормош иптәше итеп һайлаған кешендең нәҫеленә лә иғтибар итеү булған. Бөгөн ошоға еңел ҡарайҙар кеүек. Бына мин ни өсөн бала табырға, ауылда йәшәргә ҡурҡмайым, сөнки ирем һәйбәт, уның нәҫеле яҡшы. Ирем менән ғорурланам, арыҫлан ғаиләһен нисек һаҡлай, ул да беҙҙең өсөн өҙөлөп тора. Унан һуң, ике яҡлап та ярҙам көслө. Шунһыҙ тормошобоҙ, бәлки, икенсерәк тә булыр ине.

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

булған йылы мөғәмәләһе, йылы ҡарашы оҡшай ине. Йыраҡ ҡына туған тейешле ағай бизнес менән шөғөлләнергә тәҡдим итте бит. Эштәр тауға китте башта, аҡса килә башланы. Мин өйҙә һирәк ҡунаҡҡа әйләндем, командировкаларға ла йөрөргә, ситтә ҡунып ҡайтырға ла тура килгеләне. Ҡулға аҡса тотҡас ни, холоҡ та үҙгәрҙе, аҡса табам, тағы нимә етмәй, тип уйлай башланым. Әлбиттә, ҡатын көйһөҙләнде, бер ҡыш эсендә икешәр шәшке тун таптырып мыжый ине. Етмәһә, миңә булған асыуын улыбыҙға төшөрә. Шулай яйлап ғаилә тарҡалды. Эш тә гел яҡшы бармай икән, кеҫәлә елдәр уйнаған мәлдәр күберәк булды. Унан һуң, шәхси тормоштағы уңышһыҙлыҡ кәйефте ныҡ ҡырҙы, хәҙер теләк тә, дәрт тә юҡ.

Йәмғиәттә, нишләптер, кеше аҡса таба белмәй икән, ул - бахыр, тигән ҡараш формалашҡан. Берәй ҡыҙ бай булмаған, аҡса таба белмәгән егеткә кейәүгә сыға икән, уны ла бәхетһеҙ ҡатын, тип ҡабул итәләр. Ир кешенең яратыуы аҡса менән үлсәнмәй шул. Әгәр ҡатынға ирҙән аҡса ғына кәрәк икән, был осраҡта мине яратмайҙар, ә ҡулланалар ғына, тигән тойғо йөрәкте кимерә башлай. Етмәһә, ҡатының һине хуплап-маҡтап тороу урынына дәғүәләр генә белдерә икән, эш ҡатмарлаша. Аҡса бер ҡасан да етмәй, хатта миллиардерҙарға ла. Етә тип уйлап, булғанын еткереп, бергәләп йондоҙҙар һанап йәшәһәк ине, милләттәштәр!

***Гөлсәсәк МОСТАЕВА, 27 йәш, йәш әсәй:*** Беҙҙе әкиәттәр нимәгә өйрәтте? Бабай һунарға китә, әбей уны матур ғына итеп оҙатып тороп ҡала ла, арып ҡайтыуына йылы аш әҙерләп тора. Шуға ла минең аңымда ир - аҡса һанарға, йәғни, ғаиләне тәьмин итергә тейеш. Ир кеше табырға, ҡатын, өйҙә ултырған хәлдә лә, уртаҡ килемдең ингәнен-сыҡҡанын күҙаллап, ипле тотоноуҙы хәстәрләргә бурыслы. Шулай уҡ ғаилә башлығының эш хаҡы алған көндө барлыҡ аҡсаны тотошлай ҡатынына алып ҡайтып тоттороуын да өнәмәйем. Һөйгәненә бүләк-сюрприздар эшләргә лә кәрәк бит аҡса. Хистәрҙе һаҡлау, һөйөү тойғоларын йәшәтеү өсөн кәрәк бындай романтика. Был да бит ғаиләнең ныҡлығына өлөш индерә. Өйләнешкәс, "һинең" йә "минең" аҡсам тигән төшөнсәне оноторға булдыҡ беҙ. "Беҙҙең аҡсабыҙ" тип әйтәбеҙ. Миңә күлдәк алырға кәрәк икән, "Мин күлдәк алам", тимәйем, "Бөгөн сығып, ҡатыныма йәки әсәйегеҙгә күлдәк алабыҙ", ти ирем. Бөтөн нәмәне уртаҡ итеп йәшәү бәрәкәтлерәк. Әгәр ҙә ир аҡсаны тотошлай ҡатынға тапшырып, үҙенән яуаплылыҡты алып ташлай икән, быының аҙағы нисек була икән, белмәйем. Һәр хәлдә, мин улай итмәҫ инем. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: ирҙең ғаиләне ашатыусы, кейендереүсе, хәстәрләүсе, яҡлаусы икәнен йыш телгә алып, маҡтаңҡырап та, рәхмәт әйтеп тә торорға кәрәк. Әллә ни ауыр эш тә түгел, бары тик ихлас әйтелгән һүҙҙәр, әммә тап улар иргә артабан эшләү, аҡса табыу өсөн дәрт өҫтәй, илһамландыра. Дилбегәне үҙең тотҡан булып, шуға аҡса кәрәк, быға кәрәк, тип көн дә дау һалмаҫҡа, биҙҙермәҫкә, ә тотош яуаплылыҡты уға һалғанынды мәртәбә итеп күтәреү яҡшыраҡ.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# АЛЛАҺ БЕҘҘЕ...

## ишле итеп яратҡан

**Замандың тағы бер гонаһ шомлоғо - ғаилә институтына төбәлгән тарҡалыу ҡурҡынысы. Уның сәбәптәре, әлбиттә, йолаларҙан ситләшеү, асылындан яҙыу ул. Был юлы "Ни өсөн ғаилә ҡороу кәрәк?" тигән һорауыбыҙҙы Әбйәлил районы имам-мөхтәсибе Әхмәт хәҙрәт Шәйәхмәтовҡа төбәнек һәм был хаҡтағы һөйләшеүҙе башҡалар ҙа дауам итер, тигән ышаныстыбыҙ.**

- Бөгөн ғаилә ҡороу хаҡында һүҙ алып барыу, был хаҡта йәштәргә өгөт-нәсихәт биреү айырыуса кәрәк һәм бик тә урынлы булыр, сөнки һуңғы йылдарҙа ғаилә ҡиммәттәрен һанламау, айырылышыуҙар йышайҙы, көнбайыш "модаһына" эйәреп, йәнәһе лә, граждандыҡ никахы менән йәшәүселәр арта бара.

Ә бит никах тип әйтеү үҙе үк ир менән ҡатынды үҙ мөнәсәбәттәрен әхлаҡ нигеҙҙәрендә ҡороу бурысын йөкмәтә. Йола буйынса башҡарылған никах юҡ икән, тимәк, "гражданлыҡ" төшөнсәһе артына йәшеренеп йәшәүгә бәрәбәр был мөнәсәбәттәр. Быныһы ғаилә мәсьәләһенә ҡағылышлы яҙыҡлыҡтың бер яғы булһа, икенсе яҡтан, ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында йәштәре уҙып киткәнсе башлы-күҙле булмай йөрөүселәр ҙә байтаҡ. Ғаилә ҡороу ни өсөн кәрәк, тигән һорауҙы урынлы ҡуяһығыҙ. Был һорауға төрлө йәһәттән: табип, психолог, социолог, йә булмаһа, ата-әсә күҙлегенән нәсихәт бирергә була, ә мин был турала Ислам динебеҙ тәғлимәттәренә таянып, бер кәлимә һүҙ әйтмәксемен, сөнки Ислам - ул иман, ә иман - әхлаҡлылыҡ, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса йәшәү өлгөһө. Аллаһ әҙәм балаларын парлы-парлы, ике төрлө енес итеп яратҡан, шуға ла ир менән ҡатын никахлашып, күркәм ғаилә ҡороп йәшәргә, балалар үҫтереп, нәҫелен арттырып, бер-береһенә иптәш һәм дә терәк булып, донъя хәстәрҙәрен бергә үтәп, шатлыҡтарҙы ла, ауырлыҡтарҙы ла уртаҡлашып йәшәргә бурыслы.

Динебеҙ ҡушҡан йола буйынса никахлашып, мөнәсәбәттәрҙе рәсмиләштереп йәшәү ир менән ҡатынға ғаилә алдында яуаплылыҡ, изге вазифа йөкмәтә. Тәртипле рәүештә ғаилә ҡороп йәшәү әҙәм балаһының рухи һәм физик сәләмәтлеген тәьмин итә, енси аҙғынлыҡты тыя. Шул уҡ ваҡытта никахтың кешеләр өсөн генә түгел, йәмғиәт өсөн дә файҙаһын аңлата, сөнки ғаилә ныҡлығы - ул ил , йәмғиәтебеҙ ныҡлығы, тигән һүҙ. Аллаһ рәхмәте менән күк ҡабағы асыла торған дүрт сәбәптең береһе - никахтыр, тиелә хәҙистә. "Балаларығыҙҙы никах менән бергә ҡушығыҙ,- тип өйрәтә ата-әсәне изге Китап. - Өйләнгән кешеләргә Аллаһы Тәғәлә күркәм холоҡ бирә, мал-мөлкәтен ишәйтә, уларҙың дәрәжәһенә, игелекле сифаттарына ҡеүәт өҫтәй". Яңғыҙаҡ һәм берәҙәктәр алдында никахлы ир-егеттең өҫтөнлөктәре хаҡында ла күп әйтелә. Мәҫәлән, өйләнгән кешенең бер намаҙ уҡыуы Аллаһ өсөн буйҙаҡ кешенең төндәр буйы намаҙҙа тороуынан, ғүмер буйы ураҙала йөрөүенән күркәмерәк, тиелә. Өйләнгән кешенең хатта йоҡлап ятыуы ла буйҙаҡтың төндәрҙе намаҙҙа үткәреүенән яҡшырыҡ. "Игелекле бәндәләрҙең күбеһе минең өммәтемдәге өйләнгән ир-егеттәр", тигән хәҙис шәрехтәре мосолман ир-егеттәренә ни өсөн ғаиләле булыуҙың маҡтаулы, өҫтөнлөклө, хаҡ ғәмәлдәрҙең береһе икәнлекте асыҡ төшөндөрә. Ҡыҙ-ҡатын өсөн дә ир ҡатыны, балалар әсәһе булып йәшәүҙең төп шарт булыуы хәтергә төшөрөп кенә торола. Хәҙис-шәрифтәрҙең береһе тап ошо хаҡта:"Йәш ҡыҙҙар ағасында өлгөрөп еткән емешкә оҡшаш. Емеште ваҡытында йыйып алырға өлгөрмәһәң, ҡояш нурҙарында шиңеп, елдәр ихтыярына юлығып, улар юҡҡа сыға. Өлгөрөп еткән ҡыҙҙар ҙа кейәүгә сығырға тейеш. Шулай булмағанда боҙолоп китеүҙән уларҙы ла һаҡлап ҡалыусы табылмаҫ..."

Егет-ҡыҙҙарыбыҙҙы тағы бер яҙыҡтан аралап ҡалыу фарыз. Ул да булһа, ҡатнаш никахтарға юл ҡуймау. Йәш ваҡытта кеше төптән уйлап тормай, шуға ла үҙ милләтенән булмаған кеше менән ғаилә ҡора. Был осраҡта күпмелер ваҡыттан һуң уларҙың тормоштарында тел мәсьәләһе лә, дин мәсьәләһе лә мотлаҡ килеп тыуасаҡ. Балаларыңдың милләтен билдәләүҙә, уларға исем ҡушыуҙа аңлашылмаусылыҡтар буласаҡ һәм, ғөмүмән, ҡатнаш никахҡа барыу - ул диненә, халҡына, ата-әсәнә хыянат итеү менән бәрәбәр икәнлекте иҫтән сығарыу ярамай.

**Әхмәт хәҙрәт ШӘЙӘХМӘТОВ, Әбйәлил районы имам-мөхтәсибе.**

УЯН, УЙЛАН...



# ЭСКЕСЕ ҠАТЫНҒА

Һаумы! Кем тип өндәшергә һиңә? Әсәй кеше тип әйтергә тел әйләнмәй. Үҙ балаһын бәхетһеҙ итеүсе кеше әсәй исемен йөрөтә аламы?

Ҡатын-ҡыҙ тип тә әйтә алмайым. Сөнки ҡатын-ҡыҙ - донъя йәме. Ә һин?

Һин - эскесе ҡатын. Һин балаларыңдың бәхетле бала-сағын, матур киләсәген араҡыға алмаштырған әҙәм.

Һин - уғры! Бала саҡ - кеше ғүмеренең иң иҫтәлекле, ҡабатланмаҫ матур мәле. Һинең балаңдың иң гүзәл, хәсрәтһеҙ була торған өлөшө иң ауыр, ҡайғылыһы. Һин уларҙың бала сағын урлайһың.

Һин - хыянатсы. Йөрәгеңде ярып сыҡҡан балаларыңды, ғаиләңде кәйеф-сафаға, эскелеккә алыштырғанһың.

Һин - енәйәтсе! Бер гонаһһыҙ сабыйҙарыңдың күҙҙәрендә упҡындай һағыш ята. Ул шул тиклем тәрән, ҡасан да булһа таралырмы улар?..

Балаларыңдың күңелен ғүмерлеккә зәғифләүсе һин! Ҡатын-ҡыҙ эскән йортта бер ҡасан да тәртип, таҙалыҡ булмай. Һин балаларыңды тыуған йорт йылыһынан мәхрүм итеүсе! Һин эскелеккә бирелеп, өйҙән-өйгә бахмурҙан дарыу һорап йөрөгәндә балаларың яңғыҙ ҡала. Һин уларҙың тормошон ҡурҡыныс аҫтына ҡуяһың. Бәлә оҙаҡ көттөрмәҫ, уйлан!

Бар донъяға билдәле булған Салауат Юлаев, Әхмәтзәки Вәлиди, Аҡмуллаларҙы, ил күрке, ғорурлығы Ш.Бабич, М.Кәрим, Р.Ғариповтарҙы донъяға тыуҙырған, улар күңеленә рух һалған, милләт сәңгелдәген һаҡлаусы, көслө рухлы, аҡыллы, инсафлы, мәрхәмәтле, оло йөрәкле башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының йөҙөнә ҡара яғыусы һин!

Араҡы эскән - аҡылын эскән. Эскән кеше - бөткән кеше, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Шайтан һыуына өйрәнеп китеүе бер ни тормаһа ла, унан ҡотолоу әҙәм балаһына ҡимmәткә төшә. Эскелек упҡынынан, хәмер ҡоллоғонан ҡотолғандар бик аҙ. Үҙеңдәге иблесте еңә алмаһаң, бик ҙур хаҡ түләргә тура киләсәк һиңә. Ә ул хаҡ - бала фажиғәһе. Ә әсәй өсөн баланан да ҡәҙерле кем бар!

Һәр әсә балаһына изге теләктәрен теләй. Ә эскән кешенең теләге 40 көн ҡабул булмай тиҙәр. Тимәк, һинең бер теләгең дә ҡабул булмаясаҡ. Сөнки һин эсеүҙән туҡтағаның юҡ. Бәғер итең - баланды хәйер-фатиханан, аҡ теләктән мәхрүм итәһең бит һин!

Бөгөнгө көндә һин упҡын ситендә тораһың. Әсә наҙы, тәрбиә күрмәгән балаларың да шул хәлдә. Сабыйҙарыңдың күңел гөлөн һүндермә берүк. Зәңгәр офоҡтағы хыялға ҡарай талпынғанда ҡанаттары ҡайырылып ҡуймаһын. Юғиһә, бәхетһеҙлектәренең башы һин буласаҡһың. Ул саҡта балаларың кем буласаҡ? Һәр көн өйҙә йыйылышып эскән әҙәм йораттарының аяуһыҙ, ҡанһыҙ, әҙәпһеҙ һүҙҙәрен, һиңә ҡарата булған нәфрәтен күңеленә йыйып, үҫеп еткәс, һине күрергә лә теләмәгән бәхетһеҙ кешеме? Йәки... Үҙең кеүек иҫерек, күҙенә ҡан һауған, һиңә - үҙ әсәһенә ҡул күтәргән бәндәме? Ә һин үкенеүҙәрҙән ғазапланған күңелең менән үҙ балаңа бәддоға уҡыясаҡһың...

Хатымды тамамлайым, әйтер һүҙем шул: тәҡдир алдында юғары хаҡ түләргә тура килмәһен. Эскелек һаҙлығынан күтәрел дә, донъяға, балаларыңа айыҡ аҡыл менән баҡ. Аҡылыңа кил, тәүбә ит! Әлегә һуң түгел...

**АҒИНӘЙ.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЭХ, МИНДЕГЕ ЛӘ МИНДЕГЕ!

**Мин Белорет районында йәшәйем. Беҙҙең яҡтарҙағы ҡуйы урман, мәғрур тауҙар бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Урындағы халыҡ өсөн улар матурлыҡ ҡына түгел, ә аҡса эшләргә мөмкинлек биргән байлыҡ та. Урманда үҫкән еләк-емеш, мүк, ағас - барыһы ла килем килтерә. Тауҙарҙағы ташты ла соҡоп һаталар хатта сосораҡтар. Тәбиғәт биргәнде ҡулланыу яҙыҡ түгел, ләкин һәр нәмәлә сама белеү кәрәк. Аҡса күҙҙе томаламаһын, килем алам тип тыуған ергә зыян килтерелмәһен ул бер ваҡытта ла.**



Йәйен-ҡышын урман ҡыҙырырға яратам. Әҙ генә буш ваҡытым булһа, үҙенә тартып торған урман, тауҙарға ашығам. Аҙнаһына берәй көн булһа ла урманға барып әйләнмәһәм, күңелемдә ниндәйҙер бушлыҡ пәйҙә була. Бала саҡтан һеңгән ошо ғәҙәтемә ҡарата атай-әсәйем бер ниҙә әйтмәне, ә кәләшем ҡабул итә алманы. "Бушты бушҡа ауҙарып йөрөгәнсе, исмаһам, миндек бәйләп алып ҡайт яҙынйәйен", тип йыш ҡабатлай башлағас, бер барғанымда бер нисә ҡайын миндеге эшләп, ҡайтып барышлай һатып та киттем. Кәләш дөрөҫ ҡолаҡ итемде ашай икән, мин әйтәм, ҡул һелтәп буш йөрөгәнсе, әҙме-күпме аҡса "бәйләйем" әле тип, был эшкә ихласлап тотондом. Бер-ике йыл тик ҡайын миндеген генә һаттым. Эшем ырамлы барҙы: миндектәр китеп торҙо - аҡса килеп торҙо.

Бер ваҡыт минән аҡ шыршы (пихта) миндеге һораусылар күбәйҙе. Бигерәк тә ир-егеттәр ҡайын миндеген "ҡатын-ҡыҙҙар өсөн генә бит ул", тип эре сирттереп ебәрҙеләр. Миндек һатыуҙы ағымға ҡуйған инем инде, шуға күрә үҙемдең урынға кәләште ҡуйҙым да урманға аҡ шыршынан миндек артынан киттем. Ай-һай, был эш еңелдән булмай сыҡты. Ысынлап та, ҡайын ни тиклем йомшаҡ булһа, аҡ шыршы сәнсешеп ыҙалатты. Шулай бер аҙ хитланғас, тора-бара яйына төшөндөм. Хәҙер "ых" та итмәй, бер барғанда тиҫтәләгән аҡ шыршы миндеге алып ҡайтам. Тауарымды төрлөләндергәс, эштәр тағы ла ыраны. Кәләш хәҙер үҙе үк мине урманға "ҡыуа" башланы. Бына 5-се йыл инде миндек һатыу эшҡыуарлығын үҫтерәм.

Ҡайын миндеген заказ буйынса эшләп, күмәртәләп тә һатам. Уны күпләп эшләп һалып ҡуйһаң да зыяны юҡ, оҙаҡ һаҡларға мөмкин. Ә аҡ шыршы миндеге бик нескә, кипһә энәләре ҡойола башлай. Шуға күрә уны әҙләп кенә бәйләйем. Әлбиттә, яҙ-йәй айҙарында бәйләнгән аҡ шыршы миндеге менән көҙөн-ҡышын эшләгән айырыла. Тәүгеләре йомшаҡ энәле, сабынғанда ныҡ ауырттырмай, ә һалҡын осорҙағылары "ҡатыраҡ холҡло". Ләкин һәр ҡайһыһына һатып алыусы табыла, шуға ла йыл әйләнәһенә әҙерләп һатам. Ике төр миндектең дә хаҡы бер сама - 30 һумдан алып 70 һумға тиклем. Әгәр ҙә бер генә миндек алалар икән, ҡыйбатыраҡ хаҡҡа һатам, күберәк алһалар, хаҡын төшөрәм. Күмәртәләп алып китеүселәргә 25-30 һум менән дә биреп ебәрәм. Ауылым ҙур трасса буйында урынлашҡас, һатыу йылдам бара.

Бына ошо рәүешле аҡса "һуғып" ятам ауылымдан алыҫ китмәй генә. Яратҡан урманымда ла иркенләп йөрөйөм, аҡса ла килә, кәләш тә шат, ғөмүмән, барыһы ла риза был эшмәкәрлектән. Һәр ауылда ла миндек һатып аҡса эшләргә мөмкин, тип уйлайым. Тик, әйтеп үткәнемсә, аҡса эшләйем тип артыҡ шашыу яҡшыға алып килмәй. Тәбиғәтте асыуландырырға ярамай.

**Вилүр ЙӘҒӘФӘРОВ**

ҒИБРӘТ ӨСӨН...



# АТАЙ ВӘХШИЛЕГЕ...

## улын да хайуанға әйләндерә

**"Киске Өфө"нөң бер һанында "Вәхшиҙәр ғаиләлә тәрбиәләнә" тигән мәҡәләне уҡыным да, тормошомдағы иң ауыр хәтирәләрҙе яңырттым. Шул ҡәҙәре дөрөҫ һәм әсе хәҡиҡәт бит был: аяуһыҙлыҡ - аяуһыҙлыҡ, вәхшилек вәхшилек тыуҙыра, тигәндәре.**

Минең ирем шундай ғаиләлә үҫкән кеше ине. Атаһы әсәһен дә, балаларын да аяуһыҙ туҡмай торған булған. Шуға ла ирем атаһы менән бөтөнләй аралашмай, тыуған йортона ла ҡайтып йөрөмәй торғайны. "Бер саҡ беҙ, өс бер туған малай, йылға буйында уйнап йөрөйбөҙ, -тип һөйләгәне хәтерҙә иремдең. - Ауыл осонан йән-фарман атта сабып, атайыбыҙ килә, үҙе ҡысҡырып һүгенә. Ниндәйҙер ярамаған эш эшләгәнбеҙ икәнен шундуҡ һиҙендек. Хәҙер арыу ғына эләгәсәк икәнен дә аңланыҡ. Атайыбыҙ килеп етеретмәҫтән ауыл яғына йүгерә башланыҡ. Ул артыбыҙҙан ҡыуып етте лә, оҙон сыбыҡҡыһы менән һыҙырып ебәрҙе өсөбөҙгә лә. Ауылға ҡайтып еткәнсе, мал ҡыуғандай, шулай сыбыртҡыланы. Тәнебеҙҙә йән еребеҙ ҡалмағайны..."

Атаһының тағы ла ҡот осҡосораҡ вәхшилектәрен һөйләй торғайны ирем. Үҙем мөхәббәтле, бер-береһенә тауыш күтәреү түгел, "иҫәр" тип тә әйтеүсе булмаған ғаиләлә үҫкәс, тәүҙә иремдең һөйләгәндәрен ҡабул итә алмай торғайным. Күп тә үтмәне, вәхши атай, вәхши ир образы йәнәшәмдә барлыҡҡа килде. Ирем илай-илай, нәфрәтләнеп иҫкә алған атаһының роленә үҙе инде лә ҡуйҙы: бер сәбәпһеҙгә һуғып ебәрһенме, йығып һалып типкеләһенме... Эскән көйө түгел, айыҡ көйө эшләй ине быларҙы. Нимә-нимә, эсеү яғынан ул атаһынан ғибрәт алғайны - эскелекте күрә алманы. Әммә осраҡлы ғына эсә ҡалһа, ысын мәғәнәһендә хайуанға әйләнә ине.

Ике йыл ғына йәшәнек, әммә күрмәгәнде күрһәтте. Тән яралары уңалды, йән яраһы уңалмай. Ирҙәрҙән ҡурҡыу, уларға ҡарата нәфрәт һаман үтмәй. Хәйер, һүҙем ул турала түгел. Һүҙ - ғаиләләге балаларҙы яратып, наҙлап тәрбиәләү тураһында. Ҡатылыҡ булырға мөмкин, әммә ул вәхшилеккә, баланы кәмһетеүгә әйләнмәһен. Гәзиттә баҫылған баяғы "Вәхшиҙәр ғаиләлә тәрбиәләнә" тигән мәҡәлә, ысынлап та, балалары булған ата-әсәгә оло һабаҡ, ғибрәт булһын ине.

**Сәғиҙә ЯРУЛЛИНА,**
**Шишмә районы.**

***✓ Сәлим үҙен ҡамаған стена-түбәне тағы ҡапшаны. Ысын күмгәндәр! Ир, баш осондағы таҡтаны һыҙыра тырнаны ла, бысраҡ бармаҡтарын сәс араһына батырып, инәһеҙ ҡалған көсөктәй шыңшып иларға тотондо.***




Үҙ тамағының ғыжылдап сыйылдауына уянып китте ул. Кибеп аңҡауына йәбешкән телен көскә әйләндереп, күптән тәрбиә күрмәгән, ярылған ирендәрен ҡыбырлатты. Йөрәгенең ярһып тибеүе уны тертләтте, көн дә ҡабатланған хәлен иҫләгәс тә, сарсаған тәне буйлап ҡурҡыу тулҡыны йүгерҙе. Яңы "градус" даулаған йөрәк мейегә бәрҙе, туҡ-туҡ дөпөлдәгән һайын башының бер яҡ ситенә сүкеп ауыртырға кереште. Ир ауыр ыңғырашып ҡуйҙы. Хәл мөшкөллөгөн тойоп, күҙҙәрен асырға маташты, әммә эренләгән күҙ ҡабаҡтары бер-береһенә йәбешкән, көскә айырылды. Дөм ҡараңғы. Ҡайҙа ята? Уң ҡулын ситкә шылдырҙы, бармаҡтары шыраулы стенаны һәрмәне. Ул тормаҡ булып ҡапыл ҡалҡынды, ләкин башы ҡаҡ таҡтаға бәрелеп, кире ҡаҡлыҡты. Ҡото осто Сәлимдең. Әллә?.. Ике ҡулын да күтәреп, бармаҡтарын түбә буйлап йөрөттө. "Йышлап ҡаҙаҡлағандар", тигән уйҙан йөрәге һикереп сығырҙай булып туланы. "Ә, нишләп урыҫтыҡылай табутҡа һалғандар?" Йәнә уй кәйелде геүләгән башында. Байтаҡтан ҡырҡылмаған тырнаҡ шәбеһе бөгөлгән ҡаҙау һалҡынлығын тойоп үтте. Уф-ф... Бына ни хәлгә еткерҙе эскелек! Бик йыш телгә алынған көләмәс геройының көлкөлө мажараһы үҙе менән булырын уйлап та ҡарамағайны. Үлгән тип күмгәндәр бит үҙен! Ләхет эсендә һауа етмәй, күрәһең, кинәт тын алыуы ауырлашты, әсе тупраҡ еҫе танауын ярып барғандай. Сәлим, ышанғыһы килмәй, үҙен ҡамаған стена-түбәне тағы ҡапшаны. Ысын күмгәндәр! Ир, баш осондағы таҡтаны һыҙыра тырнаны ла, бысраҡ бармаҡтарын сәс араһына батырып, инәһеҙ ҡалған көсөктәй шыңшып иларға тотондо. Шулай сәстәрен йолҡа-йолҡа илаулай биргәс, йән асыуынан "А-а-а!" тип ҡысырып, тубыҡтары менән түбәгә типте. Түбә бирешмәне. Тағы типте. "Тереләй күмдегеҙ би-и-ит, сығарығыҙ мине-е-е!" тип сүл бүреһеләй олоно Сәлим, таҡталарҙы бармаҡтарын ҡанатҡансы тырнап. Ул инде йөрәк һуғыуын да, күңел болғаныуын да, баш сатнауын да онотто. Ирҙең күҙ алдында яңы ғына хасил булған ҡәбер, дүрткел өйөлгән дымлы тупраҡтан метр ярым аҫта, һалҡын ер ҡуйынында тере, әммә яҙмыш хатаһы буйынса һап-һау килеш сереүгә дусар булған кәүҙә. Гүр тынлығы ҡосағында уның кәүҙәһе! Үҙен йәлләне. "Бәлки зыяраттан ҡайтмағандарҙыр, хәйер таратып торалар ҙыр, һуң булмаҫ борон тауыш бирәйем... А-а-а! Эһе-һе-е-ей!" Ишеттеләр бит! Өҫкө таҡтаға көрәк менән һуҡтылар, ғырылдаҡ тауыш янда ғына:

- Сыҡ урындыҡ аҫтынан... Һыу бир... Башым ярыла... Ыһ... - тине. Сәлим ҡапылғара төшөнмәне. "Бисә бит... Ыҙнашит күмеп өлгөрмәгәндәр", - тип уйланы ҡыуанып.

- Һур таҡтаны! Үлермен мин һеҙгә үлмәй ҙә, инәгеҙҙе... - Ул әшәке һүгенеп, тағы түбәгә типте.

- Алйыма, Сәлим... Тороп свитте яҡ та, һыу әпкил, бахмил башланды... - Бисәһе ҡолаҡ төбөндә генә мығырланы.

Бер аҙыраҡ зиһенен туплап, өндәшмәй ятты ир, шунан үҙенең яратҡан урыны - урындыҡ аҫты иҫенә төшкәс, өйрәнгәнсә, һулға тәгәрәләп, бүлмә уртаһына шыуышты. Таңдан ҡасып мәғрипкә табан йөҙгән ай бүлмә эсен яҡтырта. Өй йыһаҙы һүрән яҡтылыҡта аҙашмаҫлыҡ төҫмөрләнә әлдә. Сәлим тороп баҫты, ләкин башы әйләнеп, кәүҙәһе штормға эләккән караптай бәүелде. Кәрәкле йүнәлешкә табан көскә һәлпәнләп, ишек яңағын һыпырҙы, тоҡандырғыс тәңгәленә еткәс, бүлмә эсе ҡапыл яҡтырҙы. Йорт хужаһының күҙ алдында таныш күренеш асылды: урындыҡта сәстәре уҡмашҡан бисәһе бөгәрләнгән, унан ары күптән ағартылмаған мейес, мейес буйында урынлашҡан япмаһыҙ түңәрәк өҫтәл, өҫтөндә бысраҡ һауыт-һаба, аҙыҡ сәпе-сөпөһө, ҡатҡан икмәк киҫәктәре, тешләнгән һуған баштары, сәйнәлгән тәмәке төпсөктәре, аҙналап йыуылмаған иҙәндә арҡыс-торҡос буш шешәләр. "Ух, туйҙырҙы мындай тормош... Һарыуҙы ҡайната..."

- Уф-ф-ф... - Сәлим башын тотоп, ишек төбөнә сүгәләне, ҡоҫҡолоҡ һылашҡан салбар балағына тәү күргәндәй тексәйеп ултырҙы, ҡарашы еүешләнгән аяҡ араһына төшкәс, йәнә һүгенде:

- Әпсәнде... Ҡоҫҡолоҡ та, һыҡра кәк всегдә, уф-ф-ф... - Үҙенән борлаған һаҫыҡ еҫтән танауын йыйырҙы. "Урындыҡ аҫтында әсе тупраҡ еҫе тигәнем... Ыштанға һейгәнмен, һыу мейе..." Ул бер килке ҡанһыраған шәбе төптәрен тикшергәс, ишек яңағына йәбешеп торҙо ла, сайҡала-сайҡала өҫтәлгә табан тазраңланы. Кисен бушатылған шешәне кәлепләнгән ҡулы йәһәт эләктерҙе, саңҡайып ауыҙына килтерҙе, әммә алтынға бәрәбәр араҡынан тамсы ла ҡалмағайны. Шешәне кире ҡуйып, өҫтәл аҫтына эйелде, йығылышып ятҡандарын шалтыратып байҡап сыҡты.

- Нимә, кисә мин йығылғас төпләп ҡуйҙыңмы яртыны, мауыҙ? Ирҙе уйлау юҡ, үҙ горлың туйһа булды... Йөҙ грамм да ҡалмаған...

- Һыу бир... Ыһ... - Әклимә мендәргә туҙраған сәстәре араһынан тоноҡ мөңөрләне.

- Иркәләнә лә ятаһың. - Сәлим һабын күбеген онотҡан, һаҡал үсентеһе баҫҡан йөҙөн боҙҙо, усын йөрәге тәңгәленә ҡуйып, йәнә уфылданы. Һикһән йәшлек бабайҙай аяҡтарын саҡ шылдырып, стена ҡырында ултырған күнәккә йүнәлде. Һыу һыуһынды ҡандырырлыҡ һалҡын ине, ир сүместе һоҫто ла, көнө буйы һуғарылмаған һарыҡ ише ғолҡолдатып эсте. Ҡатыны үҙенә һонолған сүместе алып, уртлап-уртлап йотто, һәленгән яланғас аяҡтарына тамған тамсыларға иғтибар итмәй, башын саҡ күтәреп, мәғәнәһеҙ күҙҙәрен иренә төбәне. Таушалған йөҙөндә шешенгән күҙ ҡабаҡтары лампочка яҡтыһына ялтырап, яһалмалай тойола.

- Сәлим, йөрәгем туҡтай... Һатырлыҡ нәмә ҡалды? Осор... Уф...

Ире һауытты тартып тиерлек алды ла, әйләнеп, ҡойто ғына бүлмә эсен һөҙөп ҡарап сыҡты. Һатырлыҡ, йәки араҡыға алыштырырлыҡ кәрәк-яраҡ күптән осҡайны был өйҙән. Иң кәрәклеләре генә үҙ урынында, бында әлегә кеше йәшәгәнен белдерә. Кейемһалымдан башҡа өҫтәл түренән төшмәгән, биҙәктәре уңған электр сәйгүне, мейес плитәһе төҫөндәге май-ҡоромға батҡан ҡорос таба, бербереһенә ҡапланған быяла һауыт-һаба, ялтырауын юғалтҡан иҫке мебель, гәрдиндәргә саҡ эленеп торған тәҙрә ҡорғандары. Кәрәк-яраҡтан башҡа өй тулы ҡый-ҡым, тишек-тошоҡтарҙа мәхлүктәр мыжғый, баяғы гәрдиндәр буйлап, туҙан һылашҡан мөйөш-һәйештәрҙә күпләп үрсегән үрмәксе ауҙары һуҙылған. Ауҙарға эләгеп ҡорбан булған себен-бөжәктәрҙең буш кәүҙәләре быяла ектәренән өргән елгә һелкенеп ҡуя. Һаҡһыҙлыҡтан йәтмәгә ҡапҡан ҡорбандар һаны көндән-көн күбәйә генә, эреле-ваҡлы үрмәкселәр сираттағы тамаҡты көтә, ана, араларында иң һимеҙе ҡорған йыртығында йыбырлаған бөжәкте аңдый. Егәрле үрмәксе шулай йән аҫрар өсөн тырыша, тоҡом ишәйтер өсөн йоморҡалар һаласаҡ әле ул, артабан наҙлап бала бағасаҡ.

Сәлимдең ҡарашы ишектән уң яҡлап элгестә эленгән балалар кейемендә туҡтаны.

- Әклимә, балалар ҡайҙа?

- Суртым белһен уларҙы... Йоҡлайҙарҙыр... Сәлим, үләм... Илгизәнең әллә телефонын?.. - Әмәлен тапты Әклимә, терһәгендә күтәрелде. - Бер литр һора.

- Кемдән? - Ирҙең хәле хөртәйгәндән-хөртәйә, шуға ҡолағы ҡарпайҙы. -

Күршегә төндә ишек шаҡыма инде, магазин һатыусыһы өйөндә һатһа ла, әйбергә алыштырмай...

- Байға бар... Йәһәтлә... - Ҡатыны тороп ултырҙы, өшөгәндәй, муйынын эскә тартты, бөтә тәне ҡалтырай, уның менән бергә урындыҡ та һерелдәгән төҫлө. Сәлим, әйтерһең, бисәһенең рөхсәтен генә көткән, шул минутта бөрсәләй шәбәйҙе, уҡтай түрге өйгә атылды. Бызмырлап оҙаҡланы. Әклимәгә һәр секунд ғүмер оҙонлоғондай, түҙемһеҙләнеп екерҙе:

- Мыштырлама! Матрас аҫтына һалғандыр... Ыһ... Һатып ҡуймаһындар, тип йәшерә. Шәп, йәнәһе, берәү...

Алғы яҡҡа былҡылдаған Сәлим, усына ҡыҫҡан телефонға ҡарап, бер мәлгә туҡтап ҡалды.

- Байға минең должок бар, был нәмәне тартып алып, сикүшкә түгел, бер йотом да бирмәҫ...

Шуға ла башың эшләмәй, тигәндәй, тегенеһе хәлһеҙ ҡулын һелтәне.

- Һылауға өндәшерһең, тип алда. Картуфлыҡ аша туранан тарт... Әй, ҡойҙороп алырға бутелкәне онотма... Тәкәтем ҡалманы... - Ҡатын урындыҡ шығырлатып, артына ауҙы.

* * *

Ярты сәғәттән баш төҙәткән ирле-бисәле күңелле әңгәмә ҡорҙо. Ваҡ һырҙар баҫҡан битенә ҡан йүгергән Әклимә башын артҡа ташлап көлдө:

- Иха-ха-хай! Төп башына ултырттыңмы һантый байҙы! Йөҙ тәңкәлек самопалына фермалай һарайын һылатмаҡсы. Дүрәкә нашел!

Сәлим, стакандағы шыйыҡсаны оҫта ҡыланып тамағына тура ҡойҙо ла, оҙаҡ ятып һарғайған һуғанды ҡыртылдатты.

- Һо-һо-һо! Әсе заразы, фу-у-у... Сәйнәнмә, башың шаңҡыһа, дарыуын эҙләп шунда бараһың. Үҙ һарайың иләктәй торһа торһон, байҙыҡын һыла! Точкы!

- Ошоно күрәһеңме? - Әклимә һулый барған нәҙек бармаҡтарын тырпайтып бөктө. - Ҡуҡыш! Кем байыта уны? Беҙ! Ҡалала ваннала болғатылған ҡаҙаҡ араҡыһын һатып, малайына өй төҙөнө, ишеү иномаркы алды. Бөтә мир ҡаҙаҡ араҡыһына туйына, ә алыпһатарҙар байып, типтереп йәшәй...

Ире, ашығып, бисәһен йөпләне:

- Әйтмә лә, кругом самопал! Райпо магазинында өс йөҙ тәңкәлеһе лә уның - паленка. Зәйнәб ҡаланан етмеш һумлығын һатып ала ла, мында рәхәтләнеп прилавканан завод хаҡына осора, тиҙәр...

Хужабикә стаканды шешәгә төкәтеп сәкәштерҙе лә:

- Әй, беҙгә пайдет, тамаҡ сылатырға градусы булһа, ҡырғыҙҙыҡын да һемерербеҙ! - тип ауыҙына түңкәрҙе.

Ултыра биргәс, шешәләштәр ҡәҙимге иҫерҙе, донъялары теүәлләнде ирле-бисәнең. Әклимә теле көрмәлеп, ирен маҡтаны, үҙен дә уңған хужабикә, хәстәрле әсәй, тип күктәргә күтәрҙе. Сәлим дә бурыслы булып ҡалманы, ҡатынын фәрештәгә тиңләне. Йәнә берәрҙе күтәргәс, өйләнешеп йәшәй башлағандарын иҫкә төшөрҙөләр.

- Әклимәкәй, Әклимәү. - Ире өҫтәл аша үрелеп, бисәһенең ҡулын тотто ла, эйелеп ирендәрен тигеҙҙе. - Әп! Һинең менән танышҡанда ауылығыҙҙа иң матуры һин инең, бисәкәй... Һине күргәс тә, мына алдамайым, иҫем китте. Хәҙер ҙә яратам.

Араҡыны йыш эсеүҙән кибеп барһа ла, Әклимә әле матурлығын юғалтмаған. Ҡыйғас ҡара ҡаштар, ҙур матур күҙҙәр, төймә танау ҙа үҙенә килешеп тора. Тик ҡасандыр шып-шыма бит тиреһе һарғайып, әбейҙәрҙеке һымаҡ һырҙар өҫтәлгәндән-өҫтәлә, күҙ төптәре ҡапсыҡланған, яһалма париктай туҙғаҡ сәс, ымһындырғыс кәүҙәһе һиҙелеп асанлана бара, кисәге ирәбәле сырайын гел ҡара болот ҡаплағандай. Йәш саҡтағы һандуғастай йомшаҡ тауышы ла хәҙер ҡарғаныҡылай ҡалынайған.

- Эй, рәхмәт, бабаҡайым, мин дә һине яратам. Мин хәҙер ҙә нисауа, хи-хи-хи... Мин берәүҙән дә кәм түгел, шулай бит! Донъяһын да теттереп көтәм, ғаиләмде лә ҡарайым. Мин... Иҡ... Иҡ... Иҡ... - Әклимә сиҡытыҡланы, әйтеп бөтөрә алмай, иҡылдығы сыҡты.

Сәлим өҫтәл өҫтөнән дуғаланып, Әклимәнең елкәһенә һуҡҡылап маташты, тик быуындары йомшарғайны, бәлтерәп, ҡуҡайып ултырған шешәне еңе менән һыпырып йыҡты. Әклимә, иҫереүенә ҡарамай, бүлтелдәп түгелгән шешәне һеләүһен етеҙлеге менән эләктереп күтәрҙе. Киләһе секундта ҡатындың ҡайнар усы иренең битендә шапылданы.

- Ҡайҙа! Һыйыр! Араҡыны әрәм иттең! Иҙәнгә аға... - Ул йәһәтләп йөҙө менән өҫтәлгә ҡаплана һалды, һарҡыуға табан юл алған шыйыҡсаны ҡалын ирендәрен ослайтып шөрпөлдәтеп өлгөрҙө, кире турайып, ҡатҡан икмәккә ҡалғанын һеңдерҙе. Артабан, сыланған киҫәкте ауыҙына оҙатты ла, ир танауына маңлай терәп үкерҙе:

- Нимә упайып ҡаттың, күҙле бүкән! Зәм-зәм һыуын түктең!

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# УҢЫШ... йыш йылмаямы?

■ Катания университеты белгестәре әйтеүенсә, уңыш ғәли йәнәптәренең ролен баһалап бөтмәйбеҙ. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, донъялағы иң бай, иң һәләтле, иң аҡыллы тип табылған күп шәхестәргә күпселек осраҡта бары тик уңыш йылмайған. Ғалимдар меңләгән виртуаль кешеләрҙән йыйылған компьютер моделе яһаған. Уларҙың ҡайһыларының аҡсаһы күберәк, ҡайһылары һәләтле булған, ә ҡайһылары иһә, киреһенсә, уңышҡа өлгәшә алмаған. 40 йылға һуҙылған карьера дауамында ҡайһыларға бер нисә тапҡыр ҡапыл уңыш йылмайған. Уларҙың карьера баҫҡысы буйлап күтәрелергә һәм һәләтен күрһәтергә мөмкинлек килеп сыҡҡан. Ҡайһыларға уңыш әйләнеп тә ҡарамаған, тәбиғи һәләттәре һәм тырышлыҡтары булһа ла, бындайҙар күләгәлә ҡалған. Иң ҡыҙығы, асыҡланыуынса, иң һәләтлеләр иң юғары уңышҡа өлгәшә алмаған. Яуап ябай. Сөнки уңыш ғәли йәнәптәре уларҙың шәхесен урап үткән.

■ Ҡатын-ҡыҙ өсөн йәйәү йөрөү ифрат файҙалы. Аҙнаһына ике тапҡыр булһа ла йәйәү йөрөһәгеҙ, йөрәк сирҙәре хәүефен күпкә кәметәһегеҙ, ти Браун университеты кардиологтары. Тикшеренеүҙәрҙә менопауза кисергән 89 мең гүзәл зат ҡатнашҡан. Уларҙың сәләмәтлеген 10 йыл дауамында күҙәткәндәр. Аҙнаһына 1 тапҡыр йәйәү йөрөүселәрҙең йөрәк сирҙәре менән ауырып китеү хәүефе 5 процентҡа кәмегән, аҙнаһына 2 тапҡыр саф һауаға сығыу иһә был хәүефте 20 процентҡа кәметкән. Йәйәү йөрөүҙең оҙайлығы 45 минуттан кәм булмаҫҡа тейеш һәм шәп итеп атлап йөрөргә кәрәк. Ҡатнашыусыларҙың тән ауырлығы һөҙөмтәгә бер нисек тә йоғонто яһамаған. Техас университеты ғалимдары ла физик әүҙемлек йөрәкте йәшәртә, тигән белдереү яһағайны. Бының өсөн 65 йәшкә тиклем күнекмәләр яһай башларға кәрәк, был мәлдә әле йөрәктең һығылмалылығы һаҡлана. Күнегеүҙәрҙе аҙнаһына 4-5 тапҡыр башҡарырға.

■ Бесәй кешегә ыңғай йоғонто яһай икән. Дөрөҫөрәге, уның мырылдауы. Мырылдау нервыларҙы тынысландыра, көйәләнеү һөҙөмтәһендә күтәрелгән ҡан баҫымын нормаға килтерә. Күптән түгел асыҡланыуынса, бесәйҙең мырылдауы төрлө йәрәхәттәрҙе уңалдырырға ярҙам итә, шулай уҡ стрестан һәм тын ҡыҫылыуҙан һаҡлай. Ғалимдар иҫәпләп сығарыуынса, бесәй 150 Гц йышлығында мырылдай. Бындай йышлыҡтағы тауыш тулҡындары кеше организмына ыңғай йоғонто яһай икән. Тимәк, бесәй ысынлап та шифалы хайуан булып сыға. Өйөндә бесәй булған кешеләр йөрәк-ҡан тамырҙары, нервылар сирҙәре менән табипҡа һирәк мөрәжәғәт итә.

■ Социаль селтәрҙәр пластик хирургтарға байырға булышлыҡ итә. Рутгерс университеты белгестәре раҫлауынса, селфи эшләгәндә танау 30 процентҡа ҙурыраҡ булып күренә икән. Был күптәрҙе пластик операцияға этәрә, имеш. Хирургтар билдәләүенсә, социаль селтәрҙәрҙә матурыраҡ күренеү өсөн танауының формаһын үҙгәртергә теләүселәрҙең һаны ла күбәйә бара.

АҢ БУЛ, КЕШЕ!

**Бер уҡыусыбыҙҙан хат килде. Унда ошондай тетрәндерерлек юлдар бар ине: "Ауылыма ҡайтҡанда әсәйемдән: "Ауылда ниндәй яңылыҡтар бар?" - тиеп һорайым. "Шул ағай эсеп үлеп ҡалды, был егет аҫылынып үлде..." - тип барлап китә әсәйем. Бәхетһәҙ, беҙҙең ауыл халҡының өстән бер өлөшө йә үҙ-үҙенә ҡул һалып, йә эскелек арҡаһында Аллаһы Тәғәлә биргән ғүмерҙе унының рөхсәтенән тыш өҙгән. Һуңғы арала ауылда ғүмерен ахырынаса йәшәгән кеше юҡ, тиерлек. Был хәл беҙҙең генә ауылда ғына түгел, тотош Рәсәйҙә күҙәтелә. Үҙ-үҙенә ҡул һалып, был донъянан китергә ашыҡҡан йәштәрҙе уйлаһам, йөрәгем әрнеп-әрнеп китә. Тимәк, улар ғүмер ҡәҙерен, тормош асылын, йәшәү мәғәнәһен төшөнөп етмәгән булған. Тимәк, улар ерҙә үҙҙәренә урын тапмаған. Ә теге донъяла таба алырҙар микән?.."**

# ҒҮМЕРЕҢДЕҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛ!



Үҙ-үҙенә ҡул һалыу - иң ҙур гонаһтарҙың береһе һанала. Был турала Ҡөрьән һәм хәҙистәрҙә лә әйтелгән. Ғүмер беҙгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән һәм тик Ул ғына уны тартып алырға хоҡуҡлы. Үҙ-үҙенде үлтереү Мөхәммәт бәйғәмбәргә тиклем дә тыйылған булған. Джундуб бин Абдулхаҡтан күскән хәҙистә Аллаһ илсеһе былай тип әйткән: "Һеҙгә тиклем йәшәгән бер кешенең яраһы булған. Ауыртыуға түҙә алмайынса, ул үҙенең ҡулын ҡырҡып ала һәм ҡанын туҡтата алмай, үлеп китә. Шунда Аллаһы Тәғәлә: "Был кеше мине көтмәйенсә, үҙ-үҙенә ҡул һалды, шуға мин унының йәненә ожмахҡа инергә рөхсәт итмәйем", - тигән.

Аллаһ илсеһе Хәйбәр яуы барған саҡта мосолмандар араһында ҡаһармандарса һуғышыусы Ҡуҙаман исемле һуғышсының тамуҡҡа әләгеүе тураһында һөйләй. Бәйғәмбәрҙең көрәштәше Хузаи Аҡсум был һуғышсы артынан күҙәтә һәм уны яралы сағында, ауыртыуға түҙә алмайынса, үҙен ҡылыс менән сәнсеүенә шаһит була. Был ваҡиға тураһында Бәйғәмбәргә һөйләгәс, ул: "Ысынлап та, ожмахҡа әләгерлек эш ҡылһалар ҙа, улар араһында тамуҡҡа әләгеүселәр бар. Киреһенсә, тамуҡҡа әләгерлек насар эштәр ҡылып та, ожмахҡа әләгеүселәр бар", - ти.

Ҡиәмәт көнөндә үҙҙәрен үлтереүсе кешеләр нисек үлгән, шулай яҙалана. Хәҙистә әйтелеүенсә: "Был донъяла кем үҙен быуып үлтергән, шул тамуҡта ла үҙен быуасаҡ. Кем үҙен сәнсеп үлтергән, шул тамуҡта ла үҙен сәнсәсәк". Икенсе бер хәҙистә, кем үҙен ағыулап үлтергән, шул тамуҡта ағыу тултырылған һауытты ҡулына аласаҡ, ә кем бейектән ырғып үлгән, шулар тамуҡта ла шундай уҡ яфаларға дусар ителә, тиелгән.

Исламды өйрәнеүсе күп ғалимдар фекеренсә, үҙен үлтереүсе кеше диндән яҙған тип һаналмаған һәм уға йыназа намаҙы уҡырға рөхсәт ителгән. Бәйғәмбәр әйтеүенсә, үҙен үлтереүсе Ҡуҙаман тамуҡҡа әләгә, ләкин мәңгелеккә түгел. Шуның өсөн, әгәр үҙен үлтереүсе кеше мосолман булһа, яҙанан һуң тамуҡтан сыға, тигәнгә өмөт итергә тейешбеҙ, ләкин бының өсөн ике шарт бар: ул иманлы булып үлергә һәм был юл менән үлеү хәләл, тип уйламаҫҡа тейеш.

Билдәле булыуынса, Алла илсеһе үҙен бысаҡ менән үлтереүсе кешегә йыназа намаҙы уҡымай. Шуның менән ул был кешегә шелтә белдерә, ләкин сәхәбәләр уға йыназа намаҙы уҡый. Әбү Йософ фекере буйынса, йыназа намаҙын яман ниәтһеҙ, ныҡ ауыртыуҙан ҡотолор өсөн үҙенә ҡул һалған осраҡта уҡырға мөмкин.

Аллаһы Тәғәлә кешегә ғүмер бүләк иткән, уны аманат итеп тапшырған. Ислам ҡанундары ғүмерҙе һаҡларға, физик һәм рухи ҡыйынлыҡтарға бирешмәҫкә ҡуша. Ҡыйынлыҡтарҙан ҡотолам, тип үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар бик ҡаты яңылыша, сөнки уларҙы ҡәберҙә лә, тамуҡта ла тормоштағы ауырлыҡтарҙан да ҡыйыныраҡ яҙалар көтә. Йән тәндә булғанда, Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтенә ышаныс йәшәй. Был тормош шулай ҡоролған: ҡыйынлыҡтарҙы еңеллектәр алмаштыра, төн урынына көн килә. Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп ярҙам һораған кеше үҙенең ҡыйынлыҡтарынан ҡотола башлай. Аллаһы Тәғәлә ҙур көскә эйә, уның ярҙамы ҡайһы ваҡыт һис көтмәгәндә, ҡотолғоһоҙ хәлдәр килеп сыҡҡанда беленә. Аллаға ышанып йәшәгән кеше көс ала һәм Уның ярҙамы менән бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡҡа бирешмәй.

Бер саҡ Бәйғәмбәребеҙ Ғабдулла ибн Ғүмәрҙең иңенә ҡулын ҡуйып: "Был фани донъяла үҙеңде юлаусы - мосафир кеүек итеп тот!" - тигән. Ғүмер тиҙ үтә, эшләргә тейеш эштәренде эшләргә, ғүмерҙең ҡәҙерен белергә өйрәнеп ҡал, тигәнгә ишара был.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҺҮҘЕҢ - ҮҘЕҢӘ, үҙең һүҙеңә килешһә...



**Тоғролоҡ - һүҙҙәребеҙҙә, эштәребеҙҙә һәм хәрәкәттәребеҙҙә дөрөҫ булыу, тигәнде аңлаталыр.**

Тоғро кеше ялған һөйләмәҫ, бер кемде лә алдамаҫ, башҡаларға ҡарата хәйлә ҡормаҫ. Тоғролоҡто Алла мосолмандары тоғро ҡылған. Бик күп аят һәм хәҙистәрҙә тоғролоҡтоң әһәмиәте аңлатылған. Ҡөрьәндә былай тиелә: "Әй, мөьминдәр, Алланан ҡурҡығыҙ һәм тоғролар менән бергә булығыҙ".

Мосолман - һүҙе үҙенә, үҙе һүҙенә килешкән кешеләр. Мосолман күренгән кеүек булыр, булғаны кеүек күренер.

Мосолман ҡулы һәм теле менән башҡаларға зарар итмәҫ. Үҙе өсөн теләгән нәмәне мосолман ҡәрҙәше өсөн дә теләр. Мосолман хәләл малына һәм аҫҡысына хәрәм ҡатыштырмаҫ. Ғаиләһенә һәм балаларына харам ризыҡ ашатмаҫ. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә былай тигән: "Мосолманға зарар иткән һәм уны алдаған кеше беҙҙеке түгел".

Ҡөрьәндә былай тиелә: "Кәметеп үлсәй торған үлсәү ҡуллангандарға ҡаты ғазап барҙыр. Улар кешеләрҙән һатып алғанда теүәл иттереп үлсәтеп алыр, ләкин һатҡанда кәм үлсәп һатыр".

Кеше белмәҫ, һиҙмәҫ, тип, бындай эштәрҙе эшләргә һис ярамай. Сөнки эшләгән эштәребеҙҙе Алла һәр ваҡыт күреп тора. Кирамән Кәтибин фәрештәләре гонаһ һәм сауаптарыбыҙҙы яҙып бара. Кешеләрҙе алдаһаҡ та, Алланы алдау мөмкин түгеллекте иҫтән сығарырға ярамай.

Ысын һәм эскерһеҙ мосолман үҙенең тоғролоғо һәм эскерһеҙлеге менән айырылып тора. Ул кешеләр менән аралашҡанда төрлө ауырлыҡтар һәм уңайһыҙлыҡтар менән осрашыуға ҡарамаҫтан, хәйләләмәй, аңлашылмаған һәм ялған һүҙҙәр һөйләмәй.

"Дөрөҫлөктә, иман килтергән кешеләр: "Беҙҙең тәрбиәсебеҙ - Аллаһ!" - тиерҙәр ҙә, иманда, диндә һәм тормошта тоғро, ғәҙел һәм ныҡ булырҙар. Үлгән ваҡыттарында уларға рәхмәт фәрештәләре килер һәм: "Һеҙ - хаҡ мөьминдәрһегеҙ. Үлемдән һәм Әхирәт ғазаптарынан ҡурҡмағыҙ. Бәлки, үҙегеҙгә вәғәҙә ителгән йәннәттәрҙең һеҙгә бирелеүенә шатланығыҙ," - тиерҙәр. Беҙ һеҙҙең менән донъяла һәм Әхирәттә дуҫтарбыҙ. Үҙегеҙгә әҙерләнгән йәннәттә күңелдәрегеҙ ни теләһә - шул булыр, унда һеҙгә ни һораһағыҙ - шул бирелер".

Тоғролоҡтан тайпылмаусы мөьминдәрҙе бына ниндәй ҙур бүләктәр көтә! Рәхмәт фәрештәләре уларға бына ниндәй ҡыуанысл хәбәрҙәр килтерәләр. Быларҙың барыһы ла тоғролоҡтоң ни ҡәҙәр юғары һәм бөйөк дәрәжәлә булыуын күрһәтә. Быларға бары тик Алланан ҡурҡыусы, Аллаға ысын күңелдән ғибәҙәт ҡылыусы һәм был донъяла байлыҡ, юғары дәрәжә һәм башҡаларға баш эйеү быуҙарынан азат булғандар ғына ирешә.

Йөрәгенә Ислам тәрбиәһе һеңгән ысын мосолман үҙ вазифаһына тоғролоҡло һәм биргән вәғәҙәләрен үтәүсе була. Был сифаттар уның йәмғиәттәге урынын билдәләүсе иң мөһим үҙенсәлек булып тора. Был үҙенсәлек уны тағы ла дәрәжәлерәк итә. Бындай сифатҡа эйә булыу мосолмандың хаҡ динле булыуын күрһәтә.

МӨҒЖИЗӘЛӘР - ЯНЫБЫҘҘА

# ТАШТАҒЫ ЭҘҘӘР КЕМДЕКЕ?

**Май бешмәк - йән сыҡмаҡ, бесән сапмаҡ - уйнамаҡ та көлмәк, тигән ти борон бер килен. Эй күңелле була торғайны шул күмәкләп хужалыҡ малына бесән әҙерләү өмәһенә йөрөүҙәре. Үткер салғыларҙың йәш үләнде ҡыршылдатып киҫеүе, бесәнселәрҙең, ҡыҙыҡ хәбәрҙәр һөйләп, шат тауыш менән көлөшөп алыуҙары, өмәселәргә ярҙамға килгән тракторҙың тигеҙ генә гөрөлдәүе, "сыңҡ-сыңҡ" итеп салғы сүкеүҙәр, мәтрүшкәле урман сәйе - ауыл кешеһенең йәненә, тәненә һеңгән күңелле бер мәл инде ул бесән осоро.**

Бер туҡтауһыҙ ҡоштар һайрауы, еңелсә иҫкән елгә уçаҡ япраҡтарының үҙ-ара шыбырлашыуы, яҡында ғына шишмә сылтырауы бергә ҡушылһа, ишетеп тә, тыңлап та туймаҫлыҡ серле бер урман моңо барлыҡҡа килә. Яңы ғына сабылған үләндең хуш еçе лә йәндәрҙе иркәләй. Өмәселәр өсөн бешеүсе йәш ит еçен һиҙеп, сабырһыҙланып шыҡырҙаған һайыҫҡан да бөтә ошо матурлыҡҡа үҙенсәлекле йәм өçтәй. Төшкөлөккә туҡтаған арала ла мәҙәк хәбәрҙәр һөйләп, яңғыратып көлөшеү, эскерһеҙ шаярыуҙар дауам итә. Арыу ҙа, талыу ҙа юҡ.



Ашнаҡсы ла үҙ бурысына яуаплы ҡарай. Оло ҡаҙанда бешкән ит ике ҙур табаҡҡа һоҫоп алынған да инде. Тәмле һурпала ҡул һалмаһын бешереп алаһы ғына ҡалған. Кемдер ҡабаланып һуған турай, кемдер самаур торбаһына ҡуҙ төшөрә. Ошондай өмәләргә ғаиләһе менән йөрөүселәр самауырҙарын да йәлләмәй торғайнылар хатта. Ашнаҡсыға булышмаҡсы булып, бына мин дә ҡаҙан аҫтындағы утты ҡағыштырырға тотонам. Шул ваҡыт Хәкимова Сания апай: "Килен, кил әле, кил, бер нәмә күрһәтәбеҙ", - тип саҡырып ала. Мин барып еткәндә, ул, иңкәйеп, ҡуйы үлән араһынан бик иғтибар менән нимәнелер ҡарай ине.

- Ҡана, ниндәй ҡыҙыҡ таптығыҙ? - тип, яныбыҙға Сәкинә, Зәкиә, Һәнеүәт апайҙар килде.

- Килен, ошо ерҙе һәйбәт кенә итеп ҡара әле. Берәй нәмә күрерһеңме икән? - тине Сания апай. Үҙе турайып баҫты. Мин тубыкланып, үләнде ҡулдарым менән ике яҡҡа ҡайырып, ул күрһәткән ерҙе иғтибарлап ҡарай башланым. Һәм ни күрәйем, ҡуйы үлән төбөндә һыйыр тояғы эҙе ярылып ята. Уң тояҡ эҙенән саҡ ҡына арттараҡ тағы бер эҙ. Һул тояҡтыҡы. Ыҡсым ғына тояҡ эҙҙәре. "Һе, тапҡанһығыҙ аптырар нәмә", - тиер ҡайһы берәүҙәр. Урманда бөткәнме болан, мышы эҙҙәре, тип тә өçтәрҙәр. Әммә ғүмер буйы буйы мал көтөп, һыйыр һауып, бесән эшләп йәшәгән ауыл кешеләре һыйыр эҙен болан, мышы эҙҙәренән генә айыра белә. Шунда йыйылған кешеләр, барыбыҙ ҙа тип әйтерлек, усыбыҙ менән эҙгә һаҡ ҡына баҫып ҡарайбыҙ. Эҙҙәр махсус рәүештә ҡатырып эшләп ҡуйған кеүек. Әйтерһең, малҡай тарихта мәңгелеккә ҡалыр өсөн ташты уя баҫып атлап ҡайтҡан. Эҙҙәргә бөртөк тә үлән үçмәгән, алғы өлөшөнә ямғыр һыуы йыйылған да, кипмәй ята. Тап сынаяҡ аҫтына һыу ҡойоп, алға ҡарай ҡырынайтып ҡуйған кеүек. Әлеге эҙҙәрҙән байтаҡ ҡына алғараҡ барып та, арткараҡ китеп тә эҙләп ҡараныҡ, әммә әле күргәндәргә оҡшаш тояҡ эҙҙәре башҡа күренмәне.

- Был Ҡуңыр буғаның ғына юлы, - тинеләр бер тауыштан Сания, Һәнеүәт апайҙар.

- И-и-и малҡай! Быҙау ғыналарын эйәртеп, Урал һырты буйлап, көн битләп ҡайтып киткән бит ул, - тип һөйләп алып китте Сәкинә апай.

- Ҡайтҡанда бер генә ҙур һыуҙы ла кисмәгән, тиҙәр бит, - тип өçтәне кемдер.

Ә аҙағыраҡ килеп, һуҙгә ҡушылмайыраҡ торған Зөләйха апай:

*- Аяғымды талдырып,*
*Төн йоҡомдо ҡалдырып,*
*Һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы*
*Эҙләп киттем шуларҙы,* -

тип йырлай ҙа башланы. Уға ҡалғандар ҡушылды. Йыр бөтөүгә шунда йыйылып киткән бөтә гәм, барыбыҙ ҙа тынып ҡалдыҡ. Кемдер Урал һырты буйлап биш быҙауын эйәртеп үҙ тыуған яғына ҡайтып барған Ҡуңыр буғаны, кемдер уларҙы эҙләй сыҡҡан киленде күҙ алдына килтергәндер ошо минуттарҙа. Ә минең башымда иһә: "Ни ҡөҙрәт менән был эҙҙәр таш һынлы таштa уйылған да, улар нисек һаҡланған?" - тигән уйҙар ҡайнай ине. Ашнаҡсыһын: "Аш өлгөрҙө, килегеҙ", - тигән тауышы был тынлыҡты боҙҙо. Ағас күләгәһе аҫтында ашъяулыҡтар тирәләй түнәрәкләп ултырып, тәмле аш менән һыйланғанда ла һүҙ ошо эҙҙәр тураһында барҙы. Яурыныбыҙға салғыларыбыҙҙы һалып, сираттағы һыуһынға китеп барғанда беҙ, баяғы ҡатындар, ташта мәңгелеккә ҡатып ҡалған эҙҙәр эргәһендә тағы бер аҙ туҡтап торҙоҡ. "Ысынлап та Ҡуңыр буғаныҡымы икән был эҙҙәр?"- тигән уй тынғы бирмәй ине миңә һаман. Минең уйымды дөрөçләгән кеүек, Сәкинә апай:

- Ҡуңыр буғаның ғына эҙе былар. Һин, уҡытыусы кеше, быны белергә тейешһең, - тип ҡуйҙы.

Урал һыртының иң яҡын тигән ауылдарҙан 16-18 саҡрым самаһы алыçлыкта ятҡан Түбә йорт тигән ере ине был. Үкенескә күрә, был урында ҡабат бесән эшләргә тура килмәне. Ә йәнәш ятҡан ике эҙ, кисә генә күргән кеүек, һаман күҙ алдымда тора. Хәҙер инде һигеҙҙән тиçтәне тултырған Фәхритдинова Сәкинә, Хәкимова Сания, Ғибәҙуллина Шәмсиә апайҙарҙан ошо ваҡиға тураһында тағы һораштым.

- Үҙебеҙ ҙә аңғармаçтан барып юлыҡҡанбыҙҙыр ул, килен, - тине апайҙар. Ә араларынан иң йәше булған 74 йәшлек Усманова Һәнеүәт апай:

- Эйе-эйе, килен, иçләйем. Күмәкләп ҡарап торғайныҡ бит. Урал һыртында бит ул Ҡуңыр буға эҙҙәре. Беҙҙең "Кантон килгән" тигән сабындан арыраҡ, - тип бер аҙ асыҡлыҡ индерҙе.

- Һеҙ шул эҙҙәрҙе күреп, сыр-сыу килгәндә мин салғы сүкей инем. Үҙ күҙҙәрем менән күрә алманым, йәл, - тине тормош иптәшем Дәүләтшин Зөлфәр, шул осорҙағы иң әүҙем бесәнселәрҙең береһе.

Ниндәй генә серҙәр һаҡламай тиһең уралып ятҡан Уралым, ҡат-ҡат булып һуҙылған мәғрур Ҡырҡтым! Иманым камил, хәҙерге заман байҙарының Әбйәлил урмандарын аяуһыҙ ҡырыусы ҡеүәтле техникаһы ботарлап ташламаған булһа, сал Уралымдың быуаттар төпкөлөнән килгән риүәйәттәренең, тиңе булмаған халыҡ йырҙарының тере шаһиты булып, бөгөн дә яталыр был эҙҙәр. Ҡайҙалыр һаҡланып ҡалған Бәйғәмбәр эҙе кеүек...

**Фәрзәнә ХАММАТОВА,**
**мәғариф ветераны.**
**Әбйәлил районы**
**Ишкилде ауылы.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ЙЫЛ ҠОШО - ҠӘЛМӘРГӘН



**Рәсәйҙә 1996 йылдан алып ҡоштарҙы һаҡлау союзы тарафынан йыл ҡошо билдәләнә. Һайланған ҡош төрөнә арнап, акциялар, саралар, конкурстар үткәрелә, листовкалар таратыла, плакаттар эшләнә. Быйыл йыл ҡошо тип балыҡсы ҡарсыға, йәғни ҡәлмәргән (скопа) иғлан ителде.**

Ҡәлмәргән - бик үҙенсәлекле ҡош. Ул Ер шарының Антарктиданан башҡа һәр континентында ла киң таралған. Ҙур кәүҙәле йыртҡыстың ҡанаттары һәм тәненең өçкө өлөшө көрән төçтә, ә аçҡы өлөшө - аҡ. Түше буйлап арҡыры көрән һыҙат үтә. Башы аҡ, күҙенән кәүҙә яғына ҡарай ҡара-көрән һыҙаттар бар. Ул оçта балыҡсы, шунлыҡтан, күберәк күл, йылға буйҙарында йәшәй. Рационының 99 процентын балыҡ тәшкил итә.

Башҡортостанда Көньяҡ Уралда теркәлгән, һирәк осраусы төр һанала. Ҡәлмәргән республикабыҙҙың һәм Рәсәйҙең Ҡыҙыл китаптарына индерелгән.

**Айһылыу НОҒОМАНОВА,**
**"Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы хеҙмәткәре.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Еңел йәшә

Ғаиләлә беҙ тышҡы ҡиәфәтенә, гәзәттәренә, сәйерлектәренә ҡарамайынса, кешеләрҙе баһаларға, үҙебеҙҙе һөйөү тәрбиәләргә һәм уны ҡәҙерләргә өйрәнәбеҙ.

Шуны иғтибарға алғаныгыҙ бармы: ҡунаҡтарға яҡындарыбыҙға һәм туғандарыбыҙға ҡарағанда йәҙ тапҡыр яҡшыраҡ мөнәсәбәт күрһәтәбеҙ. Ҡунаҡ саҡырырға булһаҡ, ике көн әҙерләнәбеҙ, шкафтан иң яҡшы һауыт-һабаны алабыҙ, тәм-том бешерәбеҙ... Ул кешеләр ҡайтып китә һәм, бәлки, улар менән башҡа бер ҡасан да осрашмаçлығыҙ ҙа. Бер нисә көндән ата-әсәләрегеҙ килә һәм һеҙ өçтәлгә ҡунаҡтарҙан ҡалған ризыҡты сығараһығыҙ. Ни өсөн кемдәрҙәлер үҙебеҙҙең иң яҡын кешеләребеҙгә ҡарағанда күберәк иғтибар бүләбеҙ? Бәлки, ваҡыты-ваҡыты менән барыһын да киреһенсә эшләргә кәрәктер?

Мин атайымды уның ғүмеренең һуңғы йылдарында ғына ҡосаҡларға өйрәндем. Барлыҡ йомшаҡлыҡтарҙан 8 йәшлек сағымда ҡаса башланым, ысын ир-егет булып күренгем килде. Ысын ир-егеттең үҙенең яҡындарын яратауын күрһәтергә ҡурҡмауын аңлау өсөн егерме йыл кәрәк булды.

Билдәле яҙыусы булып киткәс, бик йыш телевидениенан сығыш яһайым, портреттарым гәзиттәрҙә баçылып тора. Һәм шуға инандым: ниндәй генә сенсация яҙылмаһын, гәзиттең үткән һаны барыбер икенсе көндә үк сүп һауытында ятасаҡ.

Һөҙөмтәлә тормошомда шундай төп һорау торҙо: "Мине яҡшы белеүселәр өсөн мин кем һәм туғандарым өсөн кем? Миңә ышанырға буламы? Мин етерлек дәрәжәлә хәстәрлеклеме һәм уларға минең менән рәхәтме?" Тормошта ошонан да мөһимерәк нәмә юҡ.

## Яҡлау һәм терәк

*Ғаиләлә мөнәсәбәттәрен төрлөсә ҡорорға була. Партнерҙар булырға мөмкин, шулай уҡ кәнәркәштәр ҙә.*

Ҡайһы бер ғаиләләрҙә парҙар бер-береһен ахмаҡ итеп күрһәтергә тырыша. Һәм ундайҙар бик күп. Уларға бары тик бер-берһенә ярҙам итеп ҡарарға тәҡдим итер инем. Миңә тормошомда бөтөн нәмәлә ярҙам иткән ҡатын-ҡыҙҙы табырға тура килде. Нимә генә эшләһәм дә, унан кәнәш һорайым. Уның ярҙамынан башҡа үҙем теләгән эш менән шөғөлләнә, бөгөн кеммен, шул кеше була алмаç инем. Ваҡыт үтеүе беҙҙе яҡынлаштыра ғына.

Әгәр кем менәндер бергә йәшәргә ҡарар итһәгеҙ, бер-берегеҙгә ярҙамлашығыҙ. Әгәр быны эшләргә бер ниндәй ҙә теләгегеҙ булмаһа, уйлағыҙ, бәлки, һеҙ бөтөнләй бер-берегеҙгә кәрәкмәйһегеҙҙер?

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 19 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.20 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 02.50 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Золотая орда". 9-я и 10-я серии. Историко-драматический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 "Шерлок Холмс. Этюд в розовых тонах". Детективный сериал (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Злая любовь". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Осколки". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Следователь Тихонов". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Не плачь по мне, Аргентина!" Сериал (16+).**
**11.00 "100 имен Башкортостана".**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.15, 23.15 Дневник конкурса красоты "Һылыуҡай-2018" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Бай баҡса" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан"**
**22.00 "Спортбар".**
**23.30 "Автограф" (12+).**
**24.00 "Бунтующая юность". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 20 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.25 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 01.55, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 03.30 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Золотая орда". 11-я и 12-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "Шерлок Холмс. Слепой Банкир". Детективный сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Маньяк". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Осколки". 11-я и 12-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым". Ток-шоу (12+).
01.50 "Следователь Тихонов". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Не плачь по мне, Аргентина!" Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.20 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.15, 23.00 Дневник конкурса красоты "Һылыуҡай-2018" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.15 "Песня года" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Заповедная дорога". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 21 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.05, 18.25, 02.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Давай поженимся!" (16+).
16.10, 03.25 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Золотая орда". 13-я и 14-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Чемпионат мира по фигурному катанию. Женщины. Короткая программа.
01.30, 03.05 "Шерлок Холмс. Большая игра". Детективный сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Дурные деньги". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Осколки". 13-я и 614я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым". Ток-шоу (12+).
01.50 "Следователь Тихонов". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Не плачь по мне, Аргентина!" Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.15, 23.00 Дневник конкурса красоты "Һылыуҡай-2018" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**17.00 "Моя республика" (12+).**
**17.45 "Йөрәк һүҙе" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирмә".**
**20.15 "Сенгелдэк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.15 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**24.00 "Супружество". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 22 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.30 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 02.00, 03.05 "Время покажет"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Давай поженимся!" (16+).
16.10, 03.40 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 "Угадай мелодию".
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Золотая орда". 15-я и 16-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 "Шерлок Холмс. Скандал в Белгравии". Детективный сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". "Секретный объект". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир"
21.00 "Осколки". 15-я и 16-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Следователь Тихонов". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Заседание Государственного Собрания - Курултая РБ.**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.15, 23.00 Дневник конкурса красоты "Һылыуҡай-2018" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ" (6+).**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Русский подарок Америке. Владимир Зворчкин". Док. фильм (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.15 "Колесо времени" (12+).**
**00.15 "Счастливчик". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 23 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.15, 05.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15, 17.00, 18.20 "Время покажет"
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 04.15 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Голос. Дети". Новый сезон.
20.30 "Время".
20.55 Футбол. Сборная России - сборная Бразилии. Товарищеский матч. Прямой эфир.
23.00 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 Концерт Пелагеи "Вишневый сад".
01.15 Чемпионат мира по фигурному катанию. Женщины. Произвольная программа. Прямой эфир.
02.25 "Шерлок Холмс. Собаки Баскервиля". Детективный сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Петросян-шоу" (12+).
23.25 "Неваляшка". Мелодраматический сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Не плачь по мне, Аргентина!" Сериал (16+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**12.00 Н.Асанбаев "Семь девушек" (12+).**
**13.30, 23.00 Дневник конкурса красоты "Һылыуҡай-2018" (12+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-саға" (6+).**
**15.30 "Сыйырсык".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан"**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.15 "Байыҡ-2018" (12+).**
**00.15 "Самый опасный человек". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 24 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Доживем до понедельника". Худ. фильм.
06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Солдат Иван Бровкин". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.50 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.15 "Алексей Петренко. "Кто из вас без греха?" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.20 "Грипп. Вторжение" (12+)
14.20 "Берегись автомобиля". Комедия (12+).
16.15 Чемпионат мира по фигурному катанию. Мужчины. Произвольная программа. Прямой эфир.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 Чемпионат мира по фигурному катанию. Танцы. Произвольная программа.
00.30 "Шерлок Холмс. Рейхенбахский водопад". Детективный сериал (16+).
02.20 "Умереть молодым". Худ. фильм (16+).
04.25 "Мужское/Женское" (16+).
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.40 "Срочно в номер!". Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Измайловский парк" (16+).
14.00 "Кто я". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Вечернее шоу
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Родные пенаты". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.45 "Красавица и чудовище". Худ. фильм (12+).
03.00 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Большое приключение Осси и Теда" (12+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 22.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Замандаш" (12+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". Поэтический альманах (6+).**
**13.15 "Учим башкирский язык" (6+).**
**13.30 "Бай бакса" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**17.00 Творческий вечер народной артистки РБ Сары Буранбаевой (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Сенгелдэк".**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Следопыт" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры представляет…"**
**24.00 "Братья". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк.яз.).**

## 25 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10, 13.40 "Командир счастливой "Щуки". Худ. фильм (12+).
06.00, 10.00 Новости.
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.00 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.15 "Нонна Мордюкова. Прости меня за любовь" (12+).
11.15 "В гости по утрам" с Марией Шукшиной.
12.00, 20.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Теория заговора" (16+).
13.20 "Ералаш".
15.20 "Дорогой мой человек". Худ. фильм.
17.25 "Верные друзья". Худ. фильм.
19.25 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр.
23.40 Чемпионат мира по фигурному катанию. Показательные выступления.
01.45 "Жизнь Пи". Приключения (6+).
04.05 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.25 "Срочно в номер!" Сериал (12+).
06.20 "Сам себе режиссер".
07.15 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
07.40 "Утренняя почта".
08.20 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.00 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
12.35 "Женщины". Сериал (12+).
16.35, 00.30 "Иван Васильевич меняет профессию". Худ. фильм (6+).
18.30 "Синяя птица" - "Последний богатырь". Сказочный сезон.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.30 "Право на правду". Сериал (12+).
04.30 "Смехопанорама".

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.15 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Учим башкирский язык".**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Башҡорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30, 01.00 "Домик в сердце". Худ. фильм (12+).**
**18.15 Творческий вечер Ишмурата Ильбакова (12+).**
**20.15 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**20.30 "Моя Республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**

ВКЛЮЧИ СВЕТ салон люстр
ВДНХ - Дом
Менделеева, 158. 2 этаж
тел.: 8-987-59-59-753
ЗАКРЫТИЕ МАГАЗИНА
до 50%
ВЕСЬ МАРТ СКИДКИ НА ЛЮСТРЫ

✓ ***Башҡорттар бер-береһе менән һуғышырға тейеш түгел, сөнки башҡорт большевик та, меньшевик та түгел. Ул - башҡорт! - Зәки Вәлиди милләттәштәренә шулай тип өндәште.***



*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

**...Яҙ башы булыуға ҡарамаҫтан әле һаман да ап-аҡ ҡар юрғаны аҫтында тыныс ҡына иҙерәп ятҡан яландан ҡар бураны борҡотоп сабып килеп сыҡҡан һыбайлылар ирекһеҙҙән асфальт юлдан елеп барған машиналарҙы туҡтарға мәжбүр итте. Әйтерһең дә, ҡапыл тарих тәгәрмәсе кирегә әйләнде... Хәрби кейемдәрҙә ҡандай ал байраҡ һәм Башҡортостан флагын тотҡан башҡорт ғәскәрҙәренең ҡунаҡтарҙы Баймаҡ районы сигенән ҡаршы алыуы һәм Темәс урамынан оҙатып барыуы (тарихи реконструкцияны ойоштороусы - Өмөтбай мәктәбенең тарих уҡытыусыһы Айҙар Мәжитов) форумда ҡатнашыусыларҙы ысынлап та теүәл бер быуат элекке заманға алып ҡайтты.**

# БАЙРАМ...

## Баймаҡса булды!



- Арҡаҙаштарым минең! Февраль революцияһынан һуң бик күп эштәр атҡарҙыҡ. Бер түгел, ике ҡоролтай йыйҙыҡ, ике дивизиянан, бер полктан ғәскәр төҙөнөк. Башҡорт автономияһын булдырыу, аҫабалығыбыҙ, динебеҙ, милли территориаль азатлығыбыҙ өсөн күп көс һалдыҡ! Хәҙер мәмләкәттә тәртипһеҙлек! Большевиктар бөтә халыҡтарға ирек бирә, ләкин тәртипһеҙлек менән бергә бирә. Башҡорт халҡы быңдай "бүләкте" ҡабул итә алмай. Башҡорттар бер-береһе менән һуғышырға тейеш түгел, сөнки башҡорт большевик та, меньшевик та түгел. Ул - башҡорт! - Зәки Вәлиди Бөрйән-Түңгәүер кантисполкомының административ үҙәгенең икенсе ҡатында урынлашҡан балкондан милләттәштәренә шулай тип өндәште. Арҡаҙашы эргәһендә баҫып торған Муса Мортазин да тыныс ҡала алманы: "Күрше халыҡтар менән кәңәш ҡороп булмаҫмы? Улар ҙа башҡорттар менән бергә эшкә тотоноп, мөхтәриәт алыу юлында булырға тейеш", - тине. Шәйехзада Бабичтың: "Иптәштәр, ике миллионлы башҡорт халҡының, юҡ-бар сәйәси уйындарға ҡыҫылып, уйынсыҡ булыуы мөмкин түгел. Беҙҙең сәйәсәт - фәҡәт ерле мөхтәриәт алыу. Керенский хөкүмәте беҙҙең теләктәрҙе атҡарырға ашыҡмаһа ла, беҙ халҡыбыҙҙы ойоштороп бөттөк", - тигән һүҙҙәре һәм ялҡынлы шиғыры Зәки Вәлидиҙе дәртләндереп ебәрҙе, милли идеяларҙы тормошҡа ашырыу өсөн ғәскәрҙәрҙе тупларға, башҡорт автономияһын раҫлау, парламент төҙөү өсөн башҡорттар ҡоролтайы йыйырға фарман бирҙе һәм үҙенең Мәскәүгә юлланыуын әйтте. "Маҡсатым - Лениндың үҙен күреп һөйләшеү. Башҡорт йөмһүриәтенең киләсәге - фәҡәт беҙҙең ҡулда! Халҡыбыҙ яҙмышын билдәләр осорҙа беҙҙең кеүек сая егеттәргә йоҡлап ятыу килешмәҫ! Нисәмә быуаттар буйына халҡыбыҙ үҙенең бойондороҡһоҙ, үҙ аллы дәүләтен төҙөргә тырышты. Азатлыҡ, ирек өсөн күпме яуҙар ҡубарылып, күпме батыр башын һалды! Уянырға ваҡыт, иптәштәр!"

...Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт академия драма театры актерҙары башҡарыуындағы театрлаштырылған был тамашала "Әхмәтзәки Вәлиди"ҙең Темәстәге хөкүмәт бинаһынан Башҡортостандың мөстәҡиллеге хаҡында иғлан итеүе башҡортмон тигән бер кемде лә битараф ҡалдырмағандыр. Башҡорт автономияһы иғлан ителеүгә 100 йыл тулыуға арналған һәм республиканың башҡорт йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, 16 район һәм ҡаланың ҡоролтай етәкселәре һәм ағзалары, тарих уҡытыусылары, тыуған яҡты өйрәнеүселәр ҡатнашҡан "Берҙәмлектә - көс!" форумы юғары рухта башланып, Темәс мәҙәниәт йортонда шундай уҡ рухта дауам итте. Баймаҡ район хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлшат Сирғәлина ҡунаҡтарҙы сәләмләп һүҙ әйткәндән һуң, түңәрәк ҡорҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов, тарихсылар Азат Ярмуллин, Нурислам Ҡалмантаев, Айҙар Мәжитов, филология фәндәре кандидаты Искәндәр Сәйетбатталов, "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге төбәк-ара йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Риф Иҫәнов телмәр тотто. "Аҡ тирмә" Башҡорт милли-мәҙәни үҙәге етәксеһе Рәйсә Күзбәкованың Берҙәм дәүләт имтиханы тип, туған телгә иғтибарҙың кәмей барыуы хаҡында әсенеп бәйән итеүе лә күңелләргә үтеп ингәндер. Хаҡ һүҙҙәр әйтелде: "Бөгөнгө йәшәйешебеҙ - айсбергтың өҫкө өлөшө булһа, уның шаңдауы балаларыбыҙҙа сағылыш табасаҡ. Заман түгел, ә үҙебеҙ үҙгәрҙек, БДИ тип халҡыбыҙ тарихынан быуаттар буйы һынау үткән традицияларыбыҙҙан ситләштек. Балалар, ҡарттар йорттары барлыҡҡа килде. Шул - айсбергтың күренмәгән өлөшө ул. Йола тотҡан яҙлыҡмаҫ. Тормошто үҙгәртәм тиһәк, үҙебеҙҙән башлайыҡ!" - тип саҡырҙы Рәйсә Абдрахман ҡыҙы.

Краснокама районынан килгән төньяҡ-көнбайыш башҡорто - Башҡорт Хөкүмәте ағзаһы, йәмәғәт һәм дәүләт эшмәкәре, башҡорттарҙың данлыҡлы Гәрәй ырыуы вәкиле Илдархан Мутиндың вариҫы Радик Бәхтиевтың иһә: "Беҙҙең Гәрәй, Ирәкте, Ҡырғыҙ, Йылан ырыуҙары һәм башҡа төньяҡ-көнбайыш башҡорттары үҙҙәренең балаларын: "Һеҙ - башҡорттар, барығыҙ, башҡорт халҡы менән бергә булығыҙ", - тип өгөтләп, Өфөгә уҡырға ебәрә. Ә Өфөлә беҙең балаларҙы "Һеҙ татар!" тип илатып ҡайтаралар! Беҙҙе 100 йыл инде башҡорт тип һанамайһығыҙ! Бөйөк Ватан һуғышында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы составында беҙҙең олатайҙар бергә һуғышҡан. Уғаса Гәрәй ырыуы башҡорттары Мутиндар ошо Башҡорт автономияһын төҙөгәндә иң беренсе рәттә торған! Ҡасан беҙҙе башҡорт тип һанай башлаһығыҙ икән һуң?" - тип әсенеп сығыш яһауы ла берәүҙе лә битараф ҡалдырманы.

...Башҡорт автономияһы иғлан ителеүгә 100 йыл тулыу уңайынан ойошторолған "Берҙәмлектә - көс!" форумы тамам. Әммә ҡан ҡойоштар аша яулап алынған азатлығыбыҙ тарихын киләһе быуынға танытыу буйынса атҡараһы эштәр башлана ғына әле...

**Айгөл ИҘЕЛБАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18, 20 март Премьера "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия 12+

**21 март "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 март "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+

**23 март "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**17 март "Три поросенка"** (С. Михалков) 0+

**18 март "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер) 0+

**Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00**

**21, 22 март "Урал батыр"** (В. Аношкин). Башлана 18.00 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 март "Аһ, ошо ғашиҡтарҙы!"** (Р. Кинйәбаев), комедия 12+

**23 март "Бейеүҙәрҙә минең асылым"** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Дамира Амангилдинаның ижад кисәһе 6+

## ҠАЙҒЫ УРТАҠЛАШАБЫҘ

13 февралдә Башҡортостан радиоһы дикторы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Әхәт Мортазин** ҡапыл вафат булды. Был көндө радио тулҡындарында уның "алтын тауыш"ы һуңғы тапҡыр яңғыраны. Уға 6 февралдә 59 йәш тулғайны.

Бөтә коллектив менән Әхәт Мотаһар улының вафаты айҡанлы тәрән ҡайғыбыҙҙы белдерәбеҙ һәм уның ғаиләһенең ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ. Коллегабыҙ ысын интеллигент, изгелекле өлкән иптәш, педагог-остаз, һәр ваҡыт кәңәше менән дә, тәжрибәһе менән дә уртаҡлашырға әҙер торған кеше булып беҙҙең күңелдәрҙә оҙаҡ һаҡланыр.

**"Башҡортостан" телерадиотапшырыуҙар компанияһы дәүләт унитар предприятиеһы коллективы.**

* * *

Коллегабыҙ, "Башҡортостан" телерадиотапшырыуҙар компанияһы етәксеһе урынбаҫары Тәнзилә Үлмәҫбаеваның тормош иптәше - Башҡортостандың халыҡ артисы **Әхәт Мортазиндың** вафат булыуы сәбәпле, уның ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**БР "Башҡортостан Республикаһы" нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы коллективы.**

* * *

Билдәле диктор, Башҡортостандың халыҡ артисы **Әхәт Мортазиндың** ҡапыл вафат булыуы сәбәпле уның ғаиләһенең, туғандарының, яҡындарының, дуҫтарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ. Әхәт Мотаһар улының яҡты иҫтәлеге радио тыңлаусылар, телевизор ҡараусылар һәм коллегаларының хәтерендә оҙаҡ һаҡланыр!

**Республика халыҡ ижады үҙәге коллективы.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1439 һижри йыл.***

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 19 (1) дүшәмбе | 5:53 | 7:23 | 13:30 | 17:55 | 19:25 | 20:55 |
| 20 (2) шишәмбе | 5:51 | 7:21 | 13:30 | 17:57 | 19:27 | 20:57 |
| 21 (3) шаршамбы | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:59 | 19:29 | 20:59 |
| 22 (4) кесе йома | 5:46 | 7:16 | 13:30 | 18:01 | 19:31 | 21:01 |
| 23 (5) йома | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 18:03 | 19:33 | 21:03 |
| 24 (6) шәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 18:05 | 19:35 | 21:05 |
| 25 (7) йәкшәмбе | 5:38 | 7:08 | 13:30 | 18:07 | 19:37 | 21:07 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Миәкә районының Нарыҫтау ауылынан ҡәҙерлеләребеҙ **Шәмсинур Миҙҙәт ҡыҙы менән Хәниф Ғиззәт улы МИҢЛЕЙӘРОВТАРҙы** бергә тормош ҡороп йәшәүҙәренә 40 йыл тулыу айҡанлы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Тормош юлында бер-берегеҙгә терәк булып, бер-берегеҙҙе ҡәҙерләп, хөрмәтләп, яман күҙҙәрҙән, насар һүҙҙәрҙән һаҡлап, беҙгә иһә тормоштоң матурлығын күрергә, ҡәҙерен белергә, иң мөһиме - яратырға өйрәткәнегеҙ, ел-ямғырҙан ҡурсалағанығыҙ, матур тәрбиә биргәнегеҙ, тәү аяҡ баҫҡан йортобоҙҙа ҡолас йәйеп ҡаршы алғанығыҙ, һағынып көтөп торғанығыҙ, ғөмүмән, донъялағы иң шәп атай-әсәй булғанығыҙ өсөн мең рәхмәт һеҙгә!

Киләсәктә лә күңелебеҙҙең ҡояшы, тормошобоҙҙоң йәме, аҙашҡанда яҡты маяҡ булып, ауырыу-һыҙлауҙы белмәй, бәхетле ғүмер кисереүегеҙҙе теләйбеҙ.

**БАЛАЛАРЫҒЫҘ.**

*ИҒЛАН*

Редакцияға тәжрибәле **водитель** һәм башҡорт телен яҡшы белгән **версткалаусы инженер** талап ителә. 253-25-44 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.

ЗАУЫҠ

Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА



## Туған тел

Осорҙарҙы осорҙарға
Аса торған аҫкысым.
Бикле торған йөрәгемә
Хистәрҙе астырғысым.
Аҫҡан һайын асыла барған
Сере бикһеҙ һандыҡ ул.
Һөйөклө ул, һәр саҡ гәзиз,
Һәр ваҡыт та таңһыҡ ул.
Күңелдәрҙе күңелдәргә
Астыра торған моңом.
Ишектәре һәр саҡ асыҡ,
Ябылмай торған аңым.
Быуындарҙы быуындарға
Аса торған тылсым ул.
Быуаттарҙан быуаттарға
Оса торған осҡон ул.
Йәнебеҙҙә һайрап торған
Рухыбыҙ ҡошсоғо ул.
Халҡыбыҙҙы йәшәтеүсе
Мәңгелек йырсыһы ул.

## Тора-тора мендем Торатауға...

Тора-тора мендем Торатауға...
Тора-тора, ҡат-ҡат уйландым.
Тәү булмышын һаҡлап ҡалған тауҙа
Донъя тураһында уйландым.
Ваҡыттарҙың тәрән төптәренән,
Замандарҙан өҫкә ҡалҡҡан тау,
Сал тарихтың мәғрүр түбәһенән,
Бейек үрҙән ергә баҡҡан тау!
Әүерелмәҫ һис тә ятҡан тауға,
Ташҡайҙары булған сағында.
Сит таштарҙан ул бит өйөлалмаҫ,
Тора-тора ҡалҡмаҫ тағын да.
Ҡул һуҙалар уға ҡомһоҙ ҡулдар -
Мал ҡолдары, нәфсе ҡолдары.
Ҡаршы тора ҡолға ҡол булмаған
Торатауҙың азат улдары.
Торатауҙай торған был улдарҙың
Бейеклектән баҡҡан башы бар.
Тыуғанынан алып ахырғаса
Үҙенеке булған ташы бар.
Тауҙар тора ташы булһа ғына,
Башы булһа ғына ил тора.
Башһыҙҙарға берүк көн ҡалмаһын!
Көн ҡалдымы, алда өң тора.
Тау ораны - донъя оранибыҙ,
Ситтәрҙеке булған өн түгел.
Ят бауырға, эй, һеҙ, азаматтар,
Ҡаршы торалмаҫлыҡ ир түгел!

## Тимәк...

Ауаз һала икән, сабый тере,
Үле булып, тимәк, тыумаған.
Тулғаҡ тотоп тапҡан, көткән бала,
Тимәк, юҡҡа тыпырсынмаған.
Нурҙар һибә икән, ҡояш һап-һау,
Уның менән бер ни булмаған.
Тимәк, төпһөҙ упҡын төптәренә
Ул аумаған, күк убылмаған.
Тулҡын шаулай, тимәк, дарья тере,
Елдәр иҫән, иҫә, тулғана.
Тимәк, имен ер-һыу, аман һауа,
Тимәк, донъя әле тын ала.
Кешелектең көрәш майҙанында
Ауаз һала халҡым - башҡортом,
Беҙ йәшәйбеҙ, тимәк, беҙ теребеҙ,
Өнө тығылмаған хаҡлыҡтың.

## Ҡайҙа беҙ?

Маңлайҙағы яҙмышыбыҙ,
Мөһөрөбөҙ, тамғабыҙ
Нимә һөйләй икән беҙгә?
Милләттәштәр, ҡайҙа беҙ?
Ҡайҙа инек, ҡайҙа хәҙер?
Ниндәй хәлгә ҡалғанбыҙ?
Нимә юрай, ни ҡарҡылдай
Күрәҙәсе ҡарғабыҙ?
Яуланған үр түбәһендә -
Торабыҙмы тауҙа беҙ?
Ҡайҙа енеү, ҡайҙа уңыш?
Башҡорттарым, ҡайҙа беҙ?
Әллә инде килеп еттек,
Әллә инде һайҙа беҙ?
Тәғәрәмәҫ өсөн аҫҡа
Һамандамы яуҙа беҙ?
Әйтә алабыҙмы икән:
Артта түгел, алда беҙ!
Бейектәме, түбәндәме?
Ҡайҙа һуң беҙ? Ҡайҙа беҙ?

## Тилмереш

Ер өҫтө тулы хазина,
Ер аҫты - алтын-көмөш.
Аянысы ярлы булыу
Байлыҡ эсендә килеш.
Һыуға һыуһау һыу эсендә,
Һауа барҙа тонсоғоу,
Ерле килеш ерһеҙләнеү,
Күҙ ҙә йоммай төн сығыу...
Керпек ҡаҡмай уйлап ятам:
Ниндәй хәлдәргә төштөк?
Илле килеш илһеҙләнеп,
Иҫһеҙләнепме бөттөк?
Башлы килеш башһыҙланып,
Ашһыҙланып барабыҙ.
Яҡынаймай, байманлыҡтан
Алыҫлаша арабыҙ.
Ер өҫтө тулы хазина,
Ер аҫты - алтын-көмөш.
Йә, илкәйем, ос-ҡырыйһыҙ
Был ниндәйен тилмереш?

## Ирек

Йәберсенән һоранып,
Тел теләнеп алынмай.
Язасыға ялынып,
Ил инәлеп алынмай.
Ярҙам бит ялбарылмай
Ярҙан этеүселәрҙән,
Эткеләп тә тәрткәләп,
Төкөп китеүселәрҙән.
Күтәреп торғоҙорға
Ҡулын һуҙа бүтәндәр,
Түгел теләһә кемдәр,
Түгел әкәм-төкәмдәр.
Тубыҡланыу, теҙләнеү -
Меҫкенлек, ҡоллоҡ, хәсрәт.
Йәлләүҙә йәлләү булмай,
Ҡатилда булмай шәфҡәт.
Бирелгән бүләк түгел
Инәленмәгән илем.
Яулап алынған ирек -
Теләнелмәгән телем.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/ китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туктамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

***97. Флорид Бүләков "Пьесалар".*** 2008 йылда баҫылған китапта авторҙың "Саҡ-суҡ", "Гөлбәзир", "Таштуғай", "Шырау", "Яран гөл" тигән пьесалары индерелгән. Драматургтың төрлө темаға ижад ителгән пьесалары Башҡортостан сәхнәләрендә генә түгел, Рәсәй һәм сит илдәр театрҙарында ҙур уңыш менән ҡуйыла. Билдәле драматургтың ижады менән театрға килеп танышыу мөмкинлеге булмаһа, уның пьесаларын уҡып сығырға кәрәк.

Сөнки башҡорт кешеһе мәҙәниле, белем даирәһе киң булырға тейеш.

***98. Мөхтәр Әхтәмов "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге".*** Был ҙур китап һәр башҡорт кешеһенең шәхси китапханаһында лайыҡлы урын биләрлек йыйынтыҡ. Унда тупланған хазинаға торошло һүҙҙәр бөтә заманда ла кәрәкле, актуаль яңырай. Сөнки уларҙа быуаттар буйлап аҡыл һәм тәжрибә тупланған. Һүҙлек ата-бабаларҙың аҡылын, кәнәшен сағылдырыу менән генә файҙалы түгел, телде, фольклорҙы өйрәнеүсе ғалимдар өсөн дә бик уңайлы. Автор унда башҡорт мәҡәлдәре һәм әйтемдәрендә ниндәй һүҙҙәр йыш ҡулланылыуын да күрһәтә алған. Башҡорт халҡының теле, холоғо, йолаһы, ҡағиҙәһе, йәшәү рәүеше, ғөрөф-ғәҙәттәре, инаныстары, донъяға ҡарашы, тормош тәжрибәһе йыйынтығы ул, Мөхтәр Әхтәмов төҙөгән һүҙлек. Уны "Башҡорт китабы топ - 100+" акцияһы исемлегенә индереү мотлаҡ кәрәк.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАЛАҠЛАП ЙЫЙҒАНДЫ...

## табаҡлап түкмә

Улың менән ирешһәң, түрендә ултырып ireш, кейәүең менән ирешһәң, ишек тотҡаһын тотоп ireш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йөрәктең йыйырсыҡтары булмай, ул яра йөйҙәренән тора.

**(Колетт).**

Изгелек беҙҙе матурлай, яуызлыҡ йәмһеҙләй - был хәҡиҡәт өсөн мин үтелгән йылдарыма бурыслы.

**(Микеланджело Буонаротти).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Иренең йәберһетеүҙәренән арыған бер ҡатын Уҡытыусыға килә һәм үҙенең хәле тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләй:"**

**- Ирем яратмай мине. Ул мине гел генә кәмһетә, уныңса, мин насар хужабикә, ҡулымдан бер эш тә килмәй. Иремә һис нисек ярай алмайым...**

**- Уға ярарға тырышма ла... - ти Уҡытыусы. - Һин бына тәҙрә аша урамға сығырға маташҡан күбәләккә оҡшағанһың. Нисек кенә бәргеләнһә лә, күбәләк быяланы ватып сыға алмаясаҡ. Ләкин ул быны белмәй, шуға ла ул мөмкин булмағанды эшләргә ынтыла. Күбәләктән айырмалы, һин бит ирең бер нисек тә ярай алмаясағыңды беләһең, ләкин һаман мөмкин булмағанды эшләргә маташаһың...**

**- Улайһа, миңә ни эшләргә һуң? Уның үҙемә насар мөнәсәбәтен нисек үҙгәртергә? - тип һорай ҡатын.**

**- Уның мөнәсәбәтен үҙгәртергә тырышырға ярамай. Ул бит һиндә нимә күрергә теләһә, шуны ғына күрә. Һин үҙеңә булған мөнәсәбәтендә үҙгәрт. Һиндә һине яратҡан Һинең бар. Уны тыңла. Ул ғына һиңә дөрөҫ кәңәш бирер...**

**Өйөнә ҡайтҡас, ире тағы ҡатынын әрләй, йәберләй башлай. Уҡытыусы кәңәше буйынса, ҡатын быға тиклем таныш булмаған тауышты - Үҙен ишетергә теләп, иренең мыҫҡыллауҙарына иғтибар итмәгәнгә һалыша. Ләкин иренең тауышы һаман да ҡолағына салынып, уның йөрәген ҡанһырата. Ҡатын, гәҙәтенсә, илар сиккә етеп, ирендәре дерелдәй башлауы була, ҡапыл ҡолағына "Мин һине яратам, һин иң яҡшыһы, иң матуры", тигән тауыш ишетелә. Иренең һәр әренән һуң ҡатындың йән тауышы "Ә мин һине яратам..." тип ҡабатлай. Ошо көндән һуң ҡатындың тормошо үҙгәрә. Ул иренең ҡылыштарына һәм һүҙҙәренә, мыҫҡыллауҙарына иғтибар итеүҙән туктай. Ире лә ҡатынындағы был үҙгәреште күрә. Үҙенең ҡыҫҡырыуҙарының, түҙныуҙарының кире ҡаҡлығын, ҡатынының уларҙы ишетмәүен һәм шәйләмәүен аңлай һәм... Үҙ ҡылығынан үҙе ояла башлай, ауыҙына һыу ҡаба. Ҡатынына иғтибарлыраҡ бағып ҡарап, уның иң матуры икәнен аңлай һәм уға яңынан ғашиҡ була..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирләт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 475/03